ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

20-26 июнь (һөтай) 2020

№25 (911)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Сирләүселәр һөйләй...



6

Бөрйәндәрҙең...

Айһылыуы үә Таңһылыуы



8-9,11

Яуын бутҡаһы йыйыны



12

Насар ғәҙәттән...



13

ТВ-программа 14

**ИҒТИБАР! МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!**

***2020 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу тамамланып килә. Алты айға яҙылыу хаҡы 694 һум 34 тин. Почтальондан яҙҙырыу мөмкинлеге булмаһа, өйҙән сыҡмай ғына яҙылыу өсөн "Почта России" podpiska.pochta.ru сайтына инеп, эҙләү һыҙығында "Киске Офо" тип, үҙегеҙҙең адресты, исем-фамилияны, яҙылыу осорон яҙып, кәрзингә күсәһегеҙ ҙә, банк картаһы менән онлайн түләйһегеҙ.***

***Әйҙәгеҙ, гәзитебеҙгә яҙылып, дуҫлығыбыҙҙы, берҙәмлегебеҙҙе нығытайыҡ!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Май, июнь айҙары байрамдарға бай булһа ла, сир арҡаһында күңел асыу ҡайғылары китеп тора. Байрамдарһыҙ күңелһеҙ түгелме?

***Айһылыу КОТЛОБАЕВА, хеҙмәт ветераны:*** Байрамдарһыҙ күңелһеҙ түгелме, тигән һорау мине, бер яҡтан, аптыратты. Миңә, ғөмүмән, бер ваҡытта ла күңелһеҙ түгел: бармы байрам, юҡмы - минең күңел торошо уға бәйләнмәгән. Байрамдар гөрләп торғанда ла кемгәлер күңелһеҙ булыуы ихтимал - шуныһы ла бар бит. Мәҫәлән, минең былай ҙа байрамдарға йөрөргә лә, ҡайҙалыр барып күңел асырға ла әүәҫлегем юҡ, миңә үҙем менән генә лә, яҡындарым, туғандарым менән өйөмдә генә ултырыу ҙа күңелле. Шундай кешемен, күрәһең. Мине өйөм тартып ҡына тора гел, ситтә йөрөүҙән йәм тапмайым, әммә тәбиғәткә сығып йөрөргә яратам. Әле быуына пандемия арҡаһында үҙизоляция иғлан ителгәс, ҡайһы берәүҙәр сыр-сыу килде: күпме бикләнеп ултырырға була, йәнәһе, арытты, аҡылдан яҙырға мөмкин, фәлән дә фәсмәтән... Бындай кешеләргә мин бик аптыраным: нисек инде кешегә үҙ-үҙе менән күңелһеҙ булыуы мөмкин? Етмәһә, тыуған йортонда, яҡындары янында? Кешегә үҙ-үҙе менән күңелһеҙ икән, тимәк, уның "эсе" буш! Ул шул тиклем дә тышҡы донъяға, башҡа кешеләргә, хатта уларҙың тормош рәүешенә, ғәҙәттәренә, фекеренә бәйле, уларҙан башҡа тормошонoң мәғәнәһе юҡ, тимәк. Дөрөҫ, төрлө холоҡло кеше бар: берәүҙәр аралашмай тора алмай, ә икенселәргә ул кәрәкмәй. Ләкин бында төп сәбәп кеше характерына бәйле түгел, минеңсә, ә кешенең эске донъяһында. Бәлки, ҙур ҡала ығы-зығыһы ялҡыталыр. Унан һуң бөтөн ғүмер эштә үтеп китте, өй йәме, өй ҡото күреп, ләззәтләнеп ултырып булманы. Шуға ла минең өсөн үҙ өйөмдә үҙ көйөм тип йәшәгән һәр көнөм, имен-һау аттырған һәр таңым - байрам. Бер башҡорт ҡатыны - үҙебеҙҙең блогерша яҙғанса, иртәнсәк тороп, ҡояш кеүек түңәрәк, телеңде йоторлоҡ ҡоймаҡтар ҡойоп, яҡындарың менән сәй эсеү ҙә - үҙе байрам бит ул, күңел хөрлөгө, һәм мин был һүҙҙәр менән килешәм. Үҙең өсөн байрамды үҙең яһайһың, шунда ғына уның йәме лә, тәме лә була.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ШУНДАЙ ТАРИХ...

# САЛАУАТ ЮЛАЕВ ИСЕМЕ...

## яуға күтәргән

**Бөйөк Ватан һуғышындағы Еңеүгә халыҡ араһында алып барылған патриотик эш тә мөһим өлөш индерә. Әгәр һуғышҡа тиклем пролетариаттың интернациональ берҙәмлегенә генә иғтибар бирелһә, 1939-1940 йылдарҙағы совет-фин һуғышы был идеяларҙың дөрөҫ булмауын күрһәтә. Шуға күрә 1941 йылдың 22 июнендә хәрби хәрәкәттәр башланыу менән ул Бөйөк Ватан һуғышы тип иғлан ителә һәм Рәсәй патриоттарының исемдәре күтәреп сығыла.**

1937 йылғы репрессиялар яңы ғына булған ваҡиғаларҙан геройҙар эҙләүҙең хәүефле булыуын күрһәтә. Граждандар һуғышы геройҙары ҡапыл "халыҡ дошманына" әүерелә. Шуға күрә Башҡорт АССР-ында, мәҫәлән, һуғыш алды йылдарында башҡорт эпосы персонаждарына һәм шағир, ғәҙеллек өсөн көрәшеүсе батырыбыҙ Салауат Юлаев исеменә йөҙ борола. Степан Злобиндың уҙған быуаттың 20-се йылдарында уҡ Салауат Юлаев темаһы буйынса эшләүе һәм романының беренсе вариантын баҫтырыуы осраҡлы түгел. Яков Протазанов ошо роман сценарийы буйынса ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә "Салауат Юлаев" фильмын төшөрә. 1941 йылдың февралендә экрандарға сыҡҡан фильм ил буйынса киң танылыу яулай. Ул СССР халыҡтарын башҡорт халҡының геройы менән таныштыра, Пугачев хәрәкәте тарихын иҫкә төшөрә. Шундай шарттарҙа 1942 йылда Өфө паровоздар ремонтлау заводында бронепоездарҙың 25-се айырым дивизионына ингән "Полководец Суворов" һәм "Александр Невский" бронепоезы эшләнеүе лә юҡҡа түгел. Икенсе йылына Өфөнән фронтҡа "Өфө" һәм "Салауат Юлаев" бронепоезы китә. Улар бронепоездарҙың 60-сы айырым дивизионында һуғышта ҡатнаша. 1943 йылда ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы ҡарары менән Салауат Юлаев исемендәге 1292-се танкыларға ҡаршы истребитель полкы формалаштырыла. Фронтта ул дошман танкыларын юҡ итеп, фиҙаҡәр һуғыша. Шулай итеп, 1943-1945 йылдарҙа Ҡыҙыл Армияла башҡорт халҡының милли геройы исемен йөрөткән ике хәрби часть була. Бөйөк Ватан һуғышында XVIII быуаттың халыҡ батырҙары, бигерәк тә милли батырҙары хөрмәтенә аталған башҡа хәрби частар булмай. Бынан тыш, республика халҡынан йыйылған аҡсаға "Салауат Юлаев" самолеты ла авиация полкы составында һуғыша.



**Рәмил РӘХИМОВ,**
**тарихсы, Рәсәй хәрби-тарихи йәмғиәтенең Башҡортостан бүлексәһе етәксеһе.**

12+

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ҠАЙҘА ЙОҠА, ШУНАН ҺЫНА



**Киң мәғлүмәт сараларында, үҙкүрсәлау шарттарында йәшәгән ғаиләләрҙә низағтарҙың һаны бермә-бер артыуы тураһында хәбәрҙәр күренә.**

Был күренеш көтөлмәгән хәл түгел, әлбиттә. Юҡ талаштыра, бар яраштыра, тиҙәр. Был осраҡта иң төптә ятҡан, матди генә түгел, хисле бер ҡыл үҙен белгертә. Өҙөләм-өҙөләм тип кенә торған аралар килеп тыуған көсөргәнешкә сыҙамай. Иртәнге сәйҙе бергә эсеп, кисен яҙа-йоҙа аралашып, түшәк булған ике кеше сараһыҙҙан көнөҙөно бергә булырға мәжбүр. Ҡасандыр һөйөшөп ҡауышҡан хәлдә лә, хистәренең һүрелгәнен, йә һүрәнәйгәнен һиҙмәй ҙә йөрөгәндәрҙер. Эшкә мәшғүл булып, уртаҡ шөғөлдәре, ниәттәре, хыялдары ла булмағандыр. Ситтән ҡарағанда өлгөлө, теүәл ғаилә булыуҙары ла мөмкин. Аралар һыуыныуында килеп тыуған аҡсаһыҙлыҡ та ҙур роль уйнай, әлбиттә. Нимә генә тимә, ҡайҙа йоҡа, шунан һына.

Һәм тағы бер статистика: хәмер һатыу күләме был осорҙа 40 процентҡа артҡан. Хөкүмәт араҡы һатыуҙы ваҡыт менән сикләү сараһын да ҡулланып ҡараны. Әммә был беҙҙең бар сетерекле хәлдәрҙән сығыу юлын яҡшы белгән халыҡҡа кәртәме инде? Күптәр төп эшенән буш ваҡытты файҙаланыуҙың тик бер генә юлын күрә - хәмер йотоу. Ғаилә низағтарының тағы бер сәбәпсеһе - шул.

Иҡтисадтың ниндәй кимәлдә юғалтыу кисерәсәген әйтеп тә тормай, илебеҙҙең бизмәндәргә һалып үлсәп тә булмаҫтай социаль тетрәнеүен күҙ алдына килтереүе лә ҡурҡыныс. Хәйерселек һыҙығы артында йәшәүселәр һаны бик күпкә артасаҡ, тиғән фараздар ҡурҡыта. Ауылдарҙа был хәлдәр әллә ни һиҙелмәй ул. Ҡалаларҙағы һымаҡ, беҙ дүрт мөйөштә бикләнмәгәнбеҙ. Ҡыҙып китһәң, ишек алдына сығып, һыуынып инергә лә була. Текмә аша күршеңә түгелергә лә мөмкин. Мал-тыуарын үҙе бер күңел дауаһы. Психологтар асыуҙы 3-5 минуттан артыҡ һаҡламаҫҡа кәңәш итә. Йә "пар сығарырға", йә булмаһа онотоорға, кисерергә кәрәк. Күңелгә һалып ҡуйған асыу һаулыҡ өсөн бик мәкерле дошман. Ҡасан да булһа ул һине тәҙәлмәслек сиргә тарыта.

Әйткәндәй, беҙҙең ғаиләлә ирем тарафынан уйынлы-ысынлы шундай ҡағыҙ булдырылған (карантиндан алда әле ул): үпкәләшеү, әрләшеүҙән һуң "Өс минут" ҡына ҡылтайып ултырырға рөхсәт. Күберәген миңә ҡағылған ҡағыҙ был. Беҙ, ҡатын-ҡыҙ, юҡ нәмәнән яңъял сығарып, үҙебеҙ уйлап сығарған юҡбарға үҙебеҙ ышанып ултырған Алланың нәфис заттары бит инде. Мин дә шулай, ҡайһы саҡ юҡ-барға йә туҙынам, йә үпкәләгән булам. Әләгешеп китһәк, ирем "Өс минут!" тип сәғәткә ымлай һала, ҡалайтаһың, күнәһең инде. Ҡағыҙ бит. Ғөмүмән, беребеҙҙең күңел торошон икенсебеҙ бер ҡараштан аңларлыҡ, сама белерлек йәшәгәнбеҙ инде. Ә йәш ғаиләләр, минеңсә, хәүеф аҫтында. Шуға ла уларға ошондай әфтиәк: түҙергә, аңларға, сабыр булырға, кисерә алғанды кисерергә, сәбәләнмәскә, бер-береңә сүп өймәскә, күңелеңде япмаҫҡа. Үҙ ғаиләңдә генә түгел, йәмғиәттә, башҡалар араһында ла күҙәтелергә тейешле ҡағиҙәләрҙер былар...

**Наилә ХАМБАЛЕЕВА.**

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## Май, июнь айҙары байрамдарға бай булһа ла, сир арҡаһында күңел асыу ҡайғылары китеп тора. Байрамдарһыҙ күңелһеҙ түгелме?

(Башы 1-се биттә).

***Миңлеғәфүр ЗӘЙНЕТДИНОВ, ҡумыҙсы, Башҡортостандың халыҡ артисы, Ш.Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы һәм халыҡ-ара конкурстар лауреаты:*** Байрамдарһыҙ бигүк күңелленән түгел, әлбиттә, бигерәк тә бар ғүмерҙәре сәхнәләрҙә үткән, тамашасы иғтибарына өйрәнгән артист халҡына, шулай ҙа байрам юҡ, тип бошоноп ятыу ҙа килешкән эш түгел. Уның ҡарауы, туҡтауһыҙ гастролдәрҙә, ярыштар һәм конкурстарҙа йөрөү урынына ике айлап бит инде хәҙер өйҙә, балаларың, ғаиләң янында булыу ҙа бик яҡшы. Ғаилә ансамблебеҙ репертуарын ҡайтанан ҡарап сыҡтыҡ әле, яңы көйҙәр өйрәндек, репетициялар үткәреп, элекке программабыҙҙы ла ҡабатлайбыҙ - ижад эше беҙ көнгә лә туҡтап торорға тейеш түгел. Ләйсән ҡыҙымдың миңә тәрлә ҡыҙыҡлы һәм кәрәкле китаптар бүләк итә торған матур ғәҙәте бар. Рәхмәт инде уға - әллә күпме китап уҡып сыҡтым. Былар бит тик файҙаға ғына. Нисек инде шунан өйҙә күңелһеҙләнеп ултырмаҡ кәрәк! Уның өсөн, күрәһегеҙ - ваҡыт та юҡ хатта! Әле лә бына буш ятҡан юҡ. Баш ҡалабыҙҙың И. Якутов паркында үҙебеҙҙең сауҙа нөктәһе бар. Унда беҙ ҡурай, ҡумыҙ, хайран, һыбыҙғы, һандуғас кеүек үҙебеҙ эшләгән милли музыка ҡоралдары, шулай уҡ үҙ ҡулдарыбыҙ менән етештергән көмөш беләҙектәр, алҡа һәм йөҙөктәр, башҡа бик күп биҙәүестәр, башҡортса яҙыулы футболкалар һатабыҙ. Ижад ҡомары хатта унда ла туҡтап ҡалмай. Һатып алыусылар, паркка йөрөргә сыҡҡан ял итеүселәр янībыҙға килеп, музыка инструменттары менән ҡыҙыҡһыналар, һорашалар. Мин уларға ҡурайҙа, ҡумыҙҙа уйнап күрһәтәм. Благовещендан Арсен булам, тип үҙе менән таныштырған егет ике тапҡыр минең концерттарымда ла булған икән, ҡумыҙҙа уйнарға күптән хыялланып йөрөүе хаҡында һөйләне. Унан һуң уйнарға өйрәнеп, ҡумыҙ, хайран һатып алып ҡайтып китте. Ҡатыным Гөлгөнә үҙ ҡулдары менән эшләгән биҙәүестәр ҙә бик күптәрҙең иғтибарын йәлеп итә. Күҙ нурыңды түгеп, хәләл көсөң менән эшләгән әйберҙең энергетикаһы ыңғай була бит - шул да тарта, ахыры, уларҙы беҙҙең янға. Тирә-яғыбыҙҙа "ирекһеҙҙән" тамашасылар йыйылып китә, ә мин уларға "Шайморатов генерал" һәм башҡа башҡорт көйҙәрен уйнап ишеттерәм. Бына шундай изге ғәмәлдәр, яҡты уйҙар менән йәшәргә кәрәктер, тейем. Сир бит ул ваҡытлыса уңайһыҙлыҡ. Беҙҙән әҙ генә сабырлыҡ, түҙемлек кәрәк - бөтәһе лә үтеп китер, Алла бирһә. Позитив көйләнештә бул - сиргә бирешмәсһең, тип юҡҡа әйтмәйҙәрҙер, яҡшы уйҙа булайыҡ, үҙ күңелебеҙҙе ҡайһы саҡ үҙебеҙ ҙә күрә беләйек.

***Гөлнара АҠҠОЛОВА, Ғафури районы Мәндем ауыл клубының художество етәксеһе:*** Байрамдарһыҙ йәшәүе күңелһеҙ ҙә булып китә, ләкин сир тип ҡурҡып ултырып булмай бит инде. Талап ителгән һаҡланыу сараларын күреп, күп кеше йыймайынса ғына онлайн саралар ойоштороабыҙ. Хәҙер бит шуныһы һәйбәт: хатта ҙур булмаған ауылдарҙа ла халыҡ интернет менән дуҫ: бер-береһе менән аралаша, яңылыҡтарҙы белеп тора. Сир тип бойоғоп ултырмаҫ өсөн дә сараһы табылды: тотош ил буйынса һәр төрлө мәҙәни саралар онлайн форматта үткәрелә башланы. Бөтөнләй үк "тере" байрам булып етмәһә лә, барыбер беҙ үҙебеҙҙе бергә һәм ойошҡан итеп тоябыҙ, сараларға ихлас ҡушылабыҙ. Мин дә ил буйынса үҙизоляция иғлан ителгәндән алып онлайн эш режимына күстем. Календарҙағы төрлө байрамдарға, ҡыҙыл даталарға сайтта төрлө мәғлүмәттәр бирә барам. Еңеү көнөнә ветерандарға арнап, видеолар эшләнем, иҫтәлекле фотолар урынлаштырам.Шиғыр уҡыу бәйгеһе, онлайн-концерт ойоштороло. Әлеге көндә яҡташыбыҙ Мәжит Ғафуриҙың 140 йыллығына һәм районыбыҙҙың 90 йыллыҡ юбилейына әҙерләнәбеҙ. Ауылдаштарҙың олоһо ла, кесеһе лә халыҡ шағирының шиғырҙарын - яттан, шулай уҡ проза әҫәрҙәренән өҙөктәр уҡып, видеоларын конкурсҡа ебәрә лә башланы.

Район мәҙәниәт йорто ойошторған сараларҙың да уртаһында булырға тырышабыҙ. 15 май - Халыҡ-ара ғаилә көнөндә "Ғаиләм - ҡәлғәм" тип аталған байрамда ҡатнаштыҡ. Мәндем ауылының абруйлы, өлгөлө ғаиләләре тураһында белешмә биреп, фотоһүрәттәрен үҙебеҙҙең сайтҡа урынлаштырҙым да, уларҙы "Под крышей дома своего" тигән район онлайн конкурсына ла ебәргәйнем, күп тә үтмәй, шуларҙың барыһына ла: Йәнмырҙиндар, Ғафаровтар, Ғәйнуллиндар, Мөхәмәтйәновтар, Мөхәмәтдиновтар, Мөхәмәтҡоловтар, Кәлимуллиндар, Аҡҡоловтар, Аҫылбәковтар ғаиләләренә шәхсән исемләп ебәрелгән электрон сертификаттар алдыҡ. Тағы бер шатлығыбыҙ менән уртаҡлашайым: Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнөнә арналған онлайн-концерт буйынса Мәндем ауыл клубы районыбыҙҙа беренсе урынды яуланы. Райондан килеп ҡотлап, балаларға бүләктәр тапшырып китеүҙәре үҙе бер иҫтәлекле ваҡиғаға торошло булды. Бына шулай, сиргә һис бер сер бирмәй, матур, күңелле итеп йәшәргә ынтыла ауылдаштарым. Билдәле булыуынса, позитив, шат күңелле, унған кешеләрҙе сир ала алмай тигән ырым бар. Шулай була күрһен, бөтәбеҙҙе лә ситләтеп үтһен ул!

***Асия ҒӘЙНУЛЛИНА,Сибай сәнәғәт колледжы уҡытыусыһы, сәсәндәр мәктәбе етәксеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Шөкөр, күңелһеҙләнергә, төшөнкөлөккә бер ҙә генә урын юҡ, сөнки халҡыбыҙҙың боронғо ауыҙ-тел ижады өлгөләрен өйрәнеү, таратыу һәм, ғөмүмән, үҙеңде тулыһынса ошо мөхиткә арнау, уның кәрәклеген тойоп эшләү, йәштәргә өйрәтеү һәр ваҡыт рухи киңәнес тыуҙыра, оло бер күңел байрамына әүерелә. Билдәле булыуынса, 17 апрель Башҡортостанда республика халыҡтарының милли кейеме көнө билдәләнде. Эпидемиологик хәлгә бәйле, байрам онлайн форматта барҙы. Милли кейем аутентикаһы буйынса оҫталыҡ дәрестәре алып барҙым. Сибайҙар "Милли кейемдәрҙә - фотоһүрәт" республика флешмобында ла ихлас ҡатнашты. Эпос һөйләүселәр флешмобын башлап ебәреүем булды, өлкәндәр ҙә, балалар ҙа килеп ҡушылды. Айырыуса Бөрйәндәрҙең ижад ҡомары һөйөндөрҙө. Яңы Монасиптан Гөлдәр Әхтәмова - "Уҙаҡ менән Туҙаҡ", Әбделмәмбәттән Сәлимә Ғарифуллина - "Балаҡарға" эпостарын, Байназарҙан Фәнүзә Ишбаева менән Фәнүзә Аҙанғоловалар "Әйтер һүҙем" мөнәжәтен һөйләп-көйләп, видеоларын яҙҙырып та ебәрҙеләр. Әле бына Республика халыҡ ижады үҙәге милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың тыуған көнө айҡанлы флешмоб иғлан итте. Беҙҙең сәсәндәр мәктәбе лә "Минең исемем - Салауат " республика акцияһына берҙәм ҡушылды. Беҙ был сараға арнап, " Байыҡ сәсәндең Салауат батырға әйткәне" ҡобайырын әҙерләнек. Был эш Байыҡ сәсәндең тыуыуына 310 йыллыҡҡа ла арнала. Күренеүенсә, байрамдар ҙа күп, мәшәҡәттәр ҙә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓19 июнгә мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда 4 792 коронавирус инфекциялы сирле иҫәпләнә. Тәүлек эсендә улар 62-гә артҡан. COVID-19 йоҡторған 4 792 кешенең 2 267-һе һауыҡҡан. Вафат булғандар һаны үҙгәрмәгән һәм 18 кеше тәшкил итә. Һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин хәбәр итеүенсә, сирлеләрҙең күпселеге йәки 82 проценты - 26-60 йәшлектәр. Бөгөн республикала 1030 кеше стационарҙа дауалана, уларҙың 782-һе - ҡәнәғәтләнерлек хәлдә, 207-һенең хәле - уртаса ауырлыҡта, 41-е - ауыр хәлдә. Әле 1625 кеше өй шарттарында дауалана.

✓Һуңғы тәүлектә Рәсәй төбәктәрендә бөтәһе 7 972 коронавирус осрағы раҫланған, 181 үлем теркәлгән. Тәүлек эсендә илдә 10 443 кеше һауыҡҡан. Дөйөм алғанда, бөгөн Рәсәйҙә 569 063 коронавируслы сирле иҫәпләнә. Уларҙың 324 406-һы һауыҡҡан, 7 841 кеше вафат булған.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Беренсе каналдың "Док-ток" ток-шоуында Өфө районы Зубов ауылындағы яңы клиник-диагностика инфекция үҙәге тураһында һөйләне. Рәсәйҙең һаулыҡ һаҡлау министры Михаил Мурашко Башҡортостандан өлгө алырға кәрәклеген билдәләне: "Улар ошондай госпиталдәр төҙөй башлаған тәүгеләр иҫәбендә булды. Түбәнге Новгородтың төҙөлөштө тамамлап килеүен беләм, Татарстанда эш башланды, ләкин икенсерәк технология буйынса. Тиҙ, сифатлы һәм функциональ итеп эшләү - дөрөҫ йүнәлеш ул", - тине ул һәм Башҡортостандағы ҡыҫҡа ваҡыт эсендә төҙөлгән яңы госпиталгә юғары баһа бирҙе.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров дүшәмбе, 15 июндә, оператив кәңәшмә барышында йәмәғәт урындарында бирсәткәһеҙ йөрөргә рөхсәт итте. Йәмәғәт урындарында битлек режимы һаҡлана. Өфөләрҙең уртаса 70 проценты битлек режимын үтәй. Был турала ҡала хакимиәтендәге оператив кәңәшмәлә граждандлыҡ йәмғиәте институттары менән эш итеү идаралығы етәксеһе Артур Ғафаров белдерҙе.

✓РФ Хөкүмәте Премьер-министры Михаил Мишустин 3 йәштән 7 йәшкә тиклем балалары булған ғаиләләргә пособиелар һәм социаль түләүҙәр алыу өсөн справкалар йыйыуҙан азат итеү тураһындағы ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Хәҙер кәрәкле документтарҙы дәүләт органдары ведомство-ара мәғлүмәт хеҙмәттәшлеге ярҙамында аласаҡ. Быға тиклем Рәсәй Президенты Хөкүмәткә социаль ярҙам алыуҙы ябайлаштырыу кәрәклеге тураһында бурыс ҡуйғайны.

✓ *Һәр ағыуға ҡаршы ағыу бар, тигәндәй, эшләп йөрөүсе пенсионерҙарҙың күбеһе "күләгәгә" китте һәм эштәрен дауам итте. Шул уҡ ваҡытта эш биреүсе тарафынан күсерелә торған страховка, һалым суммаһы ла һиҙелерлек кәмене.*



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ГӘЗИТ УҠЫУ...

## ҡанатланып йәшәү ул

**Янырак шулай матбуғат баҫмалары хаҡында һүҙ сыҡҡас, ниндәй гәзит уҡыйһың, тигән һорауға осраҡлы бер танышымдың: "Эй, ҡуй инде, бынауындай ваҡытта гәзит ҡайғыһы бармы..." - тип ҡул һелтәп кенә ҡуйыуы сәмемә тейҙе, ғәрлекте килтерҙе.**

Һөйләгән хәбәре лә үҙенән, ваҡ-төйәк көнкүреш ығы-зығыһынан ары китмәгән, ары киткәне лә шул бер үк аһ-зар, ризаһыҙлыҡ, ил етәкселәрен "ҡырып-һепереп түгеүгә" ҡоролған әрепләү һәм ғәйепләүҙәрҙән генә ғибәрәт был әҙәм янында ултырыуы күңелгә ауыр була башлағас, сиратымды юғалтып булһа ла тиҙерәк тороп китеү яғын ҡараным. Ҡара болот төҫлө ауыр энергетика сорнап алған ине был меҫкен ҡатынҡайҙы. Шул томан эсендә сәбәләнеп, йүнәлешен юғалтҡан юлсыны хәтерләтте ул миңә. Исмаһам, нескә генә еп ишеләй булһа ла ҡояш нуры төшһәсе, яҡтыртып ебәрһәсе шуның донъяһын, тип теләнем мин уны йәлләп. Күрер ине: ете һаның теүәл булып, донъялар имен торһа, йәшәүҙәре - йәннәт бит. Эйе, сир килеп баҫты, күнегелгән тормош тәртиптәрен боҙоп, тыныслыҡты ебәрҙе, йоҡоларҙы осорҙо. Һәр замандың үҙ ауырыуы тиҙәр, ил күргәнде күрербеҙ, иң мөһиме - бергә булырға, позитив булырға, ғауғаламаҫҡа. Бындай ваҡытта кеше, ҡурҡҡанға ҡуш күренә, тигәндәй, юҡ-бар хәбәрҙәргә ышаныусан, алданыусан була, сөнки ысынбарлыҡты сағылдырған мәғлүмәттәргә эйә булмай, психологик яҡтан әҙерлекһеҙлеге асыҡлана. Бына шундай тома һуҡыр-һаңрау хәлендә ҡалмаҫ өсөн янында таянырлыҡ яҡын дуҫтарың, тоғролоҡло юлдаштарың булыу мотлаҡ. Әммә дуҫтарҙың да төрлөһө була, улар ҙа кеше бит: кемеһелер кәйеф ҡоло - күңеле килгәндә генә асылып китеүсән; кемеһенең ваҡыты юҡ, кемеһелер ил-йөрт хәлдәрендә хәбәрҙар түгел, телевизор ҙа ҡарамай, гәзит тә уҡымай.

Бына, ниһайәт, ҡыялатып булһа ла яҙмамдың төп темаһына килеп баҫтым, буғай: иң яҡшы, ышаныслы, тоғро дуҫ һәм юлдаш - гәзит икән ул! Элек тә шулай булды, хәҙер - бигерәк тә, сөнки, баяғыса, һәр кем үҙенә бикләнеп, аралашыу мөхите тарая төшкән бер заманда гәзит кенә үҙенә һәм дә үҙенең ихтирамлы уҡыусыларына тоғро ҡалыуын дауам итә. Дөрөҫ, гәзиттәрҙең дә төрлөһө бар, тиерһегеҙ, ләкин мин үҙем яҡшы белгән, һыналған, тәүге һаны донъяға сыға башлағандан алып айырылғыһыҙ дуҫыма әйләнгән " Киске Өфө" гәзите хаҡында һүҙ алып барам. Килеп тыуған ниндәй генә тормош шарттарында ла объективлыҡ, тигеҙлекте һаҡлап, беҙҙе ағымдағы ил-йөрт хәбәрҙәре менән таныштырып ҡына ҡалмай, уҡыусылары мәнфәғәттәрен дә хәстәрләй: аңлата, кәңәшләшә, даими рәүештә беҙҙең фекер менән дә ҡыҙыҡһына, теге йәки был темаға мәҡәләләр яҙыуыбыҙҙы һорай. Тәүге һанынан алып гәзиттең милли рухиәтебеҙгә тоғролоғо, темаһы юғары кимәлдә алып барыуы, авторҙарының компетентлығы һоҡландыра. Гәзитебеҙҙең тәүге һандарынан алып бөгөнгөһөнә тиклем халҡыбыҙ тарихы, туған тел яҙмышы, рухиәтебеҙ кимәле хаҡында ниндәй генә мәҡәләләр баҫылып сыҡманы ла, исемдәре тарихыбыҙға алтын хәрефтәр менән уйылырлыҡ ниндәй генә ғалимдар, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре, яҙыусылар, уҡытыусылар һәм дә тағы бик күп зыялылар сығыш яһаманы уның биттәрендә!



Ә бит ул әңгәмәләр һәм мәҡәләләр ошо гәзиттән башҡа бер ерҙә лә баҫылмай. Ошо гәзитте уҡып, айырым мөһим мәҡәләләрҙе йыйып, туплап барған кешеләр ҙә бар һәм улар ота ғына: ниндәй бай мәғлүмәткә эйә улар бөгөн. Хәйер, гәзит уҡып, бер аҡыл эйәһе әйтмешләй, ер шарының ҡояшлы яғындағылар менән бергә йәшәү өсөн бер ҡасан да һуң түгел, яҙылырға теләгән, ил-йөрт ваҡиғалары, башҡорт донъяһы яңылыҡтары менән хәбәрҙар булырға теләгән кеше йүнен таба: "Киске Өфө"нөң уҡыусылары сафында булыу, уны даими уҡып, ҡанатланып йәшәү атҡа атланғандай тойғолар бүләк итһә лә, уға яҙылыу хаҡы ат хаҡы түгел бер ҙә. Ярты йылға бер тапҡыр биш-алты йөҙөндө сығарып һалаһың да, 6 ай буйына рәхәтләнеп гәзит уҡыйһың. Тик шуныһы ҡыҙғаныс: ҡайһы бер милләттәштәребеҙ аңында ошо 5-6 йөҙ тәңкә ғәләмәт ҙур байлыҡ булып тойола, ахыры, шулай булмаһа, ошо аҡса был кешеләрҙең милли аңына арҡыры торған һөйәк ишенә әйләнмәҫ ине...

Ғөмүмән, туған телебеҙҙә нәшер ителгән гәзит-журналдарыбыҙға индәрҙе ҡуйып, уларҙың рухи ҡиммәтен аңлап, баһалай белеү - асылда, уның уҡыусыларының да аң кимәлен билдәләп тора шул, сөнки фәҡәт бергәләшеп кенә беҙ әсә телебеҙҙе һаҡлап ҡала алабыҙ. Ә инде баяғы һүҙ башында телгә алынған "эшем эйәһе" ҡатын кеүек, гәзит ҡайғыһы юҡ әле, тип йәшәһәк, милләтебеҙ киләсәгенә аяҡ салыусылар, маңҡорттар быуыны үрсетеүселәр тап беҙ буласаҡбыҙ... Ә ундай яҙмышты Хоҙай дошманыңа ла күрһәтмәһен, сөнки был донъяла ҡылынған яҡшыһы ла, яманы ла тарих хәтерендә мәңгелеккә ҡала. Беҙгә тиклемге ата-бабаларыбыҙ быуындары ирек һөйәрҙәр, ерһөйәрҙәр булараҡ дан ҡалдырһа, беҙ ҙә уларға лайыҡ булайыҡ: үҙебеҙҙе телһөйәрҙәр, илһөйәрҙәр итеп танытайыҡ.

**Фирүзә ИШБИРҘИНА,**
**хеҙмәт ветераны.**

БЫНАҒАЙЫШ!

# ТАҒЫ ЛА КИРЕ ҠАҒЫЛДЫ...



**Был мәсьәлә көн тәртибенән күптән төшөп ҡалғайны ине инде. Һәр хәлдә, уның ныҡлап онотола башлауына байтаҡ ваҡыт үтте. Тик барыбер ыңғай һөҙөмтәгә өмөт тыуҙы: мәсьәләне күтәреп сыҡҡан ЛДПР-ҙың ныҡышмаллыҡ күрһәтеренә ышаныс булдымы ул, әллә кеше хоҡуҡтарын яҡлау гаранты булған Конституцияға төҙәтмәләр буйынса һайлау алды эйфорияһы өҫтөнлөк иттеме... Әммә бер үк төрлө закон проекты өсөнсө тапҡыр юғары власть органдарына тәҡдим ителеп тә... тағы ла кире ҡағылды!**

Эшләп йөрөгән хаҡлы ялдағыларҙың пенсияларына индексацияны тергеҙеү буйынса закон проекты хаҡында һүҙ. Инфляция зыянын ҡаплау өсөн законда ҡаралған һәм һәр пенсионерға түләнергә тейешле индексация эшләп йөрөүсе пенсионерҙар өсөн 2016 йылда туҡтатылғайны. Рәсәй Дәүләт Думаһының Хеҙмәт һәм социаль сәйәсәт буйынса комитеты рәйесе Ярослав Нилов пенсионерҙарҙы эшләмәүсе һәм эшләп йөрөүсе категорияға бүлеп ҡарауҙы күрәләтә ғәҙелһеҙлек һәм дискриминация тип тә тәнҡитләгәйне. "Пенсионер үҙенең пенсияһына намыҫлы хеҙмәте, бөтөн ғүмере менән лайыҡ булған, эш биреүсе уның өсөн йылдар буйы пенсияһын страховкалаусы балдар күсереп килгән. Тимәк, дәүләтебеҙ инфляция арҡаһында зыян күреүсе пенсионерҙың һатып алыу мөмкинлектәренә булышлыҡ итергә һәм компенсация түләргә бурыслы",- тип әйткәйне. Был хәлгә ҡағылышлы бик күп бәхәстәр һәм дәғүәләр булды, ләкин власть ныҡ торҙо: эшләп йөрөүсе ҡарттарға законлы индексация аҡсаһын түләүҙән баш тартты. Депутаттар иһә шуға һылтанды. Ләкин хөкүмәт бындай ғәҙелһеҙлек акты менән бер ни ҙә ота алманы, киреһенсә, был РФ Хеҙмәт кодексын боҙоуға ғына килтерҙе. Һәр ағыуға ҡаршы ағыу бар, тигәндәй, эшләп йөрөүсе пенсионерҙарҙың күбеһе "күләгәгә" китте һәм эштәрен дауам итте. Һөҙөмтәлә индексацияны тыйыуҙан алда, 2016 йылдың 1 ғинуарына ҡарата, эшләп йөрөүсе пенсионерҙар һаны 15 млн тәшкил иткән булһа һәм эш биреүсе тарафынан улар өсөн күсерелә барған страховка иғәнәһе лә байтаҡ суммаға барып баҫһа, ошо уҡ 2016 йылдың тәүге кварталында уҡ рәсми эшләүсе пенсионерҙар һаны 9 миллионға тороп ҡалды. Шул уҡ ваҡытта эш биреүсе тарафынан һәр бер эшсе һәм хеҙмәткәр өсөн күсерелә торған страховка иғәнәһе һәм һалым суммаһы ла һиҙелерлек кәмене. Рәсми эшләүсе пенсионерҙар һәр төрлө ҡырын ҡараштарға күҙ йомоп, вазифаларын үтәүҙе дауам итте, сөнки өйҙә ултырыуҙы күҙ алдына ла килтерә алмаған, тормош мәғәнәһен хәрәкәттә, кеше араһында - коллективта, йәмғиәттә табып йәшәргә күнеккән ветерандар ине улар. Тик нисек кенә шәпләнергә маташма, тормош ҡиммәтләнә бара, хаҡтар көндән-көн ҡабара, ә һумдың хәле бер ҡасан да тотороҡлана алғаны юҡ әле. Ниндәй шарттарға ла күнергә һәм эшләргә әҙер пенсионер. Үпкәһе лә онотола төшкәндәй ине лә, ЛДПР сейле-бешле проекты менән күңел тыныслығын ебәрҙе. Аҡҡош, Суртан һәм Ҡыҫала мәҫәлен хәтерләтеп, тәүҙә - коммунистар, икенсегә килеп "Ғәҙел Рәсәй "ҙәр булдыра алмағанды, либералдарҙың ҡулынан килмәҫе былай ҙа аңлашыла ине бит. Эш хаҡтары айына 400 мең самаһы тәшкил итеп тә, 450 "халыҡ вәкиле"нең һәр береһе өсөн бюджеттан өҫтәмә сығымдары өсөн бүленгән аҡса менән айлыҡ килемдәре 1 миллиондан ашып киткән депутаттарға бюджет аҡсаһын экономиялауҙы үҙҙәренән башларға, пандемия ваҡытында мохтаждарға, дауаханаларға, табиптарға матди ярҙам күрһәтеп, ҡулдарынан килерҙәйҙе генә башҡарырға кәрәктер, бәлки?

Әйткәндәй, ошо көндәрҙә генә был мәсьәләгә ҡағылышлы яңы хәбәр килеп төштө: ошо йылдың 1 июленән балиғ булмаған йәштәге балаларға опекунлыҡ иткән  һәм попечитель булып торған пенсионерҙарҙың пенсияһы индексациялана башлаясаҡ. Элек улар эшләмәһә лә, төрлө тормош хәлендә ҡалып, үҙ ата-әсәһе хәстәренән мәхрүм балаларҙы, ейән-ейәнсәрҙәрен аҫрап, улар өсөн 3-4 мең тирәһе пособие алғанлыҡтан, эшләп йөрөүсе пенсионерҙарға тиңләштерелгән булғандар.Федераль яңылыҡтар агентлығы хәбәрҙәренә ҡарағанда, бер ыңғай эшләп йөрөүсе барлыҡ пенсионерҙарға ла индексациялауҙы кире ҡайтарыу ихтималлығы бар, тиҙәр, ләкин барыбер был хаҡта  өҙөп кенә ыңғай хәбәр әйтеүсе юҡ әле...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Эстонияның бәләкәй генә Палдиски ҡалаһында, Салауат Юлаевтың һуңғы 25 йыл ғүмере үткән урында, башҡорт халҡының милли батырының тыуыуына 266 йыл тулыуҙы билдәләнеләр. Эстонияның Палдиски ҡалаһында (элекке Рогервик ҡәлғәһе) башҡорт халҡының геройы Салауат Юлаевҡа һәйкәл бар. Эстониялағы "Ағиҙел" башҡорт мәҙәни ойошмаһы бына 20 йыл инде атаһы Юлай Аҙналин менән Эстляндия губернаһы Рогервик ҡәлғәһенә мәңгелек һөргөнгә ебәрелгән башҡорт халҡының милли батыры Салауат Юлаевтың хәтерен ҡәҙерләп һаҡлай. Эстонияла башҡорт диаспораһының әүҙем эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә бөгөн Палдискиҙа һәр кем Салауат Юлаевтың кем икәнен белә.

✓Башҡортостанда 29 июндән - шифаханаларға, ял йорттарына, спорт секцияларына, 1 июлдән - ҡала ситендәге мәктәп лагерҙарына, 3 июлдән мәктәп лагерҙарына эшләргә рөхсәт ителә. Республика Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә ошо турала иғлан итте. Ләкин быны Роспотребнадзорҙың ҡаты талаптарын үтәгәндә генә эшләргә мөмкин. "Ҡайҙа улар үтәлмәй - шул учреждениелар ябыла", - тип иҫкәртте ул. Талаптар иҫәбендә - лагерь хеҙмәткәрҙәрен медицина тикшереүе, бөтәһе 10 меңдән ашыу анализ эшләргә тура киләсәк.

✓Башҡортостанда ҡыҙыу бесән өҫтө. 16 июнгә республикала 95 мең гектар күп йыллыҡ үлән сабылған, был бөтә күләмдең 21 процентын тәшкил итә. Дүртөйлө, Илеш, Ауырғазы һәм Борай райондарында 4,5-тән алып 6,8 мең гектарға тиклем үлән сапҡандар, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән. Республикала 35 мең тонна бесән әҙерләнгән. Бында Илеш районы алдынғылыҡты бирмәй.  Мал аҙығы әҙерләү темпы буйынса Ауырғазы районы алда бара, унда һәр шартлы баш малға 5,5 центнер аҙыҡ берәмеге әҙерләнгән.

✓Башҡортостан ҡалаларында һәм райондарында халыҡҡа Рәсәй Конституцияһына төҙәтмәләр тураһында мәғлүмәт биреү буйынса 28 мәғлүмәт нөктәһе эшләй башланы. Халыҡ күп йөрөгән урындарҙа - парктарҙа, скверҙарҙа һәм сауҙа үҙәктәрендә ирекмәндәр Конституцияға индерелгән үҙгәрештәр хаҡында һөйләй, граждандарҙың һорауҙарына яуап бирә, ирекле акцияларҙа ҡатнашырға саҡыра. Мәғлүмәт нөктәләре Өфөлә, Нефтекамала, Бәләбәйҙә, Стәрлетамаҡта, Яңауылда, Күмертауҙа, Октябрьскийҙа, Салауатта, Туймазыла, Сибайҙа, Баймаҡта, Иглиндә, Мәсәғүттә, Мәләүездә, Ҡырғыҙ-Миәкәлә һәм Морәкта эшләй.

ҠЫҪҠАСА

# МИЛЛИ КЕЙЕМ КЕЙӘЙЕК!



✓ Рәсәй көнө, Ҡала көнө, Салауат Юлаевтың тыуған көнө уңайынан Дуҫлыҡ монументына һәм Салауат Юлаев һәйкәленә сәскәләр һалыу тантанаһында республика Башлығы Радий Хәбировтың кейгән кейеме социаль селтәрҙәрҙә шунда уҡ халыҡтың иғтибарын йәлеп итте. Өфө дизайнерының башҡорт яугирҙары кейгән камзулдар эскизы буйынса тегелгән бындай костюмдарына сәйәсмәндәр, артистар, эшҡыуарҙар, йәмәғәт эшмәкәрҙәре тарафынан һорау ҙур, сөнки милли кейемдең заманса сағылышы модаға инә бара. Революцияға тиклемге осорҙа башҡорт атлы яугирҙары кейгән кейем эскизы буйынса тегелгән башҡорт костюмдары коллекцияһының беренсе костюмы ла Радий Хәбировта. "Башҡорттар һәр ваҡыт яугир ҡатламына ҡараған, шуға күрә уларҙың кейемдәре хәрби формаға оҡшаш, - ти тарихсылар. - Атта һыбай йөрөргә уңайлы булһын өсөн уның итәге ҡыя тегелә. Республика Башлығының заманса башҡорттоң милли костюмдар кейеү модаһын тергеҙеүе хуплауға лайыҡ..."

✓ Граждандыҡ йәмғиәтен үҫтереү өсөн Президент гранттарының икенсе конкурсы барышында Башҡортостандан 72 проект ғәмәлгә ашырыу өсөн ярҙам алды. Иң яҡшы проекттар исемлегендә - фестивалдәр ойоштороу, шул иҫәптән туристик, бард йыры һәм балалар ҡатнашлығында музыкаль ҡуйылыштар. Атап әйткәндә, Ҡыҙыл Ырғыҙлы ауылында "Башҡортостан легендалары. Архангел районы" фестиваленә 870 мең һум аҡса бирелә. Проектты "Тәңре экологик берләшмәһе" коммерцияға ҡарамаған ойошма командаһы тәҡдим итте. Салауат районы педагогик хеҙмәт ветерандарының урындағы ойошмаһы "Өлкән йәштәге замандаш өсөн компьютер компетенциялары" проектын күрһәтте. Уны бойомға ашырыу өсөн 448 мең йүнәлтелә. Еңеүселәрҙең Башҡортостанда ғәмәлгә ашырылырға тейешле проекттары менән Президент гранттары фонды сайтында танышырға була.

✓ Башҡортостанда 15 июндән махсус әҙерләнгән пляждарҙы асырға хәл ителде. Был хаҡта республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмә барышында билдәле булды. Башҡортостандың барлыҡ спорт объекттары 9 июлдә асылыуы тураһында ла хәбәр ителде. Республика Башлығы Радий Хәбиров Спорт министрлығына Роспотребнадзор белгестәре менән бергә бөтә эпидемиологик нормаларҙы үтәүҙе ойоштороорға ҡушты. "Ҡайҙа улар үтәлмәй - асмайбыҙ, - тине Радий Хәбиров. - Шулай уҡ килеһе аҙнанан, 22 июндән, фитнес-клубтарҙы аса башлайбыҙ".Был аҙнала фитнес-клуб етәкселәре бинаһарҙы талаптарға ярашлы итеп әҙерләргә тейеш, сөнки яңы коронавирус инфекцияһы таралыуға ҡаршы көрәш шарттарында ошо учреждениеларҙың билдәле эш ҡағыҙәләре бар.

✓ Көндәлек мониторинг мәғлүмәттәренә ярашлы, 14 июнгә Башҡортостанда 2020 йылдың 1 ғинуарынан мәшғүллек хеҙмәтенә мөрәжәғәт иткән һәм унда теркәлгән эшһеҙ граждандар һаны 4,2 тапҡырға артып, 76 мең кешенән ашҡан. Уларҙың 70 меңдән күберәге эшһеҙлек пособиеһин ала ла инде, тип хәбәр итте республика Хөкүмәте вице-премьеры Ленара Иванова хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә. "Ағиҙел, Межгорье, Өфө, Күмертау, Стәрлетамаҡ ҡалаларында, шулай уҡ Шишмә, Кушнаренко, Өфө, Ҡырмыҫҡалы һәм Иглин райондарында теркәлгән эшһеҙлек кимәле юғары, - тип өҫтәне Ленара Иванова. - Был насар ҙа, һәйбәт тә түгел, тип әйткем килә. Был - факты билдәләп үтеү. Кешеләр мәшғүллек хеҙмәтенә мөрәжәғәт итә, сөнки эшһеҙлек пособиеһы ярайһы юғары, дәүләт тә һиҙелерлек ярҙам күрһәтә башланы".

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ПАРАД - МӘСКӘҮҘӘ

**24 июндә Мәскәүҙә Еңеү парады уҙарылған көндә Өфөлә һәм Башҡортостанда парад һәм башҡа киң күләмле байрам саралары булмай. Был республикалағы эпидемиологик хәл менән бәйле. Һуғыш ветерандары өсөн ҡалаларайондарҙа уларҙың йәшәгән урыны буйынса шәхси парадтар ойоштороласаҡ.**

Радий Хәбиров Башҡортостанда 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығына әҙерләнеү һәм билдәләү буйынса төп саралар планына үҙгәрештәр индерҙе. "Һуғыш ветерандары саҡырылған сараларҙы көҙ көнө үткәреү күҙаллана. Хәрби парадтар башлыса хәрби дан ҡалаларында уҙарыла. 9 майҙа Өфөлә Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығы уңайынан Рәсәй Геройы генерал-майор Миңлеғәле Шайморатовтың "Алтын Йондоҙ"он ҡаршы алыу тантанаһы ойошторолдо, уны Мәскәүҙән республикаға мәңгелек һаҡлауға килтерҙеләр", - тип белдерҙеләр Башҡортостан Башлығының матбуғат хеҙмәтендә. Мәскәүҙә Еңеү парады 24 июндә, 1945 йылда еңеүселәрҙең легендар, тарихи парады уҙған көндә була. Унда 14 меңгә яҡын хәрби һәм 220-нән ашыу берәмек техника ҡатнаша. Ҡыҙыл майҙан буйлап 30 Т-34 танкы, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы үҙйөрөшлө артиллерия машинаһы, хәҙерге Рәсәй техникаһы, һәм, әлбиттә, яңы сығарылған техника үтә. Парадтың һауалағы өлөшө лә буласаҡ. 24 июнь Рәсәйҙә ил Президенты указы менән ял тип иғлан ителде.

# ФАТИРЛЫ БУЛҒЫҢ КИЛҺӘ...

**Йылына 6,5 процент менән ипотека кредитлауы дәүләт программаһын халыҡ ҡыуанып ҡабул итте. Росреестрҙың Башҡортостан буйынса идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, әлеге ваҡытта республикала 335 ғаилә ошо программаға ингән.**

Льготалы ставка менән программа ваҡыты сикле - 2020 йылдың 1 ноябренә тиклем ғариза бирергә кәрәк. Ул ғәмәлгә инеп, ай ярым ваҡыт үтеүгә, Рәсәй банктары 120,8 мең ғаризаның 81,9 меңен хуплаған да инде. Шул уҡ ваҡытта барлығы 740 миллиард һумға 247 мең кредит биреү ҡарала, йәғни әле лимиттың өстән бер өлөшө бирелгән. Дәүләт программаһы буйынса ипотека бары тик яңы төҙөлгән йорттарҙы йәки яңы йорттан фатир алыуҙы күҙаллай. Төбәктәрҙә уның хаҡы 3 миллион һумдан артмаҫҡа, ә мотлаҡ түгеге иғәнә объект хаҡының 20 процентынан да кәм булмаҫҡа тейеш. Түгеге иғәнә өсөн Әсәлек капиталын ҡулланырға ла була. Түбән процент кредит ваҡыты сыҡҡанға тиклем һаҡлана. Өҫтәүенә, ҡайһы бер кредит учреждениелары уларҙы тағы ла түбәнәйтә. "Первый трест" дәүләт корпорацияһының банктар менән эшләү буйынса етәксеһе Игорь Моргачев белдереүенсә, төҙөлөш ойошмаһының партнерҙарының береһе 5,85 процент тәҡдим итә. Мәҫәлән, 3 миллионлыҡ ипотеканы 20 йылға алғанда экономия ай һайын - 5,7 мең, ә дөйөм экономия 1,4 миллион һум тәшкил итәсәк. Тағы ла шуныһы мөһим: дәүләт субсидия биргән башҡа ипотека кредитлау варианттарынан айырмалы, был программа айырым категорияға түгел, ә барлыҡ Рәсәй граждандарына ла иҫәпләнгән һәм мөрәжәғәт итеүселәрҙең 83 процентының ғаризаһы хуплана.

# АУЫЛҒА ЙӨҘ БОРОП...

**Алдағы өс йылда Башҡортостан ауылдары инфраструктураһын үҫтереүгә 5,5 миллиард һум йүнәлтелә. Шуның 3 миллиарды - федераль бюджет аҡсаһы, 1,7 миллиард һумды республика ҡаҙнаһы бүлә, 174 миллионы - урындағы бюджеттан, 666 миллион һумы - бюджеттан тыш сығанаҡтар аҡсаһы.**

Вице-премьер - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостандың федераль аҡса йәлеп итеү күләме буйынса Рәсәй төбәктәре араһында өс лидер иҫәбенә инеүе хаҡында һөйләне. Республиканың өлөшө 5,2 процент тәшкил итә (57,4 миллиард һумдан). Быйыл муниципаль районбарға субсидия суммаһы - яҡынса 1 миллиард 600 миллион һум. 2020-2022 йылдарға "Ауыл биләмәләрен комплекслы үҫтереү" яңы дәүләт программаһын федераль бюджеттан финанслау 432,9 миллиард һум тәшкил итергә тейеш ине, ысынында 57,4 миллиард һум йүнәлтелә (автомобиль юлдарын иҫәпкә алмайынса). Әлегә 16,8 миллиард һум күләмендә 2021-2022 йылдарға "Ауыл биләмәләренең заманса күренеше" йүнәлеше буйынса федераль бюджет аҡсаһы бүленмәй ҡалған. Башҡортостан Башлығы Ауыл хужалығы министрлығына республика ауылдары инфраструктураһын үҫтереү буйынса башҡарған эш өсөн рәхмәт белдерҙе. Радий Хәбиров һыҙҙәренсә, ведомствоға бүленмәгән 17 миллиард һумдан өҫтәмә аҡса йәлеп итеү өсөн әүҙем эшләргә кәрәк.

# АТТЕСТАТ АЛДЫЛАР

**15 июндә Рәсәй мәктәптәренең барлыҡ сығарылыш класс уҡыусыларына аттестат тапшырылды.**

Рәсәй Мәғариф министрлығында белдереүҙәренсә, Быйыл белем тураһында документты тығыҙынсы кластарға - Дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы, ә ун беренселәргә Берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләренән тыш бирергә хәл ителде. Премьер-министр Михаил Мишустин тейешле ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, быйыл Дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы уҡыусыларҙың ағымдағы билдәләре йомғаҡтары буйынса уҙғарыла, был 9-сы һәм 11-се кластарҙа аттестат тапшырыу өсөн нигеҙ булып тора; Берҙәм дәүләт имтиханын юғары уҡыу йортона инергә йыйынғандар ғына бирергә тейеш; ҡарар шулай уҡ "һынау имтиханы" төшөнсәһен нығыта, Мәғариф министрлығы уны Мәғариф һәм фән өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт менән берлектә 29 һәм 30 июндә уҡыусыларҙан башҡа үткәрергә йыйына. Берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләренең ниндәй булыуына ҡарамайынса, аттестатында тик бишле билдәләре булған барлыҡ ун беренсе класс уҡыусыларына "Уҡыуҙағы уңыштары өсөн" миҙалы тапшырыла.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөнән 17 табиптан торған бригада медиктарға коронавирус инфекциялы пациенттарҙы дауалауҙа ярҙам күрһәтеү өсөн Ҡарасәй-Черкес Республикаһына юлланды. Өфө табиптары республика госпиталдәрендә дүшәмбе, 15 июндән, эш башлай. Шулай уҡ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың республикаға медиктар өсөн ҙур партия шәхси һаҡланыу саралары һәм дезинфекция препараттары оҙатыуы тураһында хәбәр ителә.

✓Башҡортостанда "Алтын Солоҡ" умартасылыҡ продукцияһын һаҡлау һәм алға ебәреү буйынса төбәк-ара үҙәк ойошмаһы булдырыла. Республика Башлығы Радий Хәбиров тейешле бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Коммерцияға ҡарамаған автономлы ойошманы ойоштороусы - Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы, шулай уҡ ведомствоға ойошманың уставын әҙерләү һәм устав капиталын финанслау сығанаҡтарын билдәләү бурысы йөкмәтелде.

✓10 июндә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының штаб-фатирында "Рәсәй Федерацияһының хоҡуҡ һаҡлау органдары һәм махсус хеҙмәттәре хеҙмәткәрҙәре ассоциацияһы" Дөйөм Рәсәй йәмәғәт ойошмаһының Башҡортостан төбәк бүлексәһе менән хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөлдө. Был килешеү башҡорт ҡоролтайына Башҡортостан бүлексәһе ингән "Антиконтрафакт" халыҡ-ара ассоциацияһы эшендә ҡатнашырға мөмкинлек бирә. Быңдай хеҙмәттәшлек урындағы баҙарҙа ла, унан ситтә лә Башҡортостан етештереүселәре брендды өсөн яңы мөмкинлектәр аса.

✓Башҡортостандың Шишмә районында хакимиәт башлығы алмашынды. 2005 йылдан муниципалитетҡа етәкселек иткән Флүр Уразмәтов урынын Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан буйынса баш идаралығы дәүләт янғынға ҡаршы хеҙмәтенең 22-се янғын-һаҡлау отряды начальнигы Ришат Мансуровҡа тапшырҙы. Радий Хәбиров һыҙҙәренсә, кандидат сығышы менән Шишмә районынан, эшләү осоронда ул үҙен белемле етәксе итеп күрһәтте һәм хәҙер туплаған тәжрибәһен муниципалитет мәнфәғәте өсөн ҡуллана ала.

✓12 июндән "Ирәмәл" тәбиғәт паркы асылды. Был хаҡта парктың "Бәйләнештә"ге рәсми төркөмөндә хәбәр ителә. Парк етәкселеге хәүефһеҙлек тураһында онотмауҙы һәм сүп-сар ҡалдырмауҙы һорай. Яңы коронавирус инфекцияһының таралыуына юл ҡуймаҫ өсөн 27 марттан паркка барыу тыйылғайны.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Өфөлә ике объектта төҙөлөш эштәре тамамланырға тейеш: Сергиев зыяратында - мемориал, ә тимер юл вокзалы эргәһендәге майҙанда фронтҡа киткән Башҡортостан хәрби частары хөрмәтенә скульптура композицияһы.*

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ЯҢЫ ҺӘЙКӘЛДӘР АСЫЛА

**Был аҙнала Республика Хөкүмәтендә үткән оператив кәңәшмәлә республика Башлығы коронавирусҡа бәйле ҡабул ителгән юғары әҙерлек режимы тураһындағы указға үҙгәрештәр индереү хаҡында белдергәйне. Ҡала хакимәтендәге сираттағы видеоконференция кәңәшмәһен асып, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин да һүҙҙе тап ошо теманан башланы.**

22 июндән фитнес-үҙәктәр үҙ ишектәрен асһа, 29 июндән башҡа спорт объекттары ла эш башлаясаҡ. 1 июлдән - ҡаланан ситтә урынлашҡан балалар лагерҙары, 3 июлдән мәктәптәр балаларҙы көндөҙгө лагерҙарға ҡабул итәсәк. Шулай уҡ йәмәғәт урындарында бирсәткә кейеү ҙә мотлаҡ түгел, әммә битлектәр кейеү талабы үҙгәрмәй.

Тиҙҙән ил тарихында ҡайғы көнө булып ҡан менән яҙылған дата - Бөйөк Ватан һуғышы башланған көн етә. Быйыл коронавирус арҡаһында хатта Еңеүҙең 75 йыллығы ла киң ҡоласлы итеп үткәрелмәне һәм тап ошо датаға яҡынлаштырып - тәүге Еңеү парады үткән көнгә күсерелгәйне. Әммә илдең ҡайһы бер төбәктәре вирус хәүефе бөтмәгәнлектән, уны үткәрмәҫкә булды. Өфөлә иһә был датаға ике объектта төҙөлөш, төҙөкләндереү эштәре тамамланырға тейеш: Сергиев зыяратында - мемориал, ә тимер юл вокзалы эргәһендәге майҙанда Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында фронтҡа киткән Башҡортостан хәрби частары хөрмәтенә скульптура композицияһы. Был иҫтәлекле урындар 22 июндә асылыр һәм киләсәктә улар балаларға, йәштәргә патриотик тәрбиә биреү майҙансыҡтарына әүерелер, унда төрлө хәтер саралары уҙғарылыр, тип көтөлә.

Коронавирус тормоштоң барлыҡ өлкәләренә лә үҙ эҙен һалды, уларҙың үҫешен тотҡарланы. Шуға ла властар иҡтисадтың төрлө тармаҡтарындағы эшмәкәрлеккә һәм уларҙағы производствоға ярҙам итеүгә етди иғтибар бүлә. Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары, муниципалитеттың бизнес-шерифы Николай Фадеевтың сығышы тап баш ҡала предприятиеларының төбәк-ара хеҙмәттәшлегенә һәм баҙарҙа тотҡан урынына арналды. Быйыл сәнәғәт форумында төҙөлгән килешеү нигеҙендә Өфө менән Силәбе ҡалаһының тауар етештереүселәре араһында кооперация хеҙмәттәшлеге киңәйә, Өфө брендтары ситтә танылыу яулай бара. Шулай уҡ 4 июндә күп тармаҡлы "Нерал" компаниялар төркөмө менән төҙөлгән килешеү ҙә хеҙмәттәшлек географияһын киңәйтеүҙе күҙаллай. Төбәк-ара хеҙмәттәшлек туризм өлкәһендә лә дауам ителәсәк. Шулай уҡ июлдә Татарстан Республикаһы, Волга буйы ҡалалары ассоциацияһы һәм Омск ҡалаһы менән хеҙмәттәшлекте киңәйтеү планлаштырыла.

Үткән оператив кәңәшмәлә йылылыҡ менән тәьмин итеүсе ойошмаларҙың яңы миҙгелгә әҙерлеге тураһында яҙғайныҡ инде. Был юлы ла тема көн үҙәгенә сығарылды һәм газ хужалығының эшмәкәрлеге ҡаралды. "Газпром Өфө газ бүлеү" асыҡ акционерҙар йәмғиәте филиалы директоры Илфир Мөлөков белдереүенсә, план буйынса 25 километр оҙонлоҡтағы "Новоалександровка - Затон" юғры баҫымлы газ торбаһын һалыу ҡаралған. Унда эштәр 25 июнгә тамамланырға һәм 1-се категорияға ҡараған газ үткәргес Өфө ҡалаһының көньяҡ өлөшөн тәбиғи газ менән аварияһыҙ һәм өҙлөкһөҙ тәьмин итергә тейеш. Шулай уҡ газ көйләү пункттарын блок пункттарына алмаштырыу, башҡа төҙөлөш-монтаж, торбаларҙа планлы тикшереү эштәре лә алып барыла. Улар ҡаланың юлдарҙы һәм ихаталарҙы ремонтлау программаһы менән яраштырылған, йәғни юл һалыуҙан, ер өҫтөндәге башҡа ремонт эштәренән алда башҡарыла.

21 июндә медицина хеҙмәткәрҙәре үҙҙәренең профессиональ байрамын билдәләй. Эпидемиология хәл-торошо арҡаһында уларҙы башҡа йылдарҙағы кеүек йыйып алып тәбрикләү мөмкин булмағанлыҡтан, дауалау учреждениеларының йәки уларҙың эргә-тирәһендәге йорттарҙың фасадтарында тематик һүрәттәр эшләнә. Был табиптарҙың һәм шәфҡәт туташтарының ауыр һәм абруйлы хеҙмәтенә ихтирамды сағылдыра һәм йәмәғәтселектең иғтибарын йәлеп итеү маҡсатынан сығып та башҡарыла.

Кәңәшмә һуңында Өлфәт Мансур улы район хакимиәттәре башлыҡтарына медицина хеҙмәткәрҙәрен ҡотлау, граффити эшләүҙе тамамлау һәм уларҙы яҡтыртыу варианттары хаҡында уйлау бурысын йөкмәтте.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ЙЫЛАНДАР...



**Быйыл яҙ ике аҙнаға алдараҡ килеүе һөҙөмтәһеме икән, көндәр йылыныу менән халыҡ дачаларҙа, йорт яны баҡсаларында йыландар күренеүгә зарлана башланы. БР Экология министрлығы белгестәре белдереүенсә, Башҡортостанда йышыраҡ туҙбаш, ҡара йылан, ялан ҡара йыланы, баҡыр йылан (еҙ йылан) осрай. Уларҙың араһынан ҡара йылан ғына ағыулы.**

Икенсе яҡтан, йыландар ауыл хужалығына ҙур зыян килтергән, хәүефле сирҙәр тараҡтан сысҡандарҙы һәм ҡомаҡтарҙы юҡ итә. Шуға ла, әгәр участкағыҙҙа йыландар күренә башлаһа, тимәк, кимереүселәр ҙә бар. Йыландар кешеләрҙән ҡурҡмай, әммә осрашыуҙан ҡаса. Йылы көндәрҙә улар былтырғы япраҡ, ҡороған ағас тамырҙары, төҙөлөш сүп-сары, өйөлгән таҡталар араһынан, башҡа хайуандарҙың ояларынан сыға. Үҙҙәренә пар эҙләгән ваҡытта йыландарҙы борсорға ярамай, был ваҡытта улар агрессив була, хатта ыҫылдауы, кешегә ташланыуы мөмкин. Туҙбаш һәм ҡара йылан, әгәр уларҙы тоторға тырышмаһағыҙ, зыянлы түгел, саҡмай. Шуға күрә йыландарҙы тоторға тырышмағыҙ. Әгәр ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында сағылдығыҙ ҙа икән, албырғап китмәгеҙ, кемдәрҙер кәңәш иткәнсә, сағылған урынды ҡыҫып бәйләргә йәки ағыуын һурырға тырышмағыҙ. Тешләнгән урынды һабынлап йылы һыу менән йыуығыҙ һәм спирт йәки спиртлы шыйыҡса менән эшкәртегеҙ. Ауыртыуҙы баҫа торған дарыу эсегеҙ һәм яҡындағы медицина учреждениеһына мөрәжәғәт итегеҙ.

*ҠЫҪҠАСА*

# ИКЕЛӘТӘ ТҮЛӘҮ КЕМГӘ?

✓ **1 июль - Рәсәй Федерацияһы Конституцияһына үҙгәрештәр индереү буйынса дөйөм Рәсәй тауыш биреү көнөндә эшләгән өсөн рәсәйҙәр арттырылған түләү ала.** Был хаҡта Федерация Советының социаль сәйәсәт буйынса дәүләт комитеты башлығы Инна Святенко белдерҙе. "Тауыш биреү көнөндә эшләгән өсөн арттырылған күләмдә түләү ҡаралған. Ял һәм байрам көндәрендә түләү тәртибе Рәсәй Федерацияһы Хеҙмәт кодексының 153-сө статьяһы менән көйләнә, түләү үҙенсәлектәре хеҙмәткәрҙәр өсөн ниндәй түләү системаһы билдәләнеүгә бәйле", - тип Святенконың һүҙҙәрен килтерә ТАСС. Хеҙмәт кодексы буйынса, ял йәки байрам көндәрендә эшләгән өсөн хеҙмәткәргә икеләтә эш хаҡы иҫәпләнә. Дөйөм Рәсәй тауыш биреү көнөндә эшләмәгән граждандар ҙа хеҙмәт хаҡын һаҡлап ҡала, тип өҫтәне ул.

✓ **Республика халҡы май байрамдарынан һуң йылылыҡ менән тәьмин итеү компанияларынан йылылыҡ өсөн түләү суммаһы яҙылған квитанциялар алып, аптырап ҡалған, сөнки яңы системаға күскәс, түләүҙәр бары тик йылылыҡ менән файҙаланған өсөн генә башҡарыла ине.** Ә быйыл йылытыу миҙгеле 30 апрелдә үк ябылды. Баҡтиһәң, дөйөм йылылыҡ счетчигы ҡуйылған йорттарҙа ғына бындай хәлдәр күҙәтелеүе мөмкин икән. Май айы өсөн сумма апрелдең һуңғы көндәрен һәм йылылыҡ биреү туҡталғанға тиклем эшләгән иҫәп алыу приборҙары күрһәткесенән сығып иҫәпләнә. Һәр йортта был дата төрлөсә, шуға түләүҙәр ҙә төрлөсә килә. Иҫәп счетчиктары булмаған йорттарҙа түләү норматив буйынса башҡарыла. Бындай йорттарҙа һуңғы көн тип 30 апрель иҫәпләнә һәм май өсөн квитанцияларҙа сумма графаһында нуль тора. Йәйгеһен йылылыҡ өсөн түләнмәйәсәк, әммә бурыслылар бурысын ҡайтарғансы квитанцияларҙа был сумма күрһәтелеп барасаҡ.

✓ **Рәсәй Пенсия фонды һәм кредит ойошмалары хәҙер мәғлүмәт менән алмашыу тураһында килешеүҙәр төҙөй. Улар ярҙамында ғаиләләр торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға Әсәлек капиталын банк аша файҙаланырға мөмкин.** Әлеге ваҡытта Башҡортостанда Рәсәй Пенсия фондының төбәк бүлексәһе дүрт банк менән килешеүгә ҡул ҡуйған. Улар араһында - Һаҡлыҡ банкы, ВТБ, "ФК Открытие" һәм Россельхозбанк. "Хәҙер республикабыҙ ғаиләләре туранан-тура ошо банктар аша торлаҡ һатып алыуға йәки төҙөүгә кредитты түләү өсөн әсәлек капиталы аҡсаһын тотоноу тураһында ғариза бирә ала. Был килешеүҙәргә ҡул ҡуйыу Пенсия фондына һәм банкка мөрәжәғәт урынына банкка ғына мөрәжәғәт итергә мөмкинлек бирҙе, бында ғаилә бер үк ваҡытта кредит алырға һәм ипотека кредитын ҡаплау йәки тәүге взнос түләү өсөн ғариза бирергә мөмкин", - тип хәбәр иттеләр Рәсәй Пенсия фонды Башҡортостан бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтенән. Банктар ғаризаларҙы һәм кәрәкле документтарҙы Рәсәй Пенсия фондының территориаль органдарына электрон каналдар аша тапшыра. Был Әсәлек капиталын тотоноуҙы тиҙләтә. Статистика буйынса, кредит һәм заем аҡсаһы ярҙамында торлаҡ шарттарын яҡшыртыу - Әсәлек капиталы программаһының иң кәрәкле йүнәлеше. Мәҫәлән, уҙған йылда ғына Башҡортостандың 16,7 меңдән ашыу ғаиләһе Әсәлек капиталы аҡсаһы менән ипотекаһын түләп бөтөргән. Ошо маҡсатта уларға 7,4 миллиард һум йүнәлтелгән.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йоҡоһоҙлоҡтан

❖ 2 ҡалаҡ ваҡланған шалҡанға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта 15 минут ҡайнатырға, һөҙөргә. Был төнәтмәне йылы көйөнсә төнгөлөккә эсеп ятырға кәрәк.

### Эсеүҙе ташлау өсөн

❖ Америка табибы Д. Джараис халыҡ медицинаһында кеше организмына калий етмәүҙән алкоголле эсемлектәргә ымһына тип иҫәпләнә, ти. Шуға күрә был афәттән ҡотолоу өсөн калийға бай булған балды күп ашарға кәрәк икән. Күп эсеп ташлаған кешене айныҡтырыу өсөн һәр 20 минут һайын уға 6-шар балғалаҡ бал ашатырға (40 минут эсендә 18 балғалаҡ). Ярты сәғәттән һуң был процедураны тағы ҡабатларға. Йоҡонан торғас та тағы 6-шар ҡалаҡ балды 20 минут һайын 3 тапҡыр, шунан бешер-бешмәҫ йомортҡа ашатырға. 10 минут үткәс, йәнә 6 балғалаҡ бал ашатырға. Иртәнге аш ваҡытында тағы ла 4 балғалаҡ бал ашарға тейеш.

❖ Эсеүҙе ташлау өсөн 4 өлөш кейәү үләне, 1 өлөш әрем, 1 өлөш һарыгүҙ (золототысячник) үләндәрен йыйып ваҡларға һәм ҡушырға. 1 ҡалаҡ үлән йыйылмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне 1-2 ҡалаҡ миҡдарҙа ашарҙан алда көнөнә 3-4 тапҡыр эсергә. Дауаланыу ваҡыты 2-3 ай.

❖ 1 өлөш әрем һәм 4 өлөш кейәү үләнен ваҡларға. Йыйылманың 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 10 минут тоторға һәм һөҙөргә. Ашарҙан алда 1 ҡалаҡ эсергә. Был рәүешле дауаланыу осоро 2-3 ай.

### Бауыр циррозы

❖ Гөлбаҙран (пижма), меңъяпраҡ, дегәнәк тамырын тигеҙ өлөштә алып ваҡларға. Ошо ҡатышманың 1 ҡалағын термосҡа һалып, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ярты сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Төнәтмәне өскә бүлеп ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

***✓ Яҡындарым сирләмәне, сөнки мин һаҡланыу саралары күреп, ҡурсаландым. Был сиргә ышанмаусыларҙы йәлләйем. Минеңсә, сир барыһы ла ауырып бөткәс кенә туҡтаясаҡ.***



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*

# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Силәбеләрҙең сағыштырмаса иртә осорға ҡараған ҡабартма ҡайыулы әйбер өлгөләре Венгр этнография музейында Д. Месарош коллекцияһында һаҡланып ҡалған. Улар 1909 йылда Мөхәмәтҡолой ауылынан һатып алынған (хәҙерге Арғаяш районы). Ҡайылған ҡыҙыл ашъяулыҡ һәм осона сигелгән ҡыҙыл таҫма ҡушылған аҡ таҫтамал нәфислеге менән айырылып тора (ВЭМ, кол. 79973; 79974). Аҡ, һары, йәшел, күк, ҡара ебәк ептән сигелгән үҫемлек орнаменты ҡыҙыл туҡыма буйлап тигеҙ таралып киткән. Таҫтамалда симметрия үҙәген вертикаль тота. Ә ашъяулыҡта симметрия арҡырыһына-буйына һаҡлана; горизонталь һыҙыҡ буйлап үҙәктән һәм вертикаль күсәр остарында ҡусҡарлы япраҡҡа оҡшаш үренделәрҙән торған алты ҡырлы оя биҙәк урынлашҡан. Йоморо емеш эсендәге ыҡсым ғына томбойоҡтарға оҡшаған шундай уҡ элементтар (Урта Азияла уны "анар емеше, баҙам" тип атағандар) таҫтамал осондағы ҡайыуҙың уртаһын белдергән; унан туҡыманың мөйөштәренә ҡарай сәскә һәм япраҡтарҙан торған бормалы-бормалы һабаҡтар таралған. Ашъяулыҡтың да, таҫтамалдың да орнаментында көнсығышҡа хас мотивтар бар:борос, баҙам емеше, осо бөҙрәләнеп төрған япраҡтар ("ҡушҡойрой", "кайкалак"), ғәжәйеп сәскәләр. Туҡыманың ситтәре буйлап икегә бөкләнгән өс саталы япраҡлы тулҡынлы һыҙыҡ рәүешендәге (Көнсығышта популяр "ислими" биҙәге китаптарҙы зауыҡлағанда ла ҡулланылған) нәҙек ҡайма урынлашҡан. Таҫтамалда был тулҡынлы ҡайма өҫтөнә бер епкә теҙелгән ҡуш ҡусҡарҙар сигелгән. Был әйберҙәр Көнсығыш биҙәү традициялары менән яҡшы таныш булған оҫтабикә тарафынан эшләнеүен фаразларға була.



*Ҡайылған ашъяулыҡ кисәге (Силәбе өлкәһе, Арғаяш районы, Мөхәмәтҡолой ауылы). ВЭМ. XX б. башы.*



*Ҡайылған таҫтамал (Силәбе өлкәһе, Арғаяш районы. Мөхәмәтҡолой ауылы). ВЭМ. XX б. башы.*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА*

# СИРЛӘҮСЕЛӘР ҺӨЙЛӘЙ...



**Башҡортостандың коронавирус менән ауырыған 60-тан ашыу кешеһе "ковидҡа ҡаршы" плазма тапшырған. Араларында быйыл яҙғыһын COVID-19 усағы булыуы менән билдәле Ғ. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһы медиктары ла бар.**

"Башинформ" мәғлүмәт агентлығы хәбәрсеһе Республика ҡан тапшырыу станцияһында ҡан тапшырыусылар менән әңгәмәләшә. Уларҙың береһе Республика клиник дауаханаһының 32 йәшлек табип-реаниматологы, өс бала атаһы Тимур Урманов. "Миңә бүлек мөдире шылтыратып, эшкә сығырға тигәс, сыҡтым һәм шунда ҡалдым, - ти ул. - Вахта тамамланырға өс көн ҡалғас, анализдарым ыңғай һөҙөмтә бирҙе. Ул ваҡытта үҙемде әллә ни насар тойманым, һуңынан ғына температура бер аҙ күтәрелә башланы - 37,3-37,5 булды. Мин ауырыуҙы еңел үткәрҙем. Ике тапҡыр КТ үттем, тикшереүҙәр хроник бронхит күрһәтте, бәхеткә күрә, тиергә кәрәк, пневмония табылманы. Эште дауаланыуға алмаштырҙым: коллегаларым тикшереп торҙо. Бактерияға ҡаршы терапия үттем. Эргәлә "ауыр" сирлеләр булды, улар реанимацияла, ИВЛ аппаратында ятты. Был шул тиклем ҡурҡыныс. Сир, ғәҙәттәге пневмониянан айырмалы, бер төрлө генә бармай, тиҙ тарала, тиҙ йоға. Кеше яҡын арауыҡта икенсе кешенән һә тигәнсе ауырыу йоҡтороуы мөмкин. Хроник сирҙәре булған пациенттар, бигерәк тә шәкәр сирлеләр, яман шеш менән ауырыусылар коронавирусты ауыр үткәрә, уларҙы дауалауы бик ауыр.

Дауаланып сыҡҡандан һуң 14 көн ҡурсаланыуҙа булдым һәм һуңынан тағы ла эшкә сыҡтым. Хәҙер икенсе вахта тамамланды. Балаларҙы күрмәй торғас, ҡыйын, һағындыра. Телефон аша, видеобәйләнеш аша аралашып торҙоҡ. Ғаиләм был хәлде аңлап ҡабул итте, яҡындарым сирләмәне, сөнки мин һаҡланыу саралары күреп, ҡурсаландым.

Был сиргә ышанмаусыларҙы йәлләйем. Минеңсә, сир барыһы ла ауырып бөткәс кенә туҡтаясаҡ. Ә инде ҡан тапшырыуға килгәндә, элек тә донор инем. Хәҙер иһә кешеләргә ярҙам иткем килә. Минең плазмам кемгәлер ярҙам итһә, ҡыуанасаҡмын".

Аноним булып ҡалырға теләгән икенсе табип та үҙенең ауырыу тарихы менән уртаҡлаша: "Барыһы ла ҙур булмаған температуранан - 37,2-37,5 - башланды. Ул тулҡын кеүек бер күтәрелде, бер төштө. Һуңынан тамаҡ ныҡлап ауырта башланы. 4-5-се көндә тәм һәм еҫ тоймай инем - былар тап инфекцияға хас билдәләр. Һуңынан "тиҙ ярҙам" йоғошло ауырыуҙар дауаханаһына алып барҙы һәм унда дауалай башланылар: анализдарым ыңғай булды. Өс аҙна дауаландым. Һуңынан да бик оҙаҡ хәлһеҙлек, аҙ ғына физик эш эшләгәндә лә баш әйләнеүе, еңелсә тын быуылыуы күҙәтелде. Хатта температура ла бер аҙ төшмәй торҙо. Һуңынан хәлем яйлап яҡшырҙы.

Мин медик булғас, яҡындарым минең сир йоҡтороу ихтималлығына әҙер ине. Шуға уларҙы баштан уҡ ҡурсалау сараһын күрҙек: балаларҙы өләсәләренә ебәрҙек. Дауахананан сыҡҡас та мин уларҙы ике аҙна күрмәнем, дөйөм алғанда, ике ай күрешмәнек. Бары тик һуңғы анализдар һөҙөмтәһе билдәле булғас ҡына осраштыҡ. Яҡындарымдан бер кем дә ауырыманы. Быға тиклем дә һаҡланыу сараларын үтәй инек, хәҙер ҙә үтәйбеҙ: ҡулдарҙы даими йыуабыҙ, дезинфекциялайбыҙ, йәмәғәт урындарында битлектә йөрөйбөҙ, дистанция һаҡлайбыҙ. Инфекцияны ауыр формала үткәреүем арҡаһында хәҙер минең сиргә ваҡытлыса иммунитетым бар, әммә күпмелер ваҡыттан һуң ҡабат вирус йоҡтороу ихтималлығын бәрәү ҙә инҡар итмәй. Әлбиттә, иммунитет ярты йылға тиклем һаҡлана, тиҙәр, шулай ҙа һаҡланыу талаптарын барыбер үтәйем. Икенсе тапҡыр плазма тапшырам, ул ауыр сирлеләргә ярҙам итер, кемдеңдер ғүмерен һаҡлап ҡалыр, тип ышанам".

Әйткәндәй, плазма тапшырыр алдынан донорҙың ҡанына лаборатор анализ эшләйҙәр, уны ентекле тикшерәләр. 10 минуттан һуң анализдар әҙер була һәм донорҙың ҡан тапшырыуға яраҡлымы, түгелме икәнлеге асыҡлана. Ауыр сирлеләргә плазма индергәндән һуң ыңғай һөҙөмтә күҙәтелә: ҡандың биохимик күрһәткестәре яҡшыра, үпкәнең зарарланған урындары кәмей, хатта ҡайһы бер пациенттар ИВЛ аппаратынан алына.

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ЙОҠТОРОУҘАН ҠУРҠ

**Бар донъя халҡы коронавирус афәтенән ҡурҡып өйҙә ултыра. Телевизор, газеталар, журналдар, интернет селтәре беҙгә коронавирус ауырыуы, уға ҡаршы ойошторолған көрәш һәм һаҡланыу саралары тураһындағы мәғлүмәттәрҙе еткереп тора. Тик ҡапыл ғына кешелек ҡиммәттәренең алышыныуы кешеләр күңелен тетрәндерҙеме, әҙәм балаһы ҡылған ғәмәлдәре тураһында уйландымы, һабаҡ алдымы?**

Аллаһ рәсүле үҙенең бер хәҙисендә: "Йоғошло ауырыуҙан арыҫландан ҡурҡҡан кеүек ҡурҡығыҙ", - ти. Ғүмәр хәҙрәт эш сәфәре менән Шам ҡалаһына барырға сыҡҡас, унда ваба ауырыуы башланғанын белеп ҡала һәм Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең: "Йоғошло ауырыу булған ергә бармағыҙ, барһағыҙ - унан сыҡмағыҙ", - тип әйткәнен иҫенә төшөрә лә кире борола.

Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең тағы бер хәҙисен иҫкә төшөрөү урынлы булыр: "Әҙәм балаларының күбеһе үҙҙәренә бирелгән ике ниғмәтте аңламай, алдана. Был ниғмәттәрҙең береһе - сәләмәтлек, икенсеһе - эш". Эйе сәләмәтлек беҙгә Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән ҙур бүләк. "Сәләмәт тәндә - сәләмәт аҡыл", тигән әйтем дә бар бит.

Күрәбеҙ, бөгөн киң таралған ауырыуҙарҙың күбеһе мосолмандар араһында элек булмаған. Сөнки улар һәр ваҡыт тәһәрәтле, ғөсөллө йөрөгән, туҡланыуҙа ла үҙҙәрен һаҡлай белгәндәр, хәрәмде ҡулланмағандар, гонаһҡа, боҙоҡлоҡҡа, исрафҡа бармағандар. Тимәк, Ислам ҡанундарын күҙәтмәһәк, ауырыуҙарҙың килеп сығыуына, таралыуына сәбәп яһайбыҙ.

Ил етәксеһе, төбәк, район башлыҡтары коронавирус афәтенән халҡын ҡурсалап, бөтәһен дә эшләргә тырыша. Бөгөн һәр бер төбәктә яңы дауаханалар төҙөлә, кәрәкле медицина ҡорамалдары һатып алына, табиптарға өҫтәмә түләү бойомға ашырыла, дезинфекциялау материалдары, битлектәр, комбинезондар етештереү яйға һалына. Ил етәксеһенең төбәк башлыҡтарына талабы бер - һәр кешенең һаулығы, именлеге өсөн көрәшеү! Ауырыуҙың таралыуын сикләү маҡсатында үҙизоляция, санитар-гигиеник нормаларҙы үтәү талап ителде. Тик беҙ талаптарҙы үтәйбеҙме, тыйылғандарҙан тыйылабыҙмы? Арабыҙҙа был хәлдәргә еңел ҡарағандар ҙа бар шул. Улар үҙҙәрен генә түгел, ә әйләнә-тирәләгеләрҙе лә сир йоҡтороу ҡурҡынысы аҫтына ҡуйыуын аңламай, күрәһең.

Ҡайһы берәүҙәр раҫлауынса, коронавирусты гонаһтарыбыҙ өсөн бирелгән яза тип тә ҡарарға ярамай. Ауырыу Аллаһының бәндәләренә йәннәт өсөн бирелгән бүләге булыуы ла мөмкин. Бер кемдән дә ғәйеп эҙләмәйек, берәүҙе лә тәнҡитләмәйек, бары тик беҙҙән нимә талап ителә, шуны теүәл үтәйек. Беҙҙең вазифа шул ғына. Сабыр булайыҡ. Сабыр итеү - һәр халыҡтың тотҡаһы, һәр яҡшылыҡ сабыр итеүҙән башлана.

Ватандаштарыбыҙҙың байтағы "күберәкте өмөт итмәй", изгелек, игелек юлына баҫты. Уларға Аллаһы Тәғәлә бәрәкәттәрен бирһен, "изгелеккә барыу юлдарын еңеләйтһен". "Кеше көсһөҙ итеп яратылды", - тиелә Ҡөрьән-Кәримдә. Был халыҡты берҙәмлеккә, татыулыҡҡа саҡырыу, тип аңларға кәрәк. Берҙәм булайыҡ. Донъяға, йәшәйешебеҙгә көҙгө аша түгел, таҙа быяла аша ҡарайыҡ.

**Мөхтәр МОНАСИПОВ,**
**Баймаҡ районы Ярат ауылы имам-хатибы.**

✓ ***Башҡорт иле Өфө йылғаһы үрҙәренән башлап, Ағиҙелдең барса ағымы буйлап, көньяҡта Муғоджар тауҙарына тиклем барып етә, көнбайышта Бөйөк Булғария менән сиктәш булһа, көнсығышта улар Урал аръяғы далаларын биләй.***



*ЫРЫУЫҢ КЕМ?*

# ЫРЫУЫБЫҘ - ЙӘНӘЙ,

## асылыбыҙ - көнбайыш башҡорттары



Суварҙарҙың бер өлөшө Волга йылғаһының уң яғына сығып, ошо ерлектә хәҙерге сыуаш исемендә билдәле булған халыҡты хасил итә. Волга Булғарияһы барлыҡҡа килгән ваҡытта улар инде тулыһынса төркиләшкән була. Әммә улар менән ҡәрҙәш булған мадъярҙар уғыр телле булып ҡала. Күрәһең, улар башҡа бер суварҙарҙан айырымланып йәшәй. Оло Тиган ҡәберлегендә табылған ҡомартҡыларҙың Паннонияла (хәҙерге Венгрияла) асылғандары менән оҡшаш булыуы (мәрхүмдәрҙе ерләү менән бәйле матди әйберҙәр) ошо фаразды дәлилләй. Был факт археологик ҡомартҡылары уртаҡ булған ҡәүемдәрҙең телдәре һәр осраҡта ла бер үк төрлө булмауын асыҡ күрһәтеп тора. Аралашыу теле үҙгәреү менән теге йәки был этностың матди мәҙәниәте әллә ни үҙгәрештәр кисермәй генә һаҡланып ҡалыуы мөмкин. Телдәре төркиләшкән суварҙар ҙа үҙҙәренең боронғо мәҙәниәтен юғалтмай, һәм уның боронғо мадъяр мәҙәниәте менән уртаҡлығын ошо рәүешле аңлатырға була. Был инде Оло Тиган ҡәберлегенең боронғо мадъяр мәҙәниәте ҡомартҡыһы булыуын инҡар итергә мөмкинлек бирә. Тимәк, тарихи Hungaria Major (Бөйөк Венгрия) - мадъярҙарҙың боронғо Ватаны, Волганың һул яҡ ярынан көнсығыштараҡ ятҡан ерҙәрҙә булмаған.

Бәшәнәктәр ҡыҫымы һөжүмтәһендә көнбайыш тарафтарға күсенеп киткән венгрҙар күпмелер ваҡыт дауамында Днепр һәм Днестр йылғалары араһындағы ерҙәрҙә йәшәй, улар был ерҙе Ателькуза тип атай, мәғәнәһе - йылға арауығы. Әммә бәшәнәктәр бында ла килеп етеп, венгрҙарға яңынан һөжүм итә. Венгрҙар, көнбайышҡараҡ йүнәлеп, Карпат тауҙары арьяғына барып етә. Бында улар инде үҙҙәре славян һәм валаш ҡәбиләләрен ҡыҫырыҡлап сығарып, яңы ватандарын таба.

922 йылда ул ваҡыттағы көньяҡ-көнбайыш башҡорттары ерҙәре аша Волга Булғарияһына юл тотҡан Ибн Фаҙлан мадъяр-венгрҙар хаҡында бер ни ҙә яҙмаған. Тимәк, X быуат башында Волганан көнсығышҡа табан ерҙәрҙә мадъярҙар булмай. Был сәйәхәтсенең замандашы Ибн Русте яҙмаларында ла Әл Маджгарийаның үрҙәрәк телгә алынған Ателькуза территорияһында булыуы хаҡында әйтелә.

X - XII быуаттарҙа йәшәгән ғәрәп авторҙары әл Мәсғуди, әл Истархи, Ибн Хаукаль, әл Иҙриси Көньяҡ Уралда һәм уға яҡын ерҙәрҙә тик башҡорттар ғына йәшәүен билдәләй. Улар ҙа Magna Hungaria исемендә билдәле булған мадъяр илен был тарафтарҙа тапмаған. Әл Иҙриси картаһына ярашлы, башҡорт иле Өфө (Ҡариҙел) йылғаһы үрҙәренән башлап, Ағиҙелдең барса ағымы буйлап, көньяҡта Муғоджар тауҙарына тиклем барып етә, көнбайышта башҡорт ерҙәре Бөйөк Булғария менән сиктәш булһа, көнсығышта улар Урал аръяғы далаларын биләй.

Боронғо мадъяр ерҙәренең ҡайһы тарафта булыуын был ҡәүемдең тарихы бәйән ителгән Gesta Hungarorum тип аталған венгр хроникаһындағы мәғлүмәттәр аша билдәләп була. Унда әйтелгәнсә, Ателькузаға күсенер алдынан уларҙың ата-бабалары Dentumoger тип исемләнгән тарафта йәшәй.

Ҡайһы бер ғалимдар был атаманың мәғәнәһе "Дон мадъярҙары" тигәнгә тура килеүен билдәләй. Шулай итеп, боронғо мадъяр тарихын бына шулайыраҡ итеп күҙалларға була. Күрәһең, V - VI быуаттарҙа уҡ уғыр телле суварҙарҙың бер өлөшө, савирҙарҙың көнбайышҡа табан дөйөм хәрәкәтенә ҡушылып, Волга аша сыға, унан һуң Дон буйҙарында төпләнә. Gesta Hungarorum хроникаһында 819 йылда кенәз Алмостың атаһы, венгр юлбашсыһы Угектың әлеге Dentumoger ерендә йәшәүе хаҡында мәғлүмәт теркәлгән. Бында ул саҡта иң ҡеүәтле венгр ҡәүеме булараҡ өҫтөнлөк алған Moger ҡәбиләләр союзы барлыҡҡа килә. Ә мадъярҙарға, улар Волганан көнсығыштараҡ ерҙәр аша күсенеп барған бер осорҙа, шулай уҡ бәшәнәктәр ҡыҫымына дусар ителгән юрматы һәм йәнәй ырыуҙарының бер өлөшө ҡушылып киткәндер, тип фараз итергә була. Күрәһең, донъя тарихында "халыҡтарҙың бөйөк күсеше" тип исемләнгән ваҡиғалар барышында мадъяр-башҡорт сәйәси бәйләнеше барлыҡҡа килә. Алдараҡ әйтелгәнсә, IX быуат аҙағында бәшәнәктәрҙең аяуһыҙ һөжүменән ҡасып, мадъяр-венгрҙар Дунай буйҙарындағы Паннония тип аталған ерҙәргә барып сыға, уны үҙҙәренең яңы ватаны итеүгә өлгәшә.

Әммә мадъяр союзына ингән барса халыҡ та көнбайышҡа ҡасып китмәй, ата-бабалары ерендә ҡалыуҙы хуп күрә. Әйткәндәй, ошондайыраҡ ваҡиғаларҙың алыҫ ауазы һуңғараҡ мең шәжәрәһендә лә сағылыш тапҡан. Юрматылар һәм йәнәйҙәрҙең дә күпселеге Уралды ташлап китмәй. Шуныһы ҡыҙыҡ, Верона ҡалаһында йәшәүсе бер сәйәхәтсе Рим папаһы Пий II (1405 - 1464 й.й.) менән һөйләшкәнендә үҙенең бөтә Скифияны йөрөп сығып, Танаис (Дон) йылғаһы үрендә Паннония мадъярҙары менән бер үк телдә һөйләшкән кешеләр менән осрашыуы хаҡында хәбәр итә. Ысынлап та, көнсығыш мадъярҙары хаҡында башҡа мәғлүмәттәр ҙә бар. "Монголдарҙың йәшерен тарихы" исемле риүәйәттә Сыңғыҙ хандың ғәскәр башлығы Сүбидәй баһадирҙың Көнсығыш Европаға походы барышында монгол баҫҡынсылығына ныҡышмалы ҡаршылыҡ күрһәткән ҡәүемдәр һаналып үтә: Канлин (ҡаңлылар), Кибчаут (ҡыпсаҡтар), Бачжигит (башҡорттар), Орусут (рустар), Асут (осетиндар), Сесут, Мачжар (мадъярҙар), Кашемир, Сергесут (черкестар), Булар, Келет.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔ **1816 йыл -** шағир Әбделмәних Ҡарғалы Бохар илсеһе Мөхәммәҙисафа етәкселегендә Төркиәгә сәйәхәт ҡыла, Ҡаһирә, Мәккә һәм Мәҙинә ҡалаларында була.

➔ **1817 йыл** - Златоуста һалҡын ҡорал етештереү буйынса завод сафҡа индерелә. Мәшһүр металлург Павел Аносов булат ҡоросон иретеү ысулын тергеҙә һәм "Булат хаҡында"тигән хеҙмәтен яҙа. Завод директоры итеп уның үҙен тәғәйенләйҙәр.

➔ **1817-1830 йылдар** - Ырымбурҙың хәрби губернаторы Петр Кириллович Эссен идара иткән йылдар. Был йылдарҙа уның идаралығы тарафынан байтаҡ файҙалы ғәмәлдәр башҡарыла. Казак балалары өсөн - мәктәп, Ырымбурҙа - Неплюев хәрби училищеһы, Өфөлә гимназия асыла, ике атлы артиллерия казак ротаһы ойоштоpола. Эссен - башҡорттарҙан 15 даими казак полктарының хәрби идаралыҡ учреждениеһын булдырыу, шулай уҡ телдән ярашлырыусы судтар өсөн халыҡ араһынан мировой судьялар һайлау мәсьәләләре буйынса проекттар авторы. Эссендың поручигы Собханғолов миссия менән Хива ханына ебәрелә һәм был Хива менән сауҙа үҫешенә ыңғай йоғонто яһай.

➔ **1819-1886 йылдар** - Рус география йәмғиәте, Ҡаҙан университеты ҡарамағындағы Археология, тарих һәм география йәмғиәте һәм башҡа фәнни ассоциациялар ағзаһы, Ырымбур крайын өйрәнеүсе Руф Гаврилович Игнатьев йәшәгән йылдар. Тап уның фәнни хеҙмәттәре беҙгә тарихыбыҙҙың ҡайһы бер билдәһеҙ яҡтарын асты, ә иң мөһиме - Салауат Юлаевтың шиғырҙары беҙгә килеп етте.

➔ **XIX быуаттың 20-се йылдар уртаһынан алып 40-сы йылдарға тиклем** - Ырымбур губернаһына Рәсәйҙең урта өлөшөнән күпләп урыҫ крәҫтиәндәре күсеп ултыра.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**
**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Башҡорттар артҡа сигенмәй

1942 йылдың 6 июле. Немец частары, юғалтыуҙарға ҡарамай, һөжүмен көсәйтә бара: улар тап 8-се атлы корпус оборона тотҡан йүнәлештә хәл иткес удар менән беҙҙең кавалеристар тотҡан фронтты йырып, Воронеж ҡалаһын төньяҡтан ҡамап алырға ниәтләй. 112-се Башҡорт атлы дивизияһының 294-се һәм 275-се полктары айырыуса ҡаты ҡыҫымға дусар ителә. Улар биләгән позицияларға бер юлы 18 дошман самолетынан бомбалар яуа, немец атакаһы алдынан бер сәғәт дауамында мина һәм снарядтар ярылып тороп, тирә-яҡты ерҙән күтәрелгән ҡара туҙан һәм төтөн ҡаплай.

275-се полктың уң флангыһында лейтенант Бәҙри Мәмбәтҡоловтың 2-се эскадроны оборона тота. Ул инде тәжрибәле командир, 1939 - 1940 йылдарҙа фин һуғышында ла ҡатнашып өлгөргән икән. Дошман позицияларын күҙәтеп тороп, ул Олым йылғаһының ҡаршы яҡ ярында, Секерино ауылынан көнсығыштараҡ, дошман көстәре туплаһыуын шәйләп ала. Эскадрон командиры, майор Таһир Кусимов менән кәңәшләшеп, үҙенең яугирҙары менән йылға аша сығып, дошман һис көтмәгән яҡтан немецтарға һөжүм итергә ҡарар итә.

Олым йылғаһының ике яры буйлап арыш баҫыуҙары һуҙылған. Ошо арыш араһынан йәшеренеп барып, Мәмбәтҡолов яугирҙары немец колоннаһы хәрәкәт иткән юл буйында засада ойоштора. Колонна яугирҙар тапҡырына етеү менән, немецтар утлы ҡурғаш ҡойоно эсендә ҡала. Тап шул мәлдә лейтенант боецтарын атакаға күтәрә, дошман төркөмө тулыһынса юҡ ителә. Был алдан әҙерләнгән немец һөжүмен бер аҙға булһа ла туҡтатып тора.

Әммә, күп тә үтмәй, 275-се полк оборонаһының урта өлөшөндә, Алешки - Малые Борки рубежында бер батальон немец пехотаһы һәм миномет батареяһы Олым йылғаһының көнсығыш ярына сығып, беҙҙең подразделениеларға хәүеф тыуҙыра. Был рубежда өлкән лейтенант Вәли Вахитовтың 3-сө эскадроны оборонала тора. Немецтар тап ошо йүнәлештә, үҙҙәренең һан һәм ҡорал өҫтөнлөгөн файҙаланып, полк оборонаһын йырып үтергә ниәтләй. Комдив Шайморатов артдивизионға, көслө ут асып, немецтарҙы туҡтатырға бойора. Лейтенант Миңлеғол Миңлегәрәй улы Гәрәевтың батареяһы иң элек дошман минометчиктары өҫтөнә снаряд яуҙырып, уларҙы ҡырып һала. Бер ыңғайы немецтар һалып өлгөргән кисеү ҡоролмалары ла юҡ ителә. Старшина Ғәлим Әлибаевтың орудие расчеты, кесе лейтенант Ғабдрахман Яйыҡбаевтың пулеметсылары, бик мәргән атып, дошман һалдаттарын туҡтата.

Ошо алышты күҙәтеп торған майор Т.Т. Кусимов тиҙ арала 3-сө эскадрон позицияларына үҙе лә килеп етә, эскадрон командиры менән яугирҙарҙы контратакаға күтәрә. Ошо нәфрәтле контратака һөҙөмтәһендә тере ҡалған немец һалдаттары артҡа сигенә, Олым йылғаһының үҙҙәре биләгән уң яҡ ярына кире сығырға мәжбүр ителә. Һуғыш яланында уларҙың 100-ҙән ашыу үле һалдаты ятып ҡала.

**Вәли ИҘРИСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Ҡатын-ҡыҙ, күпме генә аҡыллы, белемле булмаһын, улын йөҙ проценты менән ир-ат итеп тәрбиәләй алмай. Үҙен, ғаиләһен яҡлай, ҡарай, һаҡлай алмаған ир ошо исемде шартлыса йөрөтөүсе генә.***

# БӨРЙӘНДӘРҘЕҢ...

Ҡатын-ҡыҙҙың ҡырҡ сырағы

**Мин Бөрйәнде уның гүзәл тәбиғәте аша ғына түгел, ә гүзәл кешеләре аша беләм. Ә гүзәл кешеләр улар үҙ йәшәйештәре һәм ҡылған ҡылыҡтары, башҡарған шөғөлдәре менән үҙ ерлектәрен биҙәп, йәмләп һәм ҡырҙағыларға уның исемен ишеттереп, белдереп тороусылар. Шундайҙарға әҙибәләр, Бөрйән районының "Таң" гәзите хәбәрселәре Айһылыу Ғарифуллина менән Таңһылыу Баһаутдиноваларҙы ла индерәм. Улар, һис шикһеҙ, райондың ғына түгел, башҡорт әҙәбиәтенең, журналистикаһының да сағыу өлгөләре. Телдәренән тамған һәр һүҙ һутлы, күңелдәренән сыҡҡан һәр фекер фәһемле был апайҙарҙың. Беҙҙең әңгәмәне уҡып, үҙегеҙ инанығыҙ.**

**Һеҙ икегеҙ ҙә ғүмер буйы ауылда йәшәп ижад итеүсе ҡатын-ҡыҙҙар. Был үҙе үк күптәр өсөн мөмкин булмаған ауыр хеҙмәт. Күңелендә илһам йөрөткән ҡатын-ҡыҙҙар ауыл ерендә көнкүреш мәшәҡәтенә баҫылып ҡалыусан, әҙәбиәттән ситләшеп ҡалыусан. Нисек һаҡлай алдығыҙ һеҙ йөрәгегеҙҙә был ҡомарҙы?**

**Айһылыу Ғарифуллина:** Ғүмерҙә лә үҙемде көсләп, шуны яҙайым, быны ижад итәйем, тип ултырманым. Был, бәлки, дөрөҫ тә түгелдер. Шундайыраҡ бурыс-маҡсаттар ҡуйылһа, бәлки, күберәк, күләмлерәк әҫәрҙәр ижад ителер, китаптар сығыр, сағыуыраҡ балҡыш ҡалдырылыр ине... Инеләр ярҙам итмәй шул: ни яҙылған - шулар яҙылған, яҙылмағандар ваҡыт менән бергә юҡҡа сыҡҡан.

Ауылға килгәндә, кем әйтмешләй, шағирҙар бит ауылдарҙа тыуып, ҡалаларҙа йәшәп үләләр, тигәндәй, йөҙ ижадсының 99-ы, барыбер, ауылдан сыҡҡан. Элегерәк, интернет, заман техникалары булмаған саҡта, бушҡа ҡалаға кителмәгән, тигән ҡорт мейене юҡ-юҡта тишкеләй ине. Хәҙер - юҡ. Ауыл - минең теүәл донъям, матур тәбиғәтем, телебеҙҙең һутын һаҡлаусы мөхитем, минең күңел донъямды һаҡлап тороусы ҡабырсағым. Бигерәк тә бынау үҙизоляция ауылдың ҡаланан өҫтөнлөгө күп икәнен аңлатты. Бында, исмаһам, дүрт мөйөшкә бикләнеп ултырмайһың: үҙ ихатаң, биләмәң, тигәндәй... Йәбешеп ятып донъя көтөү тигән сифат та миңә шыпа йоҡмай. Әсәйем әйтмешләй, минең үҙ туҡһаным һәр ерҙә лә туҡһан - кешеләр менән ярышмайым, башҡаларҙың бәхетенә, байлығына көнләшмәйем, кеше шулай тиер, былай тиер, тигән ҡурҡыу ҙа юҡ - миңә Аллаһ хөкөмдар, һәм бөттө!

Күңелем төшһә, һыпырып йөрөп эш эшләргә, күңелем төшмәһә, ҡыл да ҡыбырлатмай, үҙ донъяма бикләнеп ятыу ҙа ситен түгел миңә.

**Таңһылыу Баһаутдинова:** Ижад һинең эшең бармы, балаң мыжыймы, ireңә ашарға бешерергә, һыйыр һауырға кәрәкме икәнде һорап торамы һуң инде!.. Асфальт тишеп сыҡҡан гөл кеүек бит ул - ҡулыңа ҡәләм тоттора ла ҡуя! Ошо ижад тигән серле утрау булмаһа, был тормошта ҡалайтыр инем икән... Әллә ниндәй "щедеврҙар" яҙмаһам да, тормоштоң ығы-зығыһынан, ваҡлыҡтарынан йыш ҡына шул "утрауға" ҡасып, "имен" ҡала киләм, шикелле. Әллә ней матди байлыҡҡа йәбешеп ятмағанға ла, донъя малына рыяраҡ ҡарағанға ла һаҡлай алғанбыҙҙыр, тимен, был ҡомарҙы. Айһылыу менән икебеҙ ҙә "бер төрлөрәк" кешеләр бит беҙ.

Бер ҡыҙыҡ хәл иҫтә. Яңы тун һатып алып ҡайттым да, кейеп ҡарарға тип, көҙгө алдына баҫтым. Әсәйем был мәлдә беҙҙә ине. Һиҙеп торам, был минең яңы кейемгә риза түгел. Уларҙың бер бәлтәһе булған да, шуны аратирә ҡәҙерлегә генә кейгәндәр, күп ғүмерҙәре фуфайкала үткән. Ә беҙгә яҡшы кейем көн һайын кәрәк. "Матурмы?" - тием. Шартланы теге. "Өйөңә йыһаз алмай, өҫтө-өҫтөнә кейем алаһың да йөрөйөң", - тип бурылданы. "Әсәй, минең өйгә йыһаз нимәгә, өйөмә туғандар килә лә дуҫтар килә, бөтә "дошмандар" урамда бит. Шулар алдында һыр бирмәҫкә кәрәк", - тип шаяртыуға борғас, бүтән өндәшмәне. Әйткәндәй, Айһылыуҙың бер шиғырындағыса, ауылда бит, яҙҙынмы, тимәйҙәр, һауҙыңмы, тип һөйләшәләр...

**Миңә йыш ҡына "Һиндәге тел, күңел байлығы тыуған ерегеҙгә бәйлеме?" тигән һорауҙы бирәләр. Йәнәһе, һығылмалы башҡорт теле төпкөл бөрйәндәрҙә генә һаҡланған, тигән мәғәнәлә. Ошо уҡ һүҙҙәрҙе һеҙгә лә төбәйем: ҡайҙан һеҙҙә быңдай рухи байлыҡ? Ниндәй ғаиләләр, ниндәйерәк ҡарашлы атаәсәләр тыуҙырып үҫтерҙе һеҙҙе? Ниндәй туғандар, дуҫтар, йәмғиәт тәрбиәләне?**

**Айһылыу Ғарифуллина:** Үҙемде белә-белгәндән әсәм беҙҙе гел мәҡәл менән әрләне, мәҡәл менән өйрәтте. "Бер аяғығыҙҙы баҫҡансы, икенсеһен эт ашай", "Булыр бала биләүҙән", "Эт - эткә, эт - ҡойроҡҡа" һ.б. Һин-ялҡау, эшкинмәгән, тип тураһын әйтеп әрләһә, бер ҡолаҡтан инер, икенсеһенән сығыр ине. Ә бит ошо мәҡәл аша әсәй нимә әйтергә теләне, тип күпме баш ватаһың, уны башта миңде үк булмаһа ла, йөҙҙө өйөрөлтәһең, хәтер янсығына мәңгелеккә бикләп ҡуяһын унан. Тағы: беҙ бит китап уҡып үҫкән быуын. Элек һәр өйгә гәзит-журнал да күп килде, китапханалағы китаптарҙы ярышып уҡыр инек.

Былары - ҡәләм әһеле өсөн икенсел нәмәләр барыбер. Яҙыу һәләте, нимә генә тиһәк тә - Аллаһтан бирелә. Ул бирә икән - яҙаһың, юҡ икән - юҡ.

Бәғзе бер шиғырҙарымды мин "танымайым" - быны мин яҙҙым микән, тип ултырған саҡтар күп. Сөнки күңелгә илһам килһә, шуны теркәүсе ролен генә үтәп ҡуяһың - үҙенән-үҙе түгелә бит ул аҡҡа...

Хәҙерге балаларҙы беҙ китап, гәзит-журнал уҡымай, тип әрләйбеҙ. Беҙҙең өйҙә, киреһенсә, беҙҙе эш эшләмәй китапҡа тексәйеп ултырған өсөн әрләйҙәр ине. Ҡулға һәйбәт кенә китап килеп эләкһә, билдәле, унан айырылып булмай. Әсәй тышта саҡта китаптан күҙҙе алмайһың да, ул килеп инһә, китабыңды йәһәт кенә мендәр аҫтынамы, ҡаралды араһынамы тыҡшырып ҡуяһың да, иҙән һеперепме, өйҙө йыйыштырыпмы йөрөгән кеше булаһың. Төнөн юрған аҫтында фонарь яҡтыртып та китаптан айырыла алмай ятҡан саҡтар булды. Атайым, мәҫәлән: "Иң ялҡау кеше - китап уҡыған һәм симешкә сирған кеше", -тип әйтә торғайны. Был тыйыуы китаптан айырмаһа ла, мин әле булһа симешкә сирыуҙы өнәмәйем.

Туғыҙ балалы колхозсы ғаиләһендә 7-се бала булып тыуғанмын мин. Атай менән әсәйҙең ҡиблаһы, ике ҡулы белгәне лә эш кенә булды. Беҙҙе шул эш менән тәрбиәләнеләр - замандаш малай-ҡыҙҙар эшләгән бөтә ҡара эште эшләп, ысын ауыл балаһы булып үҫтек. Минең өйгә эшем менән ҡыҙыҡһынғандарын, эшләнеңме, тип һорағандарын хәтерләмәйем - бәғзе саҡ сумкамды мәктәптән ҡайтҡас ҡайҙа быраҡтырғанмын, шунан һәрмәп алып дәрескә китә инем. Шуныһы: уҡытыусының һөйләгәнен иғтибар менән тыңлаһам, миңә шуны ҡайтанан һөйләү ауыр бирелмәне.

Беҙ, шул осор балалары, үҙебеҙ уйын уйлап сығарып, үҙебеҙ уйынсыҡтар эшләп алып үҫтек бит. Күршелә генә класташым, балалыҡ дуҫым Зилә Лира (Ҡужәхмәтова) йәшәне. Уларҙан ҡайтыша белмәй уйнайым. Әсәйем бәғзе саҡ: "Марат балаһы" , - тип әрләй ине. Зилә лә - ижад кешеһе. Икәүләп төрлө сәскә-үләнде ҡурсаҡтар итеп, таптарҙы ергә ҡатып ауыл төҙөп, һөйләнә-һөйләнә уйнайбыҙ, әкиәттәр уйлап сығарабыҙ. Йөрөй торғас, талашып китәбеҙ ҙә, бер-беребеҙҙе үсекләп таҡмаҡтар әйтешеп таралышабыҙ. Мәҫәлән:

*Зилә, Зилә, Зиләйлүк,*  
*Баш(ы) урынында сәйнүк.*  
*Айыу, айыу, айғата -*  
*Аҡырып илап ята.*

Айыуы - минең бала саҡ ҡушаматы. Ошо "һәләт"ебеҙ ҙә ижад кешеһе булыуға этәргес биргәндер, тим.

**Таңһылыу Баһаутдинова:** Миңә лә, һиндәге тел, тигәнде ишеткәнем бар. Ләкин миңә күберәк әсе теллелек, тура һүҙлелек өсөн әйтәләр. Ул тәбиғәттән булалыр инде. Уны эргә-тирәләгеләр генә тәрбиәләй алмайҙыр. Әсәйемдең телгә һөйөү тәрбиәләп ултырырға ваҡыты булманы. Ул, 30 йәшендә генә тол ҡалып, биш балаһын яңғыҙы тәрбиәләгән әсә, ферманан ҡайтып инмәне. Шулай ҙа төндәрен әкиәттәр һөйләгәне иҫтә.

Яҡын туғандар араһында ла сәсәндәр юҡ. Хәйер, Сабирйән сәсән әсәй яғынан әҡрәбәм була.

Шиғырҙарҙы башта йәшереп кенә яҙҙым. Бер мәл уҡытыусы шиғыр яҙып килергә өйгә эш бирҙе. Эй тырышып-тырышып "Тау шыуабыҙ" тигән шиғыр яҙҙым. Башҡалар барыһы ла ҡайҙандыр күсергәйне. Миңә генә "4"-ле булды. Ҡалғандар "5"ле алып ҡыуанды. Телгә кире ҡайтҡанда, беҙ бит йығылып ятып китап уҡыған быуын. "Кәмһетелгәндәр", "Оло Эйек буйында", "Емеш", "Ырғыҙ" кеүек китаптарҙы, Я. Хамматовтың, Н. Мусиндың һәм башҡаларҙың китаптарын 5-7-се кластар тирәһендә үк уҡып бөттөк. Ҡыҙҙар менән әкиәттәр һөйләштек, йомаҡтар ҡойоштоҡ, үсекләшеүҙәребеҙ ҙә шиғри юлға һалынған ине. Ғөмүмән, беҙҙең урта тош гөрләп торҙо.

**Ҡатын-ҡыҙ сабырлығы тураһында һөйләшәйек әле? Сабыр төбө һары алтынмы ул? Әллә башҡасараҡ та булырға мөмкинме?**

**Таңһылыу Баһаутдинова:** Сабыр төбө гел алтын түгел икәнен дә аңғартып тора тормош. Һин сабыр иткән арала өлөшөңдө сәлдереүселәр ҙә осрап ҡуя. Ҡатын-ҡыҙ сабырлығы тураһында беҙгә һөйләргә түгелдер инде ул. Беҙ Айһылыу менән икебеҙ ҙә сабырһыҙыраҡ, яндырайыраҡ кешеләр.

Ләкин сабыр итергә лә тура килә шул... Хатта ныҡ сабыр итергә. Ундай осраҡтарға төбәлгән бер шиғырым да бар:

*Түҙем, түҙем, түҙем...*  
*Әрһеҙ ҙә һуң үҙең -*  
*Ниндәй саҡтар булды,*  
*Үҙгәрмәне йөҙөң.*  
*Ҡыҫҡанһың да тешең,*  
*Уртың ҡанатҡансы,*  
*Аяғөҫтө тораң*  
*Ҡайсаҡ таң атҡансы...*  
*Була шундай саҡтар -*  
*Алҡымыңда йәнең.*  
*Күрмәй хатта күҙҙәр*  
*Яҡты донъя йәмен.*  
*Юҡ, әрһеҙлек еңә -*  
*Тороп баҫаң, түҙем.*  
*Әсе йәшен йотоп,*  
*Тура ҡарай күҙең...*  
*Арыным мин һинән,*  
*Ташла мине, түҙем...*  
*"Минһеҙ яңғыҙ нисек*  
*Көн итерһең үҙең..."*  
*...Шулай ти ҙә түҙем,*  
*Ҡосағына ала.*  
*...Тик уртымда ғына*  
*Яңы яра ҡала...*

Ошолайыраҡ саҡтар ҙа була инде, ҡалайтаһың...

**Айһылыу Ғарифуллина:** Сабырлыҡ тигән нәмәне миңә Аллаһ бик самалап биргән шул. Мин шуға, әлеге лә баяғы әсәйем әйтмешләй, "Аҡыллы уйлағансы алйот эшен бөтөргән" мәҡәле буйынса йәшәнем. Минең холҡом да шулай: сабырһыҙ, эштең һөҙөмтәһен шундуҡ күрер, уйлағанды нәҡ ошо мәлдә, ошо урында әйтер кәрәк... Дингә килеүем, шөкөр, миндә ошо матур сифатты үҫтерҙе һәм тотош донъя менән гармонияла йәшәргә форсат бирҙе. Хәҙер бушҡа-юҡҡа янмайым-көймәйем. Тимәк, Аллаһ ҡушыуы ошо, тимәк, тәҡдиргә шулай яҙылған, тигән аҡылдан сығып эш итһәң, донъя һәр саҡ түңәрәк, күңел тыныс.

**Һеҙ - ир ҡатындары, малайҙар әсәһе. Бөгөнгө ир-егет ысынлап та яҡлауға мохтажмы, нисек уйлайһығыҙ?**

**Айһылыу Ғарифуллина:** Һәр кемдең үҙ тәҡдире, үҙ юлы. Мин, мәҫәлән, атай баш булған ғаиләлә үҫтем. Атайҙыҡы - һүҙ, атайҙыҡы - закон һәм ул, ысын хәҡиҡәткә тап киләме-юҡмы, үтәлергә тейеш. Минең ирем иһә ике йәштән атайһыҙ ҡалып, әсәй тәрбиәһендә генә үҫкән. Шуға ул миңә әллә ни баш була алманы. Унда лидерлыҡ, ойоштороу һәләте юҡ. Шуға, власть йомшабыраҡ киткәндә уны эләктерергә генә тороусылар һәр даим булған кеүек, үҙемдең ғаиләлә "президент" ролен йылдың 365 көнөндә үтәмәгәндә лә, 360 көнөндә ихтыярһыҙҙан үтәргә тура килә. Әрменән ҡайтҡан улымды үҙемде нисек тәрбиәләгәндәр, шулай итеп тәрбиәләргә тырыштым. Шөкөр, эсмәй, тартмай, дингә ынтылышы бар, эш эшләргә генә тора.

Бөгөн тотош донъя баштүкән әйләнгән бит ул: һәр нәмә, һәр кем үҙ урынында түгел һымаҡ. Ирҙәр тормош дилбегәһен ҡулдан ысҡындырҙы. Бөтәһе лә түгел, әлбиттә. Ҡатын-ҡыҙ, күпме генә аҡыллы, белемле булмаһын, улын йөҙ проценты менән ир-ат итеп тәрбиәләй алмай, сөнки Аллаһ тарафынан уға быңдай миссия бирелмәгән. Үҙен, ғаиләһен яҡлай, ҡарай, һаҡлай алмаған ир ошо исемде шартлыса йөрөтөүсе генә. Һәр кем үҙ урынына ултырһын, үҙ миссияһын үтәһен өсөн байтаҡ ғүмер үтеп, һыуҙар ағыу кәрәк булыр әле ул. Йәшәй-йәшәй шуға төшөндөм - ысын ирҙәр генә ысын ир-ат тәрбиәләй ала. Атайым, мәҫәлән, дүрт класс белеме менән дүрт улына оҫталыҡтан,

***✓ Мин үҙем ҡыҙымды бәләкәй сағында ҡатыраҡ тоттом. Грузиндарҙың бер әйтеме бар, тиҙәр бит: балаңды бәләкәй сағында үҙеңә дошман ит, ҙурайғас дуҫ булыр, әгәр бәләкәй сағында дуҫ итһәң, ҙурайғас дошман булыр.***



# АЙҺЫЛЫУЫ ҮӘ ТАҢҺЫЛЫУЫ



һәр саҡта ла ир була белеүҙән, яуаплылыҡтан башҡа нәмә ҡалдыра алманы. Аллаға шөкөр, дүрт ир туғанымдың да ғаиләһе, ҡатындары, балалары өсөн яуаплылығы ҙур - берәһе лә хөкүмәт эшендә түгел, әммә донъялары бөтөн, ризыҡтары шөкөр, балалары ҡараулы. Яуаплылыҡ тигән орлоҡто ул һәр уланының күңеленә һеңдерә алған. Ошо яғы менән генә лә ул ысын ир-ат булған - йәне йәннәттә булһын!

**Таңһылыу Баһаутдинова:** Мин ир баланың өләсәйемен генә. Ир-егеттәр, ысынлап та, яҡлауға мохтаж, тип ауыҙ тултырып әйтә алмайым. Ирҙәр тәбиғәттән бирелгән тәғәйенләнештәре буйынса йәшәһә, уларға яҡлау кәрәкмәй һәм уларҙың ролен бер кем дә тартып алмаясаҡ, минеңсә. Сөнки көслө, яҡындарына һәр йәһәттән терәк булырға тырышып торған ир-егет янында ҡатын-ҡыҙ ҙа үҙ асылында ҡала. Донъяһын да гөл итеп көткән, ғаиләһенә лә ҡәлғә булып йәшәгән ир-аттарыбыҙ ҙа күп, шөкөр. Уларға ҡарап йәлләү хисе түгел, ғорурланыу, һоҡланыу хисе генә уяна. Үҙемдең иң яҡын ир туғандарым булған ике туған ҡустыларым араһында бөгөн, мәҫәлән, һаҡлауға "дусар" булғандары юҡ - донъя көтөргә, эшләргә тырышып торалар. Кейәүемә лә шөкөр итәм - ысын ир-егеттәргә хас булырға тейеш сифаттарға эйә.

**Йәш ҡатын-ҡыҙҙарға кәңәш бирә алырлыҡ, аҡыл өйрәтерлек йәки апай, инәй булып абруй тота алырлыҡ булыуҙың ниндәй нигеҙләмәһе бар: тәжрибәме, күпте белеүме, үтелгән тормош юлымы, дәрәжәме?**

**Таңһылыу Баһаутдинова:** Бында ярҙам итергә теләүҙе тәүге урынға ҡуйырға кәрәктер. Кешене бәхетлерәк итке килеү теләгеn. Дәрәжә лә, тәжрибә лә түгел, күңел һиҙгерлеге, тойомлау һәләте ярҙам итәлер...

Редакциябыҙҙағы Айһылыу менән икебеҙ ултырған бүлмә психологик ярҙам бүлмәһенә лә әйләнеп киткеләй, эйе. Ауыр уйҙары, проблемалары менән килгән нисә кеше, яҙылып, дәртле баҫып сығып китте икән беҙҙән... Хатта димсе ролен дә башҡарып, яңғыҙ йәндәрҙе табыштырған саҡтарыбыҙ ҙа булды. Ул яңғыҙ ҡаңғырған йәндәр бер бөтөнгә әйләнеп, шул тиклем матур итеп, дәртләнеп йәшәп яталар. Ҡыуанып бөтә алмайбыҙ. Үҙебеҙҙең күңел яраларабыҙҙы бер-беребеҙгә түгеп, шәмәрешеп тә алабыҙ ҡайһы саҡ. Тормош бит...

**Айһылыу Ғарифуллина:** Һикһән йыл йәшәп, һигеҙ тинлек аҡыл тупламаған инәйҙәр бар, һигеҙ йәшендә һине аптыратырлыҡ аҡылға эйә балалар бар. Йылдар ғына аҡылды билдәләмәйҙер ул. Аҡыл да - Аллаһ бүләге бит ул. Тормош тәжрибәһе, күргән-кисергән, төрлө яҡлап ғилем алыу, бигерәк тә динебеҙҙе өйрәнеү, Аллаһ ҡанундары буйынса йәшәү кешене аҡыл бирерлек дәрәжәгә күтәрәлер ул.

**Ғаиләлә йәберләүҙе иҫкәртеү, сикләү буйынса закон тормошҡа ашырылмаҡсы икәнде беләһегеҙ. Депутаттар менән бына ошо темаға һөйләшеү уҙғарғас, минә ауыл ҡатын-ҡыҙҙарынан күп кенә хаттар килде. Эйе, ғаиләлә йәберләнеп йәшәүсе ҡатындар күп... Ни өсөн ҡатын-ҡыҙ ошо хәлгә ҡала? Ни өсөн үҙен яҡлай алмай йә ҡорбан хәләтенә түҙә? Һеҙ быларҙы нисек аңлатыр инегеҙ? Ниндәй кәңәштәр бирер инегеҙ?**

**Таңһылыу Баһаутдинова:** Йылдар буйы йәберләнеп йәшәгән ҡатын-ҡыҙҙарҙы күреп беләм. Бер мәл берәүһенә, нишләп бынау заманда иҙелеп йәшәйһең, полицияға хәбәр ит, тигәйнем: "Полиция мине көнө-төнө һаҡлап тора алмай бит, бер килер, ике килер, ә миңә артабан йәшәргә кәрәк. Айырылыр инем, ауылда ирһеҙ донъя көтөүе ауыр. Аҡса эшләмәһә лә, бесән, утын кеүек ирҙәр эштәрен теүәлләй бит", - тине. Икенсе танышым, ҡайҙа барайым мин хәҙер, кемгә кәрәкмен мин, тыуған йортомдан әллә ҡасан уҡ айырылғанмын, тине. Күп ҡатын-ҡыҙҙар иң беренсе балаларын уйлай. Ярай, ят ярлыҡамаҫ, үҙеңдеке үлтермәҫ, тигәндәй, үҙ атаһына атай тип йәшәһендәр, тиеүселәр ҙә бар. Йәнә өйрәнгән, яйға һалынған йәшәү рәүешен үҙгәртеүҙән, билдәһеҙлектән дә ҡурҡа күптәр. Нимә тип кенә кәңәш бирәһең инде. Ир менән ҡатын араһына инеүе лә ҡыйын бит ул. Улар таң атыуға ярашып тороп, һинең ғәйепле булып ҡалыуың да бар... Йәки, ҡатын-ҡыҙ, айырылып, күпмелер ваҡыт үткәндән һуң, тиран ирен һағына башлай һәм, их, фәләндең һүҙен тыңлап әрәм булдым, йәшәр ҙә ятыр инек әле, мужыт рәтләнеп китер ине, тип үҙеңде ғәйепле итеп тә ҡуйыуы бик ихтимал.

Ә тирандарҙы үҙгәртеп булмайҙыр ул. Минеңсә, көсһөҙ, ирмен тигән ирҙәр менән ярыша алмаған, бәләкәйҙән әсәһенең итәгендә үҫкән, тормошта үҙ урынын тапмаған һәм, әлбиттә, эске яратҡан ир-егеттәр генә ҡатын-ҡыҙға ҡул күтәрә, рәнйетә. Көслө ир-ат ундай түбәнлеккә төшмәй.

**Айһылыу Ғарифуллина:** Эйе, йәберләнеп йәшәгән ҡатындар күп... Әллә ниндәй аҡыллы, ҡаты закондар индереп тә быны тыйып булмаясаҡ, әгәр ир кешенең башында үҙ аҡылы, йөрәгендә ҡатынына ҡарата һөйөүе, аяуы, ихтирамы, иманы булмаһа. Мин иренән туҡмалып, әҙәм сыҙамаҫ хәлгә түҙеп, йәбер-золом күреп йәшәгән ҡатындарға түгел, ә үҙ ваҡытында яҙмыш йырҙаһын бора, аныҡ ҡарар ҡабул итә, дөрөҫ ҡарарға килә алған ҡатындарға һоҡланам. Бер ҡул күтәргән ғүмер буйы туҡмаясаҡ, бер мыҫҡыл иткән ғүмер буйы көләсәк. Кеше үҙгәрмәй. Быға һәр кемдең үҙе миҫалы. Йөҙҙөң, меңдең бере генә үҙгәрергә мөмкин. Унығында ла, дингә килеп. Ер шарында 52 йыл йәшәп, ғүмер буйы эсеп, аҙыптуҙып йөрөп, ғаиләһенә күрмәгәнде күрһәтеп, етмешенсе тиҫтәһен ваҡлай башлағас ҡына иманына ҡайтып үҙгәргән берике кешене генә беләм. Әммә уның "ҡорбан"дарының һаулығы юҡ инде. Беҙҙең күршелә яңғыҙ ғына Хөснә инәй йәшәне. Тышҡа сығып ултыра ла: "Эй-й, тау башына яҙын үлән сыҡмаһа, йәйен, көҙөн сыҡмай бит ул..."- ти ҙә ултырыр ине. Ошо йомаҡһүҙҙәр бала сағымда хәтергә һеңһә, хәҙер аҡылдың үҙе икәненә инандым... Уңмаған юлды ҡыумау хәйерле.

**Был тормоштоң, эштең, яҙмыш һынауҙарының, йәмғиәттең ауырлыҡ-мәшәҡәттәрен иңдә күтәргән ҡатын-ҡыҙ ижадсыларҙың нескә, хисле шиғырҙарын, яҙмаларын уҡып, тойғолар ҡапма-ҡаршылығынан баҙап ҡалаһың. Бына һеҙҙең ижадтан, мәҫәлән. Был ҡатын-ҡыҙҙың йәшәүгә булған көсөмө ул?**

**Айһылыу Ғарифуллина:** Былтағы бер миссия. Аллаһ беҙҙе һәм ендәрҙе үҙенә ғибәҙәт итер өсөн яралтҡан. Һәр кешенең төп миссияһы - ошо. Әсәй, хеҙмәткәр, ир ҡатыны, йәмәғәт эшмәкәре, яҙыусы, журналист булыу миссиялары - икенсе, өсөнсө һ.б. Бөгөн мин иң беренсел миссиямда хилафлыҡ булмаһын, тип тырышам. Ҡалғандары - Аллаһ ҡушҡанға, күңелгә биргәнгә, ваҡытҡа ҡарап.

**Таңһылыу Баһаутдинова:** Ни тиклем генә көслө булырға тырышһа ла, шулай булып маташһа ла, ҡатын-ҡыҙ асылында көсһөҙ генә зат бит ул. Күптәре сараһыҙҙан ғына көслө булып йөрөй. Ә ижадта алдашып булмай.

Мине тормошта уҫалыраҡ, талапсаныраҡ, тура әйтеп, туғанына ярамағаныраҡ (хәйер, юмор яратҡан итеп тә) кеше итеп беләләр. Шиғырҙарымда төптә йәшенеп ятҡан асылым - тормошта үҙенә ҡулланыу тапмаған ысынбарлығым асыла ла ҡуя. Уларға тыуырға шарттар булмағандыр инде. Күп ҡатын-ҡыҙҙар көслө битлек артына йәшеренеп кенә йөрөйҙөр ул. Иренә иркәләнеп, наҙланып ҡына, көсһөҙ генә булып йәшәргә теләмәгән ҡатын-ҡыҙ бармы икән ул... Был бит беҙгә Хоҙайҙан, тәбиғәттән бирелгән. Сөнки арҡаланыр арҡаң булмаһа, наҙланып ҡына донъя көтөп булмай - тапап китеүҙәре бар. Тешләргә тешең булмаһа ла, тешләнеп йәшәргә лә тура килеп ҡуя. Аңғарғанығыҙ барҙыр, эстән тешләнеп, һыр бирмәйем, тип йәшәгән кешеләрҙең күҙҙәре йылмайған саҡтарында ла һағышлы була. Ижад - үҙ-үҙеңә ҡайтыу, асылыңды асып һалыу бит ул...

*Көсһөҙ зат булып яралғас,*
*Көслө булыуҙар ауыр.*
*Көслөләргә тигән елдәр*
*Көсһөҙгә тотош дауыл,* - тиеберәк яҙған бер шиғырым да бар.

Йәнә:

*Аяуҙар юҡ йәнгә, таяуҙар юҡ,*
*Ҡаяуҙар күп... Арҡа сейләнгән...*
*Күңелемдә - балам,*
*йәндә - шиғыр,*
*Йәшәйешем шуға көйләнгән,* - тигәне лә бар...

**Әсәй кешенең балаһына йоғонтоһо шул тиклем көслө икәнен беләбеҙ. Ул балаһынан теләгән кешеһен үҙе әүәләй, уға һөйөүҙе лә, нәфрәтте лә теләгәненсә һала ала. Тимәк, бала тәрбиәләүсе әсә нимәләрҙе белергә тейеш?**

**Таңһылыу Баһаутдинова:** Юҡ, һәр баланан теләгән кешене әүәләп булмайҙыр ул. Әлбиттә, тәрбиәләргә мөмкин. Ләкин холҡоноң төп һыҙаттары уға Хоҙай тарафынан бирелмеш, гендар буйынса килә, минеңсә. Булыр бала бишектән, тигән әйтем дә юҡ ерҙә тыумағандыр.

Балаға йәшенә ҡарап тәрбиә алымдары үҙгәрә бара инде. Мин үҙем ҡыҙымды бәләкәй сағында ҡатыраҡ тоттом, шикелле. Грузиндарҙың бер әйтеме бар, тиҙәр бит: балаңды бәләкәй сағында үҙеңә дошман ит, ҙурайғас дуҫ булыр, әгәр бәләкәй сағында дуҫ итһәң, ҙурайғас дошман булыр. Был үтә әпәүләмә, ҡатыраҡ тот, тигәнгә ишаралыр, моғайын.

Ҡыҙым үҫә килә мин дә уның менән бергә үҫтем, үҙгәрҙем. Шөкөр, бөгөн беҙ бик яҡын әхирәттәр ҙә. Ҡыҙымдың тормош көткәндә үҙемдән аҡыллыраҡ, уңғаныраҡ, тырышыраҡ булыуына ҡыуанам.

Ҡыҙығыраҡ әсәй булғанмын икән, тип ҡуям хәҙер. Ҡыҙым бер мәл 11-се класта уҡығанында, юғары уҡыу йортона инә алмай ҡуйһам, ҡалайтам инде, тиеберәк шәмәреп ултыра. Мин тегегә: "Тапҡанһың ҡайғырыр нәмә, уҡыу ҙа булған икән бәхет. Ҡатын-ҡыҙ биш вуз бөтһә лә, янында йүнле ир булмаһа, тулы бәхетле була алмай. Күңеленең бер сите китек була барыбер. Сөнки Хоҙай әҙәм балаһын ишле итеп яралтҡан. Йүнлерәк тормош юлдашы һайла үҙеңә. Энә осона элеп алыр белеме булмаһа ла, ире арҡаһында ғына ла кеше булып йөрөгәндәр бар. Эшкинмәгән иргә тарып, бынамын тигән аҡылы, ғилеме булып та башын ҡалҡыта алмай ғүмер иткән ҡатын-ҡыҙҙар бар", - тинем.

Йәнә бер осраҡ хәтерҙә. Был бер шылтыратҡанында, уф, зачеттар ауыр, башты ла ҡалҡытып булмай, тигәнерәк хәбәр һалғайны, күп тә тормай, тегегә түбәндәге эстәлектәге "сообщение" китте:

*Ғүмерең үтеп китмәһен*
*Зачет хәстәрҙәрендә.*
*Айырым һөйөү бите юҡ*
*Ғүмер дәфтәрҙәрендә.*

Әсәй кеше, уҡы, ыштубы, башында егет-елән булмаһын, тиергә тейеш һымаҡ та бит... Бына шулайыраҡ шаяртыу-ишаралар аша "әүәләнем" ҡыҙымды. Шөкөр генә итәм Хоҙайыма былай.

**(Дауамы 11-се биттә).**

***✓ Ҡарағас осона яҡынырaҡ ботаҡта, ҡанаттарын һәлендерә, ҡеүәтле муйынын һона биреп, сал һаҡаллы һуйыр уйнай. Ул, гүйә, һағындырған яҙҙы ҡабаландырып, тыуып үҫкән Ирәндегенә дан йырлай.***





# ҺУНАРСЫ ЯҘМАЛАРЫ

*Иҙрис НОҒОМАНОВ*

## ДӘРТ

Шинә барған ҡар өҫтөнә һылап затлы гәлсәр түшәлгән тиерһең! Күҙҙәрҙе ҡамаштырып, ул әллә ҡайҙарҙан ялтырап ята. Уға һоҡланмайса ҡарау мөмкин түгел. Шул ҡәҙәре һушты алырҙай нимә һуң ул, тиерһегеҙ. Ул - көн үҙәгендә бер аҙ йылытып, төндәрен, киреһенсә, шаҡырайтҡансы туңдырыу һөҙөмтәһендә хасил булған йоҡа ғына боҙ шекәрәһе яҙғы ҡояш аҫтында нур сәсеп шулай уйнай. Мөғжизәнең бындайын тик февраль айы ахырында, марттың баштарында ғына күрергә була.

Әйтергә кәрәк, ҡарап тормаға хайран китерлек боҙлауыҡтың зыяны ла ярайһы ғына. Айырыуса ошо осорҙа ул көндән-көн ҡалыная, һәлмәкләнә бара һәм сибегерәк ағастарҙы ергә еткергәнсе бөгөп ҡуя. Ә бер эйелгән ағас ҡабат турайммай. Шатыр-шотор онталып ятҡан боҙ һунарсының да дуҫы түгел. Ул шыуған һайын саңғы табандарын "ашап" ҡына ҡалмай, ә һунарсы үлсәменән ҡот осҡос тауыш сығанағы ла. Бар тынлыҡты боҙған тауышты әллә ҡайҙан уҡ ишетеп алған һаҡҡолаҡ йәнлектәр яҡын-тирәнән көнэлгәре ҡасып бөтә. Хәйер, әлеге шаушыуҙы ярайһы ғына алыҫ аранан ишетер өсөн әллә ни һаҡҡолаҡ булыу ҙа кәрәкмәй. Ҡыҫҡаһы, боҙлауыҡ ваҡытында һунарың - һунар түгел. Урманда бары ваҡыт уҙғарыр өсөн генә йөрөп ҡайтаһың. Уның ҡарауы, әкиәти боҙ батшалығы оҙаҡ ваҡыт күҙ алдынан китмәй. Уны тағы бер барып күрер өсөн ашҡынып тораһың.

Бөгөн көн шөйлә йылы торҙо. Төшкөлөктә хатта епшекләнгән ҡар өҫтө саңғы табандарына йәбешеп йонсотто. Әле әкрен-әкрен генә кис яҡынлаша, ағастарҙан төшкән күләгәләр оҙайғандан-оҙая бара. Йыбау ҡояштың былай ҙа һаран йылыһы һүрәнләнә. Бая ирей биреп ҡуйған ҡар йәнә ҡата башлай, йәнә туңа. Ана шул рәүешле боҙ шекәрәһе барлыҡҡа килә лә инде. Иртәгә ул тағы ҡалыная төшәсәк. Шул йәш шекәрәне вата-емерә ҡайтыу яғына ыңғайланым.

Бер арала ҡолағыма ғәжәп таныш та, ифрат танһыҡ та тауыш салынып ҡалғандай. Көтөлмәгәнлектән хатта кинәт туҡталып ҡалдым. Барлыҡ иғтибарымды туплап, ҡолаҡ һалам. Һил урман шомло тынлыҡ менән яуап бирә: ахыры, яңылыш ҡына ишеттем. Ҡуҙғалып китәм тигәндә... Ғәжәп, тауыш йәнә ҡабатланды. Был юлы яңылыш түгел, асыҡ ишеттем. Йөрәк елкендергес тоноҡ шыҡылдауҙы башҡа бер ауаз менән дә бутарлыҡ түгел. Ул үҙенә күрә берҙән-бер генә! Әлеге ауаз-йырҙы йылдың тик иртә яҙ миҙгелендә генә ишетергә мөмкин. Униһында ла таң атып килгән, әле дөм-ҡараңғы мәлдә генә. Ул йырҙы бары йоҡоһона баш була алғандар ғына ишетә ала, ә ғәмһеҙ йоҡо сүлмәктәренә бәхеттең ундайы тәтемәй.

Үҙ ҡолаҡтарына үҙе ышанмаған кеше һымаҡ байтаҡ торҙом. Ҡапыл, бөтөнләй яҡында ғына... һуйыр йыры яңғыраны: "Тэ-ко... тэ-ко... тэ-ко..." Йә Хоҙа! Ысынлап та һуйыр уйнай ҙа баһаң! Февраль айында! Етмәһә, кис мәлендә! Бындайҙы мин һис көтмәгән дә, уйламаған да инем. Бәләкәй генә мөғжизәме был, әллә тәбиғәттең бер яңылышлығымы? Сихыр көсөнән ихтыярһыҙ ҡалған кешеләй шаҡ ҡатып торам. Ә һуйыр, ҡәҙимгесә, йырын оҙайлы шығырлау менән осланы ла, тынып ҡалды. Хәҙер ул тыңлап ултыра: хәтәр-хәүеф янамаймы, йәнәһе. Мин тауыш-тын сығармайым, уның тағы "йырлай" башлағанын көтәм. Һәм һуйыр оҙаҡ көттөрмәй: тэ-ка... тэ-ко... Йырҙың ошо өлөшөндә айырата һаҡ булыу кәрәк. Сөнки "йырсы" барыһын да яҡшы ишетә, күреп тә ултыра. Шылт иткән тауыш та уны һағайып ҡалырға мәжбүр итә. Яңылыштан ғына өҫтөнә баҫҡан ҡыу ботаҡтың сыртылдап һыныуы ла барлыҡ тырышлығыңды күҙ асып йомған арала юҡҡа сығарыуы мөмкин. Ә инде сәйер генә фырылдап алғандан аҙаҡ тоноҡ шығырлауға күскән мәлендә, киреһенсә, тулы һаңғырауға әйләнә, күреү һәләте ҡырҡа түбәнәйә. Ата һуйыр ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа, гүйә, трансҡа бирелә лә, аңы томаланып, бөтә донъяһын онота. Һунарсыға ошо секундтарҙы ҡулдан ысҡындырырға ярамай. Уға, үҙенең барлығын һиҙҙермәйсә генә, ҡабалан-ҡарһалан, ике-өс аҙым яһап өлгөрөргә кәрәк. Әммә ашығырға ярамай. Ашыҡтыңмы - эш харап. Ҡайсаҡ, хатта, һуйыр һунарсының тын алышын ишетә. Шуның өсөн кәрәк саҡта һулышты ла ала белеү һис ҡамасау итмәй.

Ошо өйрәтеүгә ябай ғына күренгән, әммә үтәүҙәре ифрат ҡатмарлы ҡағиҙәне иҫтән сығармай ғына тауыш килгән яҡҡа бара башланым. Әйтергә кәрәк, аяҡ аҫтында шағырлап ятҡан туң ҡар һунарсы тормошон икеләтә-өсләтә ҡатмарлаштырып ебәрә. "Тэ-ко... тэ-ко..." Мин баҫҡан урынымда ҡатып ҡалам. Эренән ике-өс аҙым яһайым, тағы шып туҡтайым. Дүртенсе аҙымға ҡыймайым - өлгөрмәй ҡалыуым бар. Шулай итеп, әкрен-әкрен генә, әммә ышаныслы рәүештә маҡсатыма яҡынлашам.

Өҙөк-йыртыҡ килә торғас, мөһабәт ҡарағастар араһындағы түңәрәк аҡланға килеп сыҡтым. Аҡландың ҡап уртаһында дәү ҡарағас тора. Уның осона яҡынырaҡ ботаҡта, ҡанаттарын һәлендерә, ҡеүәтле муйынын һона биреп, сал һаҡаллы һуйыр уйнай. Ҡойроғо үҙенең матур йәйелгән. Ул, гүйә, һағындырған яҙҙы ҡабаландырып, тыуып үҫкән Ирәндегенә дан йырлай. Әйтерһең дә, тышта йылы май айы тора! Һәр хәлдә, миңә лә шулай тойола башлай. Униһы ғына нимә, миндә кинәт ысын һунар ҡомары ҡалҡты: йөрәк тибешем йышайҙы, тамырҙарым буйлап ҡайнар ҡан йүгерҙе, тәнемде бөркөү эҫелек ялмап алды. Йырҙың икенсе быуыны башланыуға, үҙем дә һиҙмәҫтән (эйе-эйе, үҙ ихтыярымдан тыш!), мылтығымды ҡулыма алам, шулай уҡ йыр ыңғайына бер ни һиҙмәгән һуйырҙы төҙәгескә "ултыртам". Бармаҡ - тәтелә. Ара яҡын, яҙа атырлыҡ түгел. Хәҙер инде дәү ҡош - һәр һунарсының хыялы - лып итеп ергә килеп төшһөн өсөн бәләкәй генә бер хәрәкәт тә етә. Һуп бармаҡ хәрәкәте. Ошо уйҙан бөтөнләй онотола барған һымаҡмын. Тимәк, ҡанға артығы менән адреналин һибелә. Мин һуҙам. Мылтығымды тоҫҡаған килеш һуйырҙы күҙәтәм. Күрәһең, уның йырын оҙағыраҡ ишетеп ҡалғым, ләззәтле минуттарҙы оҙаҡҡараҡ һуҙаһым килә. Ваҡыт үтеү менән тулҡынланыу тигән һатлыҡ тойғо тышҡа бәреп сыға...

Беҙҙең замандарға миллион йылдар төпкөлөнән килеп еткән дәртле лә, серле лә, шул уҡ ваҡытта сәйерерәк тә йыр йәнгә илһам өҫтәй, күңелдәрҙе күтәреп, булмышты ярһыта. Ҡарт һуйыр уйнауына ҡушылып, хис-тойғолар урғыла ғына!.. Юҡ, күпме генә тырышһам да, тәтегә баҫа алманым. Выждан ҡушманымы, намыҫым тыйҙымы, әйтә алмайым. Бәлки, хуш күңелләнеп киткән йөрәгем ҡаршылашҡандыр. Ә иң дөрөҫөн әйткәндә - йәлләнем. Яҙҙы әйҙәп уйнаған дәртле ҡарт һуйырҙың йәнен мәленән алда ҡыяһым килмәне шикелле. Үлем төкөрөргә әҙер мылтығымды әкрен генә кире төшөрөүгә, ғәжәп еңеллек тойғоһо кисерҙем.

Йәлләйһең икән, һунарға йөрөмә, ти һунар ҡануны. Мин бөгөн ошо ҡанунды боҙҙом. Мин бешмәгән һунарсы! Ләкин... Бешмәгәнлегемдең икенсе яғы ла бар. Май айының күҙгә төртһәң күренмәҫ ҡараңғы төндәрендә, айыу апай өңөнән сығып, аслыҡҡа түҙә алмайынса ауға тотоноп темеҫкенгән хәүеф тулы осорҙа һунар итеү - бер, ә көпә-көндөҙ күҙ алдында илһамланып ултырған ғәмһеҙ ҡошҡа ышыҡ урындан мылтыҡ күтәреүе - бөтөнләй икенсе эш икән. Мин үҙемде ғәҙел булмаған уйын уйнаған кеүек тойҙом. Мин үҙемде үҙем еңә алманым. Шулай булмай һуң: мин уны күреп торам, ә ул - юҡ. Ошо буламы ғәҙеллек? Төнөн бит икебеҙ бер хәлдә. Ҡараңғыла барыһын да һиҙгерлек, уяулыҡ, ҡайсағын хатта тойомлау менән тоҫмал хәл итә. Ә былай, ысынлап та, ғәҙел түгел. Юҡ, түгел...

Ҡарт һуйырҙың хәйләһеҙ уйынын өҙмәҫкә була, килгәндәге ысул менән кире киттем. Алыҫлаша барған һайын туҡталып тыңлап торам. Бер ни аңғармаған ҡош әле генә янаған үлем ҡурҡынысын һиҙмәне, элеккегә ҡарағанда ла дәртләнеберәк йырлауын белде. Мин күңелемдән генә уның менән хушлаштым. "Хуш, урман баһадиры! Әлегә... Хозур мәлдәр етеп, нәҫеләнде ҡалдырғандан һуң был тирәләргә йәнә килеп урармын әле. Ул сағында инде абай бул, ҡартлас! Донъяңды онотма! Шуға күрә, әлегә хуш!"

## МАНЬЯК

Күп йылдар ағышында ҡанға һеңешкән ғәҙәт буйынса кәнсәләргә мин иртә йөрөйөм. Бына бөгөн дә иң алдан килгәнмен. Ишектә уҫлаптай йоҙаҡ элеүле тора, тимәк, эш көнө әлегә тик минең өсөн генә башланған...

Беҙҙең кәнсә түбәһе тулҡынлы ҡалай менән ябылған. Һәр тулҡындың аҫтында тиерлек турғай ояһы. Бында турғайҙар батшалығы. Бәләкәй ҡошсоҡтар умартаһынан яңы сыҡҡан бал ҡорттары ише мыжғып тора. Шул ҡәҙәре күптәр. Илаһи миҙгел, донъя хозурлығына ҡыуанышып, сыр-сыу киләләр. Иғтибарлап ҡараһаң, улар ҙа үҙҙәренсә матур ғыналар икән. Ҡайһыһылыр сырҡ-сырҡ иткән булып тормош ишен эҙләһә, икенселәре, бар донъяларын онотоп, торлаҡ төҙөү менән мәшғүлдәр. Ә өсөнсөләре, һөмһөҙлөк менән йәшәп өйрәнгәндәре, зыҡ ҡубып әҙер ояөсөн низағлаша. Ундайҙар турғай заты араһында ла була икән.

Эскәмйә янында аунашып ятҡан турғай кәүҙәләренә иғтибар иттем. Икәүҙәр. Үҙҙәренең бер урындары ла зарарланмаған һымаҡ, яралары ла күренмәй, ә йәндәре юҡ. Ни сәбәптән һәләк булғандарҙыр, кем белә. Күрәһең, араларында берәй яман сир таралғандыр. Йыртҡысфәлән тәләфләһә, мәҫәлән, бесәй, бында ятҡырып ҡалдырмаҫ ине. Ауыр ҡышты үткәреп тә, йәшәйеш буйтым еңеләйергә торғанда былай ҙа ҡыҫҡа ғүмерҙәре мәлһеҙ өҙөлгән ҡошсоҡтар йәл булып китте.

Фәлсәфәүи хистәргә бирелеп ултырғанымда баш осомдан, фырылдап, һоро йомғаҡ кәйелеп үтте. Үтте лә туң ергә туп итеп барып төштө. Йомғаҡ тигәнем ике турғай ине. Бер-береһенә сат йәбешкәндәр ҙә улар, тауыш-тынһыҙ ғына ҡыйнашалар, боҙ өҫтөндә тәгәрәшеп йөрөйҙәр. Мин ҡыҙыҡһынып күҙәтәм. Моғайын, оя өсөн талашаларҙыр. Сәйер алыш оҙаҡҡа барманы, ҡошсоҡтарҙың береһе ҡанаттарын хәлһеҙ йәйҙе лә, салҡан һуҙылып төштө. Еңеүсе тураһында: "Нәҡ көрәшселәр кеүек икән, тәки арҡаһына һалды бит, ә", - тип уйлап йылмайып ҡуйҙым. Шулай ҙа ни эшләп еңеүсе дәғүәсеһенең муйынынан алған да һаман ебәрмәй? Былай эштең олоға китеүе бар.

Урынымдан ҡалҡынып, тегеләр яғына атланым. "Еңеүсе" осоп китте лә, түбәгә ҡунып, тантаналы сырҡылдарға тотонло, ә еңелеүсе хәрәкәтһеҙ ятып ҡалды. Уны һаҡ ҡына ҡулыма алдым. Кескәй генә йылы йомғаҡ-кәүҙә... йәнһеҙ ине. Мин шаҡ ҡаттым. Тора биргәс, башыма барып етте: турғайҙарҙың баяғы икәүһе лә, күрәһең, ошо рәүешле һәләк булған. Тимәк, турғайҙар араһында ла үлтереүселәре була! Турғай маньягы! Кем уйлаған инде, йә. Үҙ күҙҙәрем менән күрмәһәм, кеше әйткәнгә ғүмерҙә ышанмаҫ инем. Ҡайҙан белеп алған да, нисек өйрәнгән буҙ турғай әлеге яман эшкә? Үҙ ишенде ниндәйҙер оя хаҡына быуып үлтерсе әле! Бәғзе бер йыртҡыс затты хәтерләтмәйме һуң уның ҡылығы? Был турғайҙың нәҫеле нисегерәк булыр? Мәгәр аталарына оҡшап яралһалар... Ул сағында бөтә буҙ турғайҙар ҙа йыртҡысҡа әйләнеп бөтмәҫ тимә. Ә артабан, беренбере быуа торғас, турғай заты тамырынан ҡоромаҫ тип кем әйтә ала. Һорауҙар күп, яуап юҡ. Аптыратты турғай. "Ә үҙең һуң, үҙең, әҙәм балаһы, - тип уйланым аҙаҡ, - ошо мөртәт турғай һымаҡтарың әҙме араңда? Турғай, ярай, аҡылһыҙ, ә әҙәм..."

## "БЫУАР ЙЫЛАН"

Ауылыбыҙҙан бер апай бесән сабып йөрөгәнендә ҡаршыһына ғәләмәт ҙур йылан килеп сыҡҡан, имеш. Апай, ҡурҡышынан, хатта һушы китеп йығылған, ти. Был турала хәҙер бөтә ауыл һөйләй. Гөрләп тора ауыл. Шулай булмай: Ирәндек һынлы Ирәндек буйҙарында әкиәттәрҙә генә була торған быуар йылан үҙе йөрөп ятһын әле! Шауламаҫ ерҙән шауларһың. Баштараҡ ҡолас буйлыҡ, беләк йыуанлыҡ һөйрәлеүсе тора-бара, аҙ түгел, күп тә түгел, баҫырау оҙонлоҡ, тумрау йыуанлыҡ булып китте. Торғаны менән аждаһа инде.

Апайҙың сабынлығына күрше генә бер бабай бесән эшләй. Шуға киттем: теге һүҙҙәрҙең айышына төшөнөп ҡуйыу кәрәк. Хәл-әхүәл һорашҡандан һуң һөйләшеүҙе, ипләп кенә, әлеге "аждаһа" затына күсерәм.

- Юлдары күренгеләй, былай, бер нәмәнең, - тине ул күҙҙәрен ҡыҫа биреп, - үләнде йырғыслап, йоморо һукмаҡ һалып бөткән. Ниндәйерәк йәнлек икәнен әйтә алмайым, эҙҙәрҙең ундайын ошоғаса күргәнем юҡ, - тине ул.

Уның ише йоморо һуҡмаҡтарҙы үҙем дә күргәнем бар шикелле, мәгәр шул булһа: күңелемә шунда уҡ шик төштө. Күрәнле, еркә үләнле Һаҡмар туғайҙарында йыш осрай ундайҙар. Уларҙы кем һалғанлығын да яҡынса һиҙемләйем.

✓ *Мөхәббәттән бикәр үҙ-ара ихтирам булырға тейештер, тип уйлайым. Мәҫәлән, ир кеше ғаиләһе, балалары, ҡатыны өсөн өҙөлөп тора, уларҙы етеш йәшәтергә тырыша икән, ҡатыны уны ихтирам итәсәк, яратасаҡ.*



Һунар миҙгеле асылыуға әле иртәрәк, шулай ҙа мылтығымды алдым: ниҙәр булмай был ғәжәйеп һәм сер тулы донъяла. Барыбер икеләндерә. Бына мин апайҙың ҡот осҡос йылан менән күҙгә-күҙ осрашҡан сабынында. Ҡарағайһаҙ тип аталған үҙе ҡараңғы, үҙе хәтәр шомло урында ул. Ҡарағайһаҙҙың көртмәлеһе һәләк күп, ә болот ише ҡайнашып, мыжғып торған эре, ерән серәкәйҙәре унан да күберәк. Өҫтә ҡалын мүк ҡатламы менән генә ҡапланғангамы, баҫҡан һайын мөлкөп яткан һаҙға барып инденме, ҡапыл ҡуҙғып киткән ҡанәскестәрҙән тын алыр әмәл юҡ. Шуғамылыр, әллә күңелдәргә шом һалған айыу эҙҙәре йыш ҡына күренгеләп ҡалғанғамы, был тирәгә кеше аҙ йөрөй. Дөрөҫөрәге, мажара көҫәгән һунарсылар ғына һирәк-һаяҡ килеп сыҡҡылай.

Бына, сама менән бесәнсе апайҙың "һушһыҙ йығылған" урыны. Шишмә ситендә монайып торған иҫке ҡыуыш янында. Ялбыр ҡарт ҡайынлыҡ эсендәге сабылмай ҡалған шыйыҡ үләндәр, ҡаты-ҡото ҡурайҙан башҡаһы, һәлмәк баштарын эйеп йығыла ла башлаған. Тимәк, йәй ахыры яҡынлаша. Ошо уйҙан, нисектер, күңел болоҡһоп китә.

Әлеге үләнлек араһында, бабай әйткәнсә, йышылып бөткән һуҡмаҡтар айырым-асыҡ күренә. Уларҙы тәжрибәһеҙ һунарсы ла шунда уҡ шәйләп алыр ине, әммә кем һалғанлығын ҡапыл ғына әйтә алмаҫ ине. Ә мин инде белдем. Тынысланып, мылтығымды ағасҡа һөйәнем. Үҙем дә, ныҡ ҡына талсығып өлгөргән аяҡтарыма ял бирмәккә, шул ҡайынға арҡамды терәп ултырҙым.

Сәйер һуҡмаҡтарҙың иң олоһо, иң тапалғаны минән биш-алты аҙымда ғына ятә. Тегеләй-былай тармаҡланып бара торғас, ул һаҙлыҡ араһына таралып бөтөнләй юҡҡа сыға. Ә башы сафтансаф шишмәгә барып төртөлә. Кемдер, бесәнселәрҙең һыу юлы лабаһа был, тиер, ләкин мин улай тип әйтергә ашыҡмаҫ инем. Сөнки...

Уйҙарға бирелеп оҙаҡ ултырырға тура килмәне, күҙ ҡырыма ғына ниндәйҙер хәрәкәт салынып ҡалды. Башымды, ғәҙәт буйынса, бик әкрен генә, һаҡлыҡ менән шул яҡҡа борам. Селтерәп яткан шишмә эсенән, теҙелешеп, шөшкеләр сығып килә. Сыҡҡан бере һөҙәк яр ситендә ҡағынып йығырлаша. Шөшкенең быйылғы балалары инде әсәләре дәүмәллек булып та киләләр икән. Шәп үҫәләр. Уларҙың эйәк аҫтындағы аҡ таптары барыһыныҡы ла бер иш, әйтерһең дә, кемдер тамға һалып сыҡҡан. Юғалып ҡуймаһындар өсөн.

Бына ҙурлығы менән айырылып торған инә шөшке сәйер "мығырлап" ҡуйҙы ла, таҡыр һуҡмаҡтан ырғандап китте. Шаян, сос көсөктәре уға эйәрҙе. Бер, ике, өс... улар етәү ине. Күптәр икән! Шулай ҙа мине иң ныҡ ғәжәпләндергәне икенсе: шөшке балаһының алда барғаны әсәләренең ҡойроҡ осонан тешләп алған, унан икенсеһе, өсөнсөһө. Барыһы ла шул рәүешле бер-береһенең ҡойроғона "йәбешкән". Ҡыҙыҡ инде. Ситтән ҡарағанда, ысынлап та, бер бөтөн йән эйәһе китеп барған һымаҡ! Шыма тиреләре йылҡылдашып торған кейектәрҙең көмөрө арҡалары, һикергән һайын, үлән араһынан алмаштилмәш күренеп ҡала. Бына лабаһаң теге "быуар йылан"! Оҙонлоғо ла, йыуанлығы ла уны "күргән кешеләр" әйткәнгә тап килеп тора. Уны осратып, үтә шөбһәләнеүсе яңғыҙ апай кешенең генә түгел, ҡуш йөрәкле теләһә ниндәй ағайындың да ҡото алыныр.

Ә шөшкеләр сылбыры, хәрәкәтһеҙ ултырғанлыҡтан, мине шәйләмәйсә, эргәмдән үтеп китте. Аҡыллы әсә, әле аңрараҡ, оҙон үлән араһында юғалыу ихтималы булған шул бөрөй ҡолонлоғон һаҡлап, шул һыналған ысынлыҡ, йоласы һыулы бала йөрөй-йөрөй бисмәгән сабыйҙарын, аҙашып ҡуймаһындар, тип, шул һыналған ышаныслы ысул менән алып китеп бара.

(Дауамы. Башы 24-се һанда).

*ҠАТЫН-ҠЫҘҘЫҢ ҠЫРҠ СЫРАҒЫ*

# БӨРЙӘНДӘРҘЕҢ... АЙҺЫЛЫУЫ ҮӘ ТАҢҺЫЛЫУЫ

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

**Айһылыу Ғарифуллина:** Мин балаларымды, нигеҙҙә, үҙемдә нисек тәрбиәләгәндәр, шулай тәрбиәләргә тырыштым. Атай-әсәйем беҙгә дини ғилемде һала алманы (заманы шулай булды), ошоно үҙемдекеләргә һалырға тырыштым. Шөкөр, ике баламдан да бик ризамын.

Ҡыҙыма ла, улыма ла гел шуны туҡыным: " Әсәй - һеҙҙең Ер шарындағы иң яҡын кешегеҙ. Минән бер серегеҙҙе йәшермәгеҙ. Тотош Ер шарында һеҙ минән башҡа берүгә лә кәрәк түгел. Һеҙҙең аһ-зарҙы ла, проблема-фәләнде лә, шатлыҡ-ҡыуанысты ла иң беренсе сиратта мин белергә тейеш. Бер генә атай-әсәй ҙә, әгәр аҡылы камил булһа, балаһына боҙоҡлоҡ, яманлыҡ теләмәй. Алдашмағыҙ, эш боҙһағыҙ ҙа, йәшермәй әйтегеҙ", - тинем. Йөҙ проценты менән быны, бәлки, үтәмәгәндәрҙер, әммә мин ҡыҙыма ла, улыма ла иптәш, серҙәш, кәңәшсе була алдым, тип уйлайым. Улар менән ғаилә проблемаларын да, башҡа хәл-әхүәлдәрҙе лә уртаға һалып һөйләштек, әле лә шулай.

Мин журналист кеше, билдәле, командировкаларға йыш йөрөйөм. Бер мәл эштән ҡайтып барһам, ҡыҙым менән улым ҡаршы сығып килә: "Әсәй, беҙ шундай-шундай эш боҙҙоҡ", - тиҙәр. Алдан алдашмай, дөрөҫөн әйтһәгеҙ, тукмаҡ эләкмәй, алдашһағыҙ, жарылаһығыҙ, тип өйрәткәс, күп ғәйептәрен кисерергә тура килде.

Балаларҙың күңеленә иман орлоғо сәсеү - иң отошло тәрбиә. Иманлы кеше тормоштоң ниндәй һынауҙарында ла һынмаясаҡ, үҙенә ҡул һалмаясаҡ, ахыр сиктән сыҡмаясаҡ. Үҙҙәренә гел хәҙистә шулай тиелгән, былай тиелгән, тигәс, бәғзе саҡ үҙем сабырһыҙланып китһәм, балалар мине тыйып ҡуя. Бына әле пандемия осоронда күп һанлы мәғлүмәт ишетеп, күңел төшөп китһә, улым мине тынысландыра: "Һуң, әсәй, үҙең әйттең бит тәҡдирҙән уҙып булмай, маңлайға яҙғанды барыбер күрәһең, ошо сир һиңә яҙылған булһа, ул ҡайҙа ҡасһаң да һине килеп табасаҡ, яҙылмаған булһа, йоҡмаясаҡ, тип", - ти.

**Беҙҙең халыҡта мөхәббәт культы юғары күтәрелгән, фольклорҙа, ауыҙ-тел ижадында һөйөү иң үҙәктә тора. Ә ғаилә ҡорғанда был йөрәк тойғоһон әллә ни алға ҡуймағандар һымаҡ. Асылда, ғаиләлә иң мөһиме мөхәббәтме, әллә ул улай уҡ мөһим түгелме?**

**Айһылыу Ғарифуллина:** Беҙҙең башҡорттоң мөхәббәте теләндә түгел бит ул, йөрәгендә. Динебеҙ иң юғары һөйөү - ихтирам, тип өйрәтә. Мөхәббәт - килер-китер нәмә. Ихтирамхолоҡ, ул ҡала. Ҡосаҡлашып-үпәстәшеп кенә донъя көтөп булмай. Башҡорт дөрөҫ эшләгән генә ғаилә ҡорғанда йөрәк тойғоһон алға ҡуймай. Аҡыл алдан, асыу арттан йөрөһөн, тигәндәй, аҡыл алдан, хис-тойғо арттанураҡ йөрөһөн ул, барыбер.

**Таңһылыу Баһаутдинова:** Был һорауға бер төрлө генә яуап биреүе ҡыйын. Дөрөҫөрәге, мәңге иләҫ-миләҫ йөрөгән шиғри күңелле кешеләр быға дөрөҫ кенә яуап бирә аламы икән инде ул... Ләкин йән һөйгән, күңелең тартылып торған кеше менән йәшәү барыбер ҙә яҡшыраҡтыр. Шыпа йәнең тартмаған кеше менән йәшәү яза бит ул. Әлбиттә, ғаилә ҡорорға теләгән йәштәр ололарҙың фекеренә лә ҡолаҡ һалырға тейештер. Уларҙа - тәжрибә, аҡыл. Һәм ситтән яҡшыраҡ күренә тигәне лә бар.

Мөхәббәттән бикәр үҙ-ара ихтирам булырға тейештер, тип уйлайым. Мәҫәлән, ир кеше ғаиләһе, балалары, ҡатыны өсөн өҙөлөп тора, уларҙы етеш йәшәтергә тырыша икән, ҡатыны уны ихтирам итәсәк, яратасаҡ. Ә "үлеп яратам" тип барып та, тормош юлдашын итеп һайлаған кешең эскегә әүәҫ, тормош көтөүгә ялҡау икән, ниндәй мөхәббәт ҡалһын инде?..

**Ни өсөн кешелек әленән-әле бәләләргә, ауырыуҙарға, һуғыштарға дусар була? Һеҙ нисек аңлатырһығыҙ?**

**Таңһылыу Баһаутдинова:** Әҙәм балаһы хаттин аша башланы бит. Үтә байҙар өсөн донъяның ҡыҙығы бөтөп, аптырағас, аҡсаларын ҡайҙа ҡуйырға белмәй, алтын бәҙрәфтәрҙә хәжәт үтәй башланылар. Шул уҡ ваҡытта күпме өйһөҙ ҡаңғырған йәштәр, ауыр сир менән яфаланған балалар, ҡартлығында аҡса еткерә алмай ҡаңғырған ололар...

Ә ни өсөн башҡалар ҙа яза күрәме? Уларҙы тыймаған, уларға быны аңлатмаған өсөн. Һуғыштар, нигеҙҙә, айырым кешеләрҙең ҡара эслелегенә, нәфсеһенә, байлыҡ көҫәүенә бәйле килеп сыға. Бәлә-ҡазалар, сирҙәр - Хоҙай тарафынан ебәрелгән һынау, минеңсә. Һынауҙы һынмай үтәбеҙмеюҡмы - үҙебеҙҙән тора.

**Айһылыу Ғарифуллина:** Былар барыһы ла - Аллаһтың һынауы, яҙаһы. Ҡөрьән Кәримдең " Шура" ("Кәңәш") сүрәһенең 30-сы аяты - ошоға яуап: " Башығыҙға төшкән һәр бәлә - үҙегеҙҙең ҡылғандарығыҙ өсөн. Шуға ла ҡарамаҫтан, (тәүбәгә килгәндәрҙең) күбеһен Аллаһ ярлыҡаясаҡ". Бында Аллаһ беҙгә бик һәйбәт аңлата: беҙҙең башыбыҙға төшкән һәр бәлә, ауырыу, юғалтыуҙар, балаларыбыҙ ҡайғыһы, ҡыҫҡаһы, үҙебеҙ ятҡан, беҙгә ҡөҙерле һәр нәмәнең китеүе - беҙҙең үҙ ҡулдарыбыҙ менән ҡылған гонаһтар өсөн яза. Тәүбәгә киләйек, ғәфү, ярлыҡау һорайыҡ, доға ҡылайыҡ, Аллаһтың тыйғандарынан тыйылып, бойорғандарын үтәп йәшәйек, ин шаа Аллаһ, ҡотолоу килер...

**Һеҙ икегеҙ ҙә - башҡорт блогерҙары, интернет аша үҙ фекерегеҙҙе, әйтер һүҙҙәрегеҙҙе еткерә алған, күптәрҙе яҙғандарығыҙға ҡолаҡ һалырға мәжбүр итә, әүрәтә алған шәхестәрһегеҙ. Бына ошондай һүҙ көсөнә эйә булғандарға интернеттан ниміләрҙе һөйләргә була, ә нимәләрҙе ярамай, тип уйлайһығыҙ? Был системала ниндәйҙер тәрбиәүи алымдар, дөрөҫ ағым булырға, контролдә тотолорға тейешме? Мәҫәлән, һеҙҙең маҡсатығыҙ ниндәй?**

**Айһылыу Ғарифуллина:** Мин барыбер ҡабырсаҡта йәшәйем. Башҡа килгән нәмәне әйтеүҙән, оло донъяға сығарыуҙан һаман да тыйылам. Беренсенән, һәр һүҙемде динебеҙ ҡалыбына, унан күңелем бизмәненә, намыҫ, әҙәп-әхлаҡ үлсәүенә һалырға тырышам. Һүҙгә, уны әйтмәҫтән алда, һин хужа, ауыҙыңдан сыҡтымы - ул һиңә хужа. Һүҙ менән кешене үлтереп тә, терелтеп тә була. Ошо көстө насар, кемдәлер, ниҙелер юҡ итеү маҡсатында ҡулланыу - үҙе гонаһ. Һәр һүҙ өсөн уҡыусың алдында ғына түгел, Аллаһ алдында яуап бирер кәрәк бит әле. Бына быныһы - хәтәр.

**Таңһылыу Баһаутдинова:** Әҙәм балаһы камиллашыуҙан туҡтарға тейеш түгел. Беҙҙә, ғәҙәттә, кешенең мең яҡшылығын онотоп, бер ғәйебен башы аша ҡаплау ғәҙәте бар. Улайтып кешене тәрбиәләп булмай. Абсолют насар йәки абсолют яҡшы кешеләр булмай бит ул. Һәр кемдең дә кешегә оҡшап етмәгән яҡтары булырға мөмкин. Кеше теге йәки был ситуацияла насар йәки яҡшы ҡылығын күрһәтеп алырға мөмкин. Кешенең бәләкәй генә тырышлығын йәки ынтылышын, яҡшы ғәмәлен күреп, шуны күтәрмәләп ебәрһәң, унда үҙенә ышаныс уяна, ул изгелеккә изгелек менән яуап бирергә тырышасаҡ, минеңсә. Шуларҙы ишаралап ҡына уй төйөндәре аша бирергә тырышабыҙ. Юҡ, абсолют аҡыллы, ғилемле йәки шәп булған өсөн түгел. Мин, мәҫәлән, күңелем ҡушҡанға һәм үҙемдән әйләнәмдәге донъяны әҙләп кенә булһа ла яҡшыраҡҡа, яҡтыраҡҡа йүнәлтергә теләгән өсөн, бер генә кеше булһа ла фәһем алһын өсөн яҙам ул яҙмаларҙы.

Ә интернетта нимә һөйләргә, нимә һөйләмәҫкә тигәндәй, ошо хакта уйлап тормаусыларҙың күбәйеүе һиҫкәндерә. Фейк исем аҫтында кеҫә эсенән йөҙроҡ күрһәтеүселәр артты... Мулла ҡатаһыҙ, бәндә хатаһыҙ булмай, тигәндәй, барыбыҙ ҙа хаталана, яңылыша. Ләкин тәүбәгә килеү, ул хаталарҙы ҡабатламаҫҡа тырышыу - үҙе үк ҙур енеү. Ғәйепте эҙләһәң, һәр кешенән табып була.

Был яҙмаларым аша бәхетте, тормош мәғәнәһенән ябай ғына нәмәләрҙә лә табырға мөмкин икәнлеген аңлатыу - маҡсатым. Бәхет бит бер өймәләм ҙур тау түгел, йәки бер көн бәхеткә барып етеп, булды, килеп еттем, тип һоноп ултырып булмай. Ул айырым-айырым бәләкәй генә шатлыҡ-ҡыуаныстарҙан тора. Шулар арта барған һайын, күңелең дә байый, донъяң да теүәлләнә.

Быларҙы аңлауға тиклем мине Хоҙай ауыр һәм ҙур һынауҙар аша үткәрҙе. 30 йәшемдә генә ҡаты сиргә тарыным. Бер мәл бөтөнләй ятып киттем. Минең донъям бер бөртөк тәҙрәгә һәм телевизорға ғына ҡарап ҡалды. Әсәйем килеп тәрбиәләй башланы. Ул йөшереп кенә тышта илап инә ине. Күҙҙәре һатты... Күп уйландым. Шул мәлдә тормошомда һынылыш булды. Бер көндө әсәйем менән сәхәр эсеп, ураҙа тотоҡ һәм мин "Ихлас" сүрәһен мең тапҡыр әйтеп, теләгәнемде һорарға ниәт ҡылдым. Төшкә әйтеп бөттөм һәм Өфөләге ҙур урында эшләгән бер таныш апайға шылтыраттым. Ул мине бик яҡшы дауаханаға урынлаштырҙы. Шөкөр, аяғымда ҡайттым. Шунан тормошом үҙгәрҙе. Быға тиклем, аҡылды мисәү итеберәк, хистәр донъяһындараҡ йәшәп, донъяға алһыу күҙлек ашараҡ ҡарап йөрөһәм, бынан ары аҡылды төпкә егә башланым... Йәйләп намаҙға баҫтым. Әлбиттә, сәләмәтлек өсөн көрәшем 30 йәшемдән алып бер көнгә лә туҡтағаны юҡ. Ләкин уның ҡарауы мин тәрәмә килеп һарылған ямғыр тамсыһына ла, сабыйҙың әсәһен ҡосоп йылмайыуына ла, сит кеше бәхетенә лә ҡыуанырға өйрәндем... Үҙ-үҙемде яҡшыраҡ яҡҡа үҙгәртеү, камиллашыу юлындамын.

Дуҫың кем икәнен әйт, мин һинең кемлегеңдә әйтермен, тиҙәр. Рухташым, әхирәтем, хеҙмәттәшем Айһылыу менән бер коллективта, бер бүлмәлә ултырып эшләүҙе лә Хоҙай тарафынан бирелгән бүләк, тип ҡабул итәм. Бушҡа ғына эшләмәгән быны Хоҙай, тип уйлайым. Иң ҡыйын мәлдәрҙә бер-беребеҙгә терәк булырға тырышабыҙ. Әлбиттә, быға ла һынауҙар аша килдек. Тимәк, тормош дауам итә...

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# СӨГӨЛДӨР ЙӘШӘРТӘ

■ Баҡсаһында йыл һайын сөгөлдөр үҫтереүселәр ҙә был культураның файҙаһын белеп бөтмәй икән. Ғалимдар раҫлауынса, сөгөлдөр организмдың ҡартайыу процесын туктата тиерлек. Унда антиоксиданттар күп. Сөгөлдәрҙәге кеүек файҙалы элементтар алмала ла бар икәне асыҡланған. Әммә сөгөлдәрҙә барыбер ҙә организмға кәрәкле матдәләр күберәк.

■ "Әсәһенең улы", "атаһының ҡыҙы" тигәнде йыш ишеткәнебеҙ бар. Шуға ла ғалимдар бала кемдең генын күберәк үҙләштереүен асыҡларға булған. Беҙ барыбыҙ ҙа гендарҙы атайҙан да, әсәйҙән дә тигеҙ күләмдә алабыҙ, әммә атайҙың ДНК-ларын күберәк ҡулланабыҙ, имеш. Әгәр ҙә "сәләмәт булмаған" ген әсәйҙән күсә икән, ул үҙен әүҙем рәүештә күрһәтмәүе лә ихтимал. Ә бына атай яғынан күскән төрлө сирҙәр өҫкә ҡалҡып сығыуы бар.

■ Артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусы үҫмерҙәргә D витамины ҡабул итеү файҙалы түгел, был йөрәк сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто ла яһамай, диабет хәүефен дә түбәнәйтмәй. Етмәһә, был холестерин артыуына килтереүе лә бар, ти эндокринологтар. Өҫтәмә рәүештә D витамины ҡабул итеүсе балаларҙы 10 йыл тикшергәндән һуң, ғалимдар был үҫмерҙәрҙең тән массаһында, тән массаһының индексында, ҡан баҫымында йәки ҡан әйләнешендә бер үҙгәрештәр ҙә күҙәтелмәгәнлеген асыҡлаған. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе билдәләүенсә, был D витамины дефициты һәм балаларҙың хроник сирҙәре араһында бәйләнеш булмауы тураһында һөйләмәй. "D витамины ҡабул итеү кәрәкмәй, тип тә әйтмәйбеҙ, һимеҙ балаларҙың ҡайһы берҙәре был витаминға ҡытлыҡ кисерә. Беҙ бары тик D витамины ҡабул иткәндән үҫмерҙәрҙең дөйөм сәләмәтлеге яҡшырыуы тураһында дәлилдәр юҡлығын ғына белдерәбеҙ", ти ғалимдар.

■ Ғалимдар иң хәүефле ауырыуҙар исемлеген төҙөгән. Беренсе урында Альцгеймер ауырыуы тора. Ул нервы системаһының етди тайпылышы менән бәйле. Белгестәр Альцгеймер ауырыуы менән сирләүселәрҙе ҡараусыларҙың сәләмәтлеген тикшергәндән һуң, ҡайһы бер осраҡтарҙа уның сиптомдары уларға ла күсеүен асыҡлаған. Был кешеләрҙең араһында депрессия, стреcка бирешеп барыусылар күп булыуы ла билдәләнгән.

■ "Өкө"ләр, йәғни әүҙемлеге төнгә сәғәттәргә тура килгән кешеләр йышыраҡ һимерә. Быға уларҙың төнөн ашауы ғына сәбәпсе түгел. Тикшеренеү барышында ғалимдар 3300 бала һәм өлкән кешенең сәләмәтлеге торошон күҙәткән. 1 сәғәт йоҡоһон юғалтҡан үҫмер тән массаһы индексына 2,1 берәмек өҫтәгән. Экспертттар билдәләүенсә, йоҡлау өсөн идеаль ваҡыт киске 9-ҙан башланып, төнө буйы дауам итә. Шуға ла "өкө"ләргә лә ошо режимға яраҡлашырға тырышырға кәрәк.

■ Йель университеты (АҠШ) ғалимдары асыҡлауынса, медитация психик ауырыуҙарҙы, шул иҫәптән шизофрения һәм аутизмды профиклактикалау өсөн иң яҡшы сара булып тора. Невролог Джадсон Брюэр медитация ваҡытында баш мейеһе ҡабығы әүҙемлеген тикшергән һәм ошондай һығымтаға килгән. Оҙайлы ваҡыт медитация менән шөғөлләнеүселәр сит йоғонтоға бирелеп бармай, улар уҙҙәренең хәлен дөрөҫ баһалай ала. Шизофрения һәм аутизм менән яфаланыусы пациенттарға уҙҙәре тураһындағы уйҙар тынғы бирмәһә, медитация бындай уйҙарҙы ситкә ҡыуып, күберәк әлеге ваҡытта тирә-яҡта барған ваҡиғаларға йүнәлтергә мөмкинлек бирә.

ЙОЛА СЦЕНАРИЙЫ

# ЯУЫН БУТҠАҺЫ ЙЫЙЫНЫ

*Бер төркөм ҡатын-ҡыҙҙар, балаға баҡсала утау эше менән мәшғүл.*

- Ҡайһылай эҫе.
- Шулай шул, күптәнән бирле ямғыры ла юҡ бит.
- Булмаһа, күләгәгә ултырып ял итеп алайыҡ.
- Әйҙәгеҙ, әйҙәгеҙ!

**Өләсәй:** Элек ошондай эҫе, ҡоро көндәрҙә беҙ йылға буйына сығып ямғыр саҡыра торғайныҡ.

**1-се бала:** Өләсәй, нисек итеп ямғыр саҡыра торғайнығыҙ?

**2-се бала:** Һөйлә әле, һөйлә, өләсәй!

**Өләсәй:** Һөйләп кенә ҡалмайым әле, әйҙәгеҙ, әхирәттәр, балалар, йыйынайыҡ та, һыу буйына барайыҡ. Унда күмәкләшеп ямғырҙы ла саҡырырбыҙ. Үҙегеҙ менән тары ярмаһы, май алығыҙ, бутҡа бешерербеҙ.

**1-се ағинәй:** Ысынлап та, әйҙәгеҙ барайыҡ!

**2-се ағинәй:** Ял итеп ҡайтырбыҙ...

**Өләсәй:** Әйҙәгеҙ, ҡуҙғалайыҡ, хәйерле сәғәттә.

*Йыйынып, сығып китәләр. Һыу буйына килеп урынлашалар.*

**Өләсәй:** Ямғыр теләр алдынан доға ҡылып алайыҡ! (Доға ҡылалар).

**1-се ағинәй:** Аллаһы Тәғәлә беҙҙең доғабыҙҙы ҡабул итһен өсөн, әйҙәгеҙ, теләк теләп алайыҡ! Теләкте үҙем башлап ебәрәйем.

Ий, Аллаһым! Ямғырҙар яумай, еребеҙ ҡорой, шуға өмөт менән һиңә һорарға килдек. Малдарыбыҙ хәлһеҙләнә, үләндәр янып-көйә. Сәскән игендәребеҙ кибә.

Яңылыш ҡылған гөнаһтарыбыҙ булһа, беҙгә асыу тотмауыңды һорайбыҙ. Аллаһым, рәхмәт йөҙөнән, өҫтөбеҙгә болоттарыңды ебәр. Еребеҙгә муллыҡ ямғырҙарыңды яуҙыр! Амин!

**3-сө ағинәй:** Ий, Аллаһым! Һинән туйғансы эселәсәк, таҙартып терелтәсәк, бәрәкәтле итәсәк, тамырҙарҙы нығытасаҡ, емештәрҙе бешерәсәк, япраҡтарҙы йәшел итәсәк һыу һорайбыҙ. Амин!

**4-се ағинәй:** Раббым, күктәреңдән беҙгә мул итеп ямғыр яуҙыр! Амин!

**5-се ағинәй:** Аллаһыбыҙ, игендәрҙе үҫтер, малҡайҙарыбыҙҙың елененә һөт тултыр! Беҙгә күктән мул итеп ямғыр яуҙыр! Амин!

**6-сы ағинәй:** Күтәргән ҡулдарыбыҙҙы кире ҡайтарма, шифалы ямғырыңды бир, Хоҙайым! Амин!

**1-се бала:**

Ямғыр, яу, яу, яу,
Тәтәй ҡалаҡ бирермен,
Майлы бутҡа бирермен.
Ямғыр, яу, яу, яу,
Майлы бутҡа - ҡаҙанда,
Тәтәй ҡалаҡ - баҙарҙа,
Ямғырҡайым, яу, яу!

**2-се бала:**

Яу, яу, ямғырым,
Беҙгә аслыҡ килмәһен,
Һыйырҙарҙа һөт булһын,
Халыҡ астан үлмәһен,
Яу, яу, ямғырым!

**3-сө бала:**

Ямғыр яу, яу, яу,
Иген үҫһен тау, тау,
Арыштан, бойҙайҙан,
Беҙ һорайбыҙ Хоҙайҙан.

**4-се бала:**

Ямғыр яуһа, ергә май,
Ямғыр яуһа, кем дә бай.
Ямғырым, ямғырым,
Яу, яу, ямғырым!

**5-се бала:**

Иген үҫһен ишелеп,
Асыҡмаһын кешелек.
Һыйырҙарға һөт төшһөн,
Тәпәндәргә май төшһөн!

**6-сы бала:**

Ямғыр, яу, яу!
Майлы бутҡа бирербеҙ,
Ерҙе гөлгә төрөрбөҙ.
Һыу сәсрәтеп, ер тетрәтеп
Яуғаныңды көтөрбөҙ.
Ямғыр, яу, яу!

**2-се ағинәй:** Эй, Аллаһ, ерҙе, йәшеллекте ҡотҡарыусы ямғырыңды яуҙыр. Амин!

**3-сө ағинәй:** Ий, Аллаһ! Үҙ ҡолдарыңды, хайуандарыңды ямғыр менән һуғар, үҙ рәхмәтеңде тарат, илеңде терелт! Амин!

**Бөтәһе бергә:** *(3 тапҡыр)* Ий, Аллаһ, беҙгә ямғыр яуҙыр! Амин!

**Өләсәй:** Ямғыр теләгәндә, шулай уҡ ырымдар ҙа бар. Мәҫәлән, оҙаҡ ямғыр яумай торһа, тау башына менеп, теләк теләп, шундағы таштарҙы итәккә тултырып алып төшөп, һыуға һалғандар. Һәм күп тә үтмәй ямғыр яуған.

**1-се ағинәй:** Ямғыр яуһын өсөн берәй кешенең ҡаҙанын урлап, һыуға түңкәреү йолаһы ла булған. Ямғыр яуғас ҡына, урланған ҡаҙанды хужаһына ҡайтарып биргәндәр.

**4-се ағинәй:** Ямғыр яумаһа, тәрилкәгә доға яҙып, бағана башына ултыртып, һыу һалаһың. Шулай итһәң, ямғыр яуа торған булған.

**5-се ағинәй:** Тәлмәрйенде тотоп, ағасҡа бәйләһәң дә ямғыр яуған.

**6-сы ағинәй:** Ямғыр яумаһа, яуын бутҡаһы йыйыны ҡорғандар. Һыу буйында бутҡа бешереп, сәй ҡайнатып эсеп, теләк теләгәндән һәм бербереһен һыуға ырғытҡандар. Шунан ямғыр яуған.

**1-се ағинәй:** Бына беҙ ҙә бөгөн яуын бутҡаһы йыйыны ҡорҙоҡ. Бик матур теләктәр теләнек. Шулай уҡ күп кенә һынамыштарҙы иҫкә төшөрҙөк. Хәҙер һеҙ уйнап алығыҙ, ә беҙ ҡаҙан яғын ҡараштырайыҡ.

*Уйындар уйнайҙар, йырлашалар.*

- Әйҙәгеҙ, һыу һибешәйек.
- Аҡ тирәк, күк тирәк уйнайыҡ!

**Өләсәй:** Бутҡа ла өлгөрҙө. Әйҙәгеҙ, ултырышығыҙ! (Бутҡа һалып бирә). Бисмилла итеп ашағыҙ!

*Ашап бөткәс, ашҡа доға ҡылына.*

**Земфира КӘРИМОВА.**
**Белорет районы**
**Сосновка ауылы.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Республика райондарындағы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаларының бөгөн иң йыш үткәргән сараһы, әлбиттә, ошо "Ямғыр теләү" йолаһын атҡарыу. Сөнки быйылғы йәй, күреп тораһығыҙ, ерҙе ямғырға туйындырырға ашыҡмай. Белорет районы Үҫмәнгәле ауылында үткән йола атҡарыу тураһында ағинәйҙәр шулай тип яҙа:"Май айынан уҡ ямғыр күҙе лә төшкәне булманы. Шуға күрә 12 июндә ауылыбыҙҙа "Ямғыр теләү" байрамы үткәрергә булдыҡ. Ауылдаштар, балалар менән ауылыбыҙҙың матур яланында йыйылышып, ҙур ҡаҙанда дуҫлыҡ бутҡаһы бешерҙек. Өҫтәл тәм-томға, ҡоймаҡҡа тулы булды. Телеңде йоторлоҡ тәмле бутҡанан тыш, табындағыларға хуш еҫле самауыр сәйе лә таратылды. Табындан һуң балалар ҙа, өлкәндәр ҙә күңелле итеп һыу һибеште, ямғыр теләү һынамышын әйтте, ҡөҙрәтле Аллаһы Тәғәләнән ямғыр һорап, доға ҡылды. Халыҡтың изге теләктәрен ишеткән шикелле, шул уҡ кис матур итеп ямғыр яуып үтте, күҙҙең яуын алырлыҡ булып йәйғор нурҙары ҡалҡты..."**



✓ ***Тәмәке есе килгән мастерҙан да, официанттан да, һатыусынан да баш тартып, икенсеһен һорай алаһығыҙ. Ул саҡта эшкә алыусылар ҙа ҡул аҫтындағыларға гигиена тәртиптәрен ҡәтғиләтә төшәр.***



*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# НАСАР ҒӘҘӘТТӘН...

**Исламда сәләмәт рух һәм сәләмәт тән менән бәйле идея бик юғары. Мәҫәлән, Ислам дине тәмәке тартыу күңек йәмғиәтебеҙҙә ғәйәт ныҡ таралған насар ғәҙәткә кире ҡарай.**



Бөгөнгө көндә тәмәке тартыуҙың кеше һаулығына насар тәьҫир итеүен дәлилләгән кире ҡаҡҡыһыҙ фәнни факттар бар һәм улар бер үк нәмә тураһында һөйләй: тәмәке тартыу хәрәм эш. Сүрәләрҙә әйтелгән: "Үлтермәгеҙ һәм үҙегеҙҙе үлемгә этәрмәгеҙ! Аллаһ ысын мәғәнәһендә һеҙгә мәрхәмәтле!" "Һаулығыңды буштан-бушҡа исраф итмә. Исрафлыҡ - Иблестең туғандары, ә Иблес Аллаһҡа тоғро түгел".

Тәмәке тартыусылар йыш ҡына: "Миндә һеҙҙең ни эшегеҙ бар?"- тип һорарға ярата. Был бөтөнләй дөрөҫ түгел. Бигерәк тә махсус рәүештә билдәләнгән урында ғына түгел, һәр ҡайҙа - урамда ла, подъезда ла тәмәке тартҡан кешеләр үҙҙәренең дә һаулығын бөтөрә, башҡаларҙы ла аямай. Тартмаған кешенең өйөндә тәмәке көйрәтеү - иң ҙур әҙәпһеҙлек, сөнки бүлмәләрҙәге еҫ һеҙ сығып киткәндән һуң да оҙаҡ ҡына һаҡланып ҡаласаҡ.

Тәмәке тартҡан ҡатын-ҡыҙҙарға килгәндә инде, насар ғәҙәткә бәйле сирҙәр үпкә яман шеше, йөрәк өйәнәктәре һ.б. менән генә сикләнеп ҡалмай әле. Әгәр ҙә буласаҡ әсә тәмәке тарта икән, балаһын да тәҙәлмәҫлек сирҙәргә дусар итеүе бик ихтимал. Ауырлы саҡта тәмәке тартыу иң тәүҙә ҡарындағы балаға кислород етмәүенә килтерә. Тәмәке тартыусы ҡатын-ҡыҙҙарҙың балалары ваҡытынан алда, йә ауырлығы етмәй, йә ғәрип булып тыуа. Шулай уҡ былдай балалар төрлө инфекцияларға һәм астма ауырыуына бирешеүсән була, тип иҫәпләй табиптар. Әлбиттә, кешенең тәмәке тартырға йәки тартмаҫҡа хоҡуғы бар, әммә ләкин ҡатын-ҡыҙ йөклө сағында йәки балалары алдында тәмәке тарта икән, ул балаларына бер ниндәй ҙә һайлау ҡалдырмай.

Иң ҡулайы - тәмәкене бөтөнләй тартмау. Ҡатын-ҡыҙға тәмәке тартыу бер ҙә матурлыҡ та, сәләмәтлек тә өҫтәмәй. Бәғзе берәүҙәр тәмәкене тынысланыу, үҙен ышаныслы итеп тойоу өсөн тарта. Ундай осраҡтарҙа кешегә бары тик бер юл ҡала - Аллаһҡа ялбарыу. Ул ғына һеҙҙең күңелегеҙгә тынысланыу һәм ярлыҡау, ышаныс килтерер. Рухи яҡтан ныҡ тороу өсөн доғалар уҡыу, зекер әйтеү зарур.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# ҠАТЫН-ҠЫҘҘЫ...

## кем тәмәкесе иткән?

**Бөгөн ҡатын-ҡыҙҙар араһында тәмәке тартыу шул хәтлем киң таралған. Ҡала ерендә бигерәк тә. Коллективта 10 ҡатын-ҡыҙ булһа, шуларҙың етәүһе мотлаҡ тәмәкесе.**

Иртәнсәк эшкә китеп бараһың, бөтә учреждение, сауҙа нөктәләре, парикмахерскийҙар, сәскә магазиндары, поликлиника һәм башҡа биналар алдында тәмәке тартып торалар. Ир-егеттәр ҙә етерлек, әммә ҡатын-ҡыҙ айырыуса күп. Эш көнөн улар шулай тәмәке көйрәтеүҙән башлай. Ҡайҙан килеп хасил булған һуң ул ҡатын-ҡыҙ араһында ундай күмәк тәмәкеселек?

1920 йылдарға тиклем ҡатын-ҡыҙға тәмәке тартыу тыйылған. Тәмәке тартыу юғары белем алыу йәки Конгресҡа һайланыу кеүек, бары тик ир-егеткә бирелә торған ғына хоҡуҡ иҫәпләнгән. Шул ваҡыттарҙа ныҡлап үҫешә башлаған тәмәке компаниялары өсөн был ҡулайлы булмаған. Америка тәмәке компанияһы президенты Джордж Вашингто Хилл: "Их, алтын шишмә танау особоҙҙан ғына ағып үтеп бара ла бит..." - тип әсенгән. Ҡатын-ҡыҙҙы тартырға өгөтләп, сигарет менән нисек кенә ҡыҙыҡтырып ҡараһалар ҙа, мәҙәни һәм әхлаҡи нормалар сиген ашатлап сығып булмаған. Ни эшләргә? Нисек сауҙаны шаулатып ебәрергә? Шул араларҙа, 1928 йылда, компанияға йәш, белемле һәм сикһеҙ идеялар менән ҡайнап торған Эдвард Бернейс маркетинг белгесе булып эшкә килә. Ул заманда маркетинг намыҫ төшөнсәһенә генә нигеҙләнә. Продукцияңды бары тик ысын сифаттары менән генә күрһәтергә тейеш булаһың. Мәҫәлән, сыр һатыусы үҙенең сырының нимәләрҙән эшләнеүен алдаҡһыҙ әйтә һәм уның файҙаһының ысынбарлығын ғына һөйләй. Һәм һатып алыусы ошоларға ҡарап, рациональ рәүештә, йәғни аҡылға таянып, хәл итә - алырғамы-алмаҫҡамы. Ә Бернейс был тәңгәлдә икенсерәк фекерҙә була. Ул халыҡтың тап аҡыл менән уйлап һатып алыуына ышанмай. Ул, ғөмүмән, кешене артыҡ аҡыллыға һанамай. Әҙәм менән күберәк эмоциялар һәм аңһыҙлыҡ идара итә, ти. Ә инде ҡатын-ҡыҙҙа тәмәкегә ҡарата йылы ҡараш уятыу өсөн иң башта йәмғиәттең фекерен үҙгәртергә һәм сигарет тартыуҙы ыңғай эмоциональ күренеш итеп ҡабул иттерергә кәрәк икәнде тыҡлый. Быны тормошҡа ашырыу өсөн Бернейс ҡаланың иң сибәр моделдәренән торған төркөм төҙөй. Уларға быһын өсөн ҙур суммалар түләнә. Һәм Нью-Йорктың Пасха парадында (ул ваҡыт парадтар популяр була) ошо һылыу, матур, бай кейенгән ҡатын-ҡыҙҙар төркөмө ҡупшы итеп атлап килә лә, тап үҙәккә еткәс кенә барыһы бер юлы кеҫәләренән сигарет сығарып тоҡандыра. Был күренеште төшөрөү өсөн махсус фотографтар ялланған була. Һүрәттәр илдең төрлө баҫмаларында урын ала. Бернейс интервьюһында: "Был ҡатындар сигарет ҡына тоҡандырманы, улар ирек факелын яндырҙы", - тип ялҡынлы телмәр тота. Шул мәл сигарет тартып торған бай кейемле, һомғол буйлы ҡатын гүзәл зат араһында "үҙ аллы, хәлле, ирекле" булыу төшөнсәләренә визуаль портрет яһай. Бернейс ҡатындарҙың тәмәкегә тотоноуын сәйәси протест кимәленә күтәрә ала. Уның планы тормошҡа аша - ҡатын-ҡыҙ тәмәкесегә әйләнә...

# ТӘРТИП КЕМДӘН ТОРА?

**Матурлыҡ салонында тырнаҡ буятып ултырам. Барыһы ла яҡшы, барыһы ла һәйбәт, тик мастер ҡыҙҙың яңы ғына тәмәке тартып ингәне беленә бит. Битлек кейһә лә, ҡулынан, үҙенән тәмәке еҫе сыға. Сыҙарға тырышып ултыра торғас, ауырып киттем. Күңелем болғанды, хәлем бөттө. Ахырҙа "Мине һеҙҙең сигарет еҫе ауырыта" - тинем. "Это дамские сигареты, там и запаха нет", - ти был. Эш тамамланмаған бит инде.**

Администраторҙарын саҡыртып, икенсе мастер һораным. Уныһын көтөргә тура килде, әммә теге тәмәкесе ҡыҙҙа башҡаса яҡын юлатманым Минең дә ваҡытты алды, әтнәкә, салон өсөн дә һабаҡ булды. Тартҡан хәлдә лә клиент менән эш итер алдынан сафланып-бөхтәләнеп алырға тейеш тә инде ул. Быны салон етәксеһе лә ҡабул итте, минең талапты үтәнеләр.

Шуның кеүек хәлдәр булып тора. Мәҫәлән, йыш ҡына аҙыҡ-түлек магазиндары янында һатыусылар тартып тора ла, һатып алыусы килгәнде күреп, йәһәтләп инеп прилавка артына баҫа. Пекарня, емеш-еләк, туңдырма һатылған урындарҙа ла шулай. Тәмәке тартыуҙы барыбер ҙә сикләй алмайҙар. Һәм бик һирәктәр генә, моғайын, ҡулынан тәмәке еҫе лә китеп етмәгән кеше хеҙмәтләндереүенән баш тарта ала. Ә асылда һеҙҙең ундай хоҡуғығыҙ бар. Тәмәке еҫе килгән мастерҙан да, официанттан да, һатыусынан да баш тартып, икенсеһен һорай алаһығыҙ. (Мин хатта такси алғанда ла тәмәке тартмаған водителде, салонда бензин, тәмәке йәки хушбуй еҫе булмаған машинаны һорайым.) Ул саҡта эшкә алыусылар ҙа ҡул аҫтындағыларға гигиена тәртиптәрен ҡәтғиләтә төшәр, тәмәке тартыусылар ошо сиктәрҙә тоторға тырышыр ине. Тәртип хеҙмәтләндереүселәрҙән генә түгел, ҡулланыусыларҙан да тора...

**Миләүшә ХӘБИЛОВА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

## 26-сы идея Һине фекерҙәрең хасил итә

Һин ҡасан да булһа нимәләр тәҙәргә маташҡаның бармы? Минеңсә, беҙҙең һәр беребеҙ үҙ ғүмерендә нимәләр төҙөй. Йоҡламаған, уяу саҡта ла беҙ туҡтауһыҙ үҙ аңыбыҙҙы төҙөү, тәртип, ғәмәлдәр һәм реакция структураһын теҙеү менән мәшғүлбеҙ. Беҙ төҙөгән бинаны күреп тә, ишетеп тә булмай, шуға күрәләр ҙә, моғайын, уны күптәребеҙ һиҙмәйҙер.

Шуға ҡарамаҫтан, беҙҙең бөтә тормошобоҙҙоң иң нигеҙле һәм алға барыусы эшмәкәрлеге - үҙ аңыбыҙҙы һәм тәртибебеҙҙе төҙөү. Беҙҙең һәр ҡайһыбыҙ, был турала уйланмаһа ла, даими шуның менән мәшғүл. Минут һайын, сәғәт һайын беҙ яҡшылыҡ йәки яуызлыҡ, уңыш йәки еңелеү, бәхет йәки бәхетһеҙлек төҙөйбөҙ. Беҙ быларҙың барыһын да уйҙар, аңыбыҙҙа тупланған идеялар, ышанып ҡабул ителгән төшөнсәләр, аңыбыҙҙың йәшерен студияһында әҙерләнгән күренештәр, ваҡиғалар һәм һөйләшеүҙәр ярҙамында төҙөйбөҙ.

Аңыбыҙҙың йәшерен студияһына эләккән актерҙар беҙҙең тормош драмаһынан айырыла. Тормош драмаһы аңыбыҙ студияһында әҙерләнә, һәм тышта барған хәлваҡиғалар - ул бары тик сценарийҙы үҙ аҡылыбыҙға буйһондороп, көн һайын репетициялар яһап әҙерләнеп башҡарылған драма ғына ул.

Һин даими төҙөгән бина - ул һинең "Мин"ең, һинең ысын "Мин"ең, был ерҙәге һинең шәхесең, кешелек асылы булараҡ, һинең тормош тарихың, һинең булмышың.

Әгәр һин тәжрибәле, аҡыллы булһаң, әгәр айыҡ фекер йөрөтһәң, хәҙерге белемең менән төплө итеп төҙөй алаһың. Аңыңда төйәк тапҡан нәмәләр өсөн яуаплылыҡ тоя башлаясаҡһың. Тормошоң драмаһында уйнаған актерҙарға әүерелгән фекерҙәр һәм ҡараштар ғына борсоясаҡ һине.

Әйтәйек, һин пьеса ҡуйырға йыйынаһың, ти. Урамға сығып, осраҡлы кешеләрҙе йыймаясаҡһың бит. Иң һәләтле актерҙарҙы эҙләп табасаҡһың.

Аңың студияһында ла шулай булһын. Унда яҡшы ролдәрҙе башҡара алырлыҡ актерҙарҙы йый - мөхәббәт, изгелек, тоғролоҡ, ҡыйыулыҡ һәм аҡылды. Уларға студияңдан урын бир, сөнки һинең иғтибарыңды сорнап алған нәмә һинең үҙеңде лә сорнап аласаҡ. Һине фекерҙәрең хасил итә.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# САЛ ТАРИХТАЙ СЕРЛЕҺЕҢ ҺИН, БАШҠОРТ ЙЫРЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**23-сө һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Титов. Ғарипов. Ҡанат. Комик. Андыҙ. Әрекмән. Өсмөйөш. Түмәр. Тешләм. Токио. Сәс. Сәләм. Кәмә. Таяҡ. Кәрим. Йәйә. Афиша. Нотоҡ. Мосафир. Назарат.

**Вертикаль буйынса:** Өмөтбаев. Комбикорм. Йомортҡа. Ғәли. Фарман. Кәштә. Тараҡ. Суҡыш. Аждаһа. Никольский. Әҙәми. Виват. Рәт. Ант. Сәкән. Үксә. Әрйә. Ҙур. Мамыҡ.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

***1441 һижри йыл.***

| Июнь (Зөлҡәғиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 22 (1) дүшәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 23 (2) шишәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 24 (3) шаршамбы | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 25 (4) кесе йома | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 26 (5) йома | 3:13 | 4:43 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 27 (6) шәмбе | 3:13 | 4:43 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 28 (7) йәкшәмбе | 3:14 | 4:44 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |

***"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.***

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ*

# ҠАЙҺЫ ҠОЛАҠ?

**Бала уң ҡолағы менән ишеткәнде яҡшыраҡ аңлай һәм хәтерендә ҡалдыра, был ғалимдар тарафынан күптән дәлилләнгән.**

Әммә өлкәнәйгәс тә был өҫтөнлөк һаҡланамы? Ғалимдар ошо һорауға яуап эҙләгән. Уң ҡолаҡ аша ингән тауыштар баш мейеһенең һул яҡ ярымшары тарафынан эшкәртелә. Ә был өлөш телмәр һәм хәтер менән бәйле. Һәр ҡолаҡ мәғлүмәттең айырым өлөштәрен ишетә һәм һуңынан улар ишетеү системаһында берләштерелә. Тик бәләкәй балаларҙың ишетеү системаһы ике ҡолаҡҡа ла бер юлы ишетелгән мәғлүмәтте айыра алмай. Шуға ла улар уң ҡолағы менән яҡшыраҡ ишетә. Һынауҙар күрһәтеүенсә, өлкәндәрҙә лә был һәләт һаҡлана, тик улар бының менән ҡулланыуҙы онота.

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

# ҒАИЛӘЛӘР МЕНӘН...



**Салауат Юлаев көндәрен билдәләү барышында Башҡортостанда "Салауат тоҡомдары сигенә белмәй" ғаилә онлайн-квесы уҙҙы. Ул 2020 йылдың 8 июнендә башланғайны. Унда ата-әсә (йәки уларҙың береһе) һәм 16 йәшкә тиклемге балаларҙан торған командалар ҡатнашты.**

Бөтә эштәрҙе башҡарып сығыу һөҙөмтәләре буйынса беренсе урын Абдуллиндар ғаиләһенә бирелде (төбәк кураторы - латыш тарихи-мәҙәни үҙәге). Икенсе урынға Фәхриевтар һәм Юлбарыҫовтар ғаиләһе ("Сәйетбаба" башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәге), шулай уҡ Яхъяевтар ("Никольский ҡорамы" тарихи-мәҙәни үҙәге) лайыҡ булды. Өсөнсө урын Лобановтар ("Ҡыҙылъяр" рус тарихи-мәҙәни үҙәге) һәм Аҡбулатовтар (Төмән өлкәһе, ХМАО- Югра башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәге) ғаиләләренә тапшырылды. "Күпме быуат үтһә лә, милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың Башҡортостан халыҡтарын берләштереүе, ғаиләләрҙе бергә туплауы бик ҡыуаныслы, - тине конкурсты ойоштороусы, "Ҡыҙылъяр" рус тарихи-мәҙәни үҙәгенең баш белгесе Венера Фарганова. - Беҙҙең квеста шундай сағыу, матур ғаиләләр ҡатнашты!"

# РӘМИ ФИЛЬМЫ...

**Режиссер Булат Йосопов "Рәми. Шағир көндәлеге" нәфис фильмының кинопробаһын тәҡдим итте. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, фильм Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповҡа арналған.**

Кадрҙар Өфөнөң Матбуғат йортонда төшөрөлгән. Төп геройҙы Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры актеры Артур Ҡунаҡбаев уйнай. "Был әлегә фильм түгел! Был - кинопроба! Шуға ҡаты хөкөм итмәгеҙ. Был роликта мин бөйөк шағир тураһында фильмдың атмосфераһын һәм фактураһын эҙләнем, - тип хәбәр итте режиссер үҙенең сәхифәһендә. - Коронавирус паузаһынан һуң фильмды барыбер төшөрөрбөҙ тип ышанам!" Рәми Ғарипов тураһында фильм - "Беренсе Республика" трилогияһының һуңғы өлөшө. Уға "Бабич" һәм "Беренсе Республика" картиналары инә, өсөнсө өлөшө - "Рәми. Шағир көндәлеге". Трилогия республиканың күренекле мәҙәниәт эшмәкәрҙәренә арналған.

# БАШҠОРТ БЕЙЕҮЕН...

**Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле артисы Айбулат Баһауетдинов бейеү сәнғәтенә арналған халыҡ-ара онлайн-проектта ҡатнашты.**

Коллективтың матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, сығышты 12 июндә киске сәғәт 6-ла (Мәскәү ваҡыты) instagram.com/idc.danceisdance аккаунтында ҡарарға мөмкин ине. "Мин башҡорт бейеүен халыҡ-ара кимәлдә танытыуыма, ысын башҡорт рухын күрһәтеүемә шатмын. Халҡыбыҙҙың бик ҡыҙыҡлы тарихы, бай мәҙәни мираҫы бар, башҡорт бейеүе уның айырылғыһыҙ өлөшө булып тора", - ти Айбулат Баһауетдинов. International Dance Center - донъяның профессиональ артистары төрлө бейеү йүнәлештәре буйынса онлайн оҫталыҡ дәрестәре үткәргән проект ул. Ай һайын проектты ойоштороусылар яңы йүнәлештәр менән таныштыра. Июнь халыҡ бейеүе айы булды. Тәүге оҫталыҡ дәресен Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы, Игорь Моисеев исемендәге ансамбль артисы Рәмил Мехдиев, артабан Кубань казак хорының балет артистары Варвара Губарева һәм Ангелина Демина күрһәтте.

*✔ Беҙ, Хоҙай беҙҙе өҫтән күреп тора, тип хаталанабыҙ, Хоҙай беҙҙе эстән күрә.*

*(Жильбер Сесброн).*



*ЗАУЫҠ*

*Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА*

# "МИН ДӘ ҺИНДӘ ҠУНАҠ ҠЫНА, ДОНЪЯ, Көн итәмен шуға тыйнаҡ булып"



### Ҡунаҡлыҡ

Мин бит һинә саҡырылып килдем,
Табыныңда бер аҙ булмаҡ булып,
Мин дә һиндә ҡунаҡ ҡына, донъя,
Көн итәмен шуға тыйнаҡ булып.
Һөмһөҙ түгелмен мин, әрһеҙ түгел,
Булһан да һин мулдан һыйламаҡтан.
Юҡ, тығыныу түгел, минең ниәт
Аҙ ултырып, күпте һынамаҡтан.
Ҡунаҡ аяғымды һорап алып
Эсмәйем мин, - иҫле ҡыланамын.
Ҡапҡан һайын ҡалъя ҡабыуҙан бит
Тыйыламын, бик тә ояламын.
Көн дә байрам, көн дә туй туйлауҙан
Һаҡланамын, ҡурҡам, тартынамын.
Түр башынан төшә белмәгәнде
Ваҡыт хөкөмөнә тапшырамын.
Саҡырылған ергә киләмен гел,
Китәм ҡыуған, эткән-төрткән ерҙән.
Һәр ҡунаҡ та сығып китә бер мәл
Ер еҫеме тигән ҡунаҡ өйҙән.
Артыбыҙҙан Хужа ҡарап ҡала,
Яҡшы-яманыбыҙ тоймаҡ булып.
Бик еңелдән түгел ҡунаҡ булыу,
Тәмле урындарҙа тыйнаҡ булыу...

### Сығанаҡтар

Моң - ҡурайҙың сығанағы,
Аһәңлер йөрәктең,
Сырағылыр йән күгенең,
Тереһыуы милләттең.
Ҡылыс - ҡындың сығанағы:
Тиккә генә һурылмай.
Оран йөндән сығарылһа,
Илдең өнө тығылмай.
Уҡ - керештең сығанағы,
Бөреп сыҡҡан инеше.
Ҡомар бирә, алға әйҙәй
Уҡтай ваҡыт елеше.
Һыу алғысы, юл алғысы,
Берҙән-бер башланғысы -
Уҙаңы һәм милли рухы
Һәр ҡәүем һаҡланғысы.
Йәншишмәләр урғып ята
Аң төбөнән - тәрәндән.
Ваҡыт тере, иҫән, мәңге
Сығанаҡлы әҙәмдән.

### Ололоҡлау

Милләт - олон. Ырыу - ботаҡ.
Баһаға улар лайыҡ.
Иң әүәле тамырлыны -
Олондо ололайыҡ!
Унан ҡала олонлоно -
Ботаҡты хөрмәтләйек:
Ололайыҡ тармаҡтарын,
Ҡәҙерләү күрһәтәйек!
Унан ҡала ботаҡлыны -
Япраҡты яратайыҡ:
Үҙебеҙҙе юғалтмайыҡ,
Тупраҡлыны һаҡлайыҡ!
Ер-һыуыбыҙ таланылһа,
Ҡорор аҡ тамырыбыҙ,
Йәштәргә алмаҫ беҙҙе, -
Туҡтар ҡан ағымыбыҙ.
Һыу тыуҙырған, һыу үҫтерә
Олонло, ботаҡлыны.
Ололоҡлай, һөйә Ҡояш
Япраҡлы, ҡыуаҡлыны!

### Сәүектәр

Каруан инде ары киткән,
Бирелә эттәр өрә.
Тарих ҡалдырған шаңдауҙың
Артынан сабып килә.
Ваҡыт туҡтап тора алмай,
Сәүек баҫтыра тиеп.
Дауам итә юлын халыҡ,
Юлдар саҡыра, тиеп.
Үткән өрә, оҙатып ҡала
Быуат үтеп китҡәс тә.
Тейәп китеп булмай уны
Доңъялыҡ ҡаҙыныуҙа....
Донъя шулай алға бара,
Әкренәймәй, тиҙләнә,
Яҡшы яҡҡа үҙгәрмәһә,
Яман яҡҡа үҙгәрә.
Кеше шулай дәүеренең
Эйәрендә сайҡала.
Өргән сәүектәрҙән түгел,
Өрмәҫ эттән һаҡлана.
Аҫтыртынлыҡ, мәкертенлек
Уның тешләр дошманы,
Башын ашай ҡалһа әгәр
Йәндәй күргән дуҫтары.
Алға бара алмағандар
Шулай артҡа китәләр.
Каруандарға сәләм биреп
Сәүектәр ләңк итәләр...

### Өлгө

Уртлайбыҙ, тик йотмайбыҙ
Мәңгелектең шишмәһен.
Ҡабабыҙ, тик баҡыйҙың
Ашамайбыҙ икмәген.
Уртлайбыҙ ҙа йотабыҙ
Мәлләклек эсемлеген.
Тоябыҙҙыр фанилыҡ
Ни нәмә өсөнлеген.
Өҫтәлендә ваҡыттың
Йәйәбеҙ ашъяулыгын.
Тешләйбеҙ ҙә сәйнәйбеҙ
Донъялыҡ ашамлығын.
Һемерәбеҙ ғүмерҙең
Йота алған тиклемен.
Мөмкин түгел эсергә
Йыһандарҙың төпкөлөн.
Бер көн илгә бөркөргә
Йәншишмәне уртлайбыҙ.
Урал башҡорт өлгөһөн
Беҙ - башҡорт, онотмайбыҙ!

### Ҡорал

Тарихыбыҙ - ҡоралыбыҙ,
Айҡар ҡылысыбыҙ - һүҙ!
Һүҙебеҙ азат булғанда
Баш эйелмәҫ, сүкмәҫ теҙ.
Күңел ирекле сағында
Менер атыбыҙ - оран!
Халҡыбыҙҙың сигенмәүен
Көтәләр беҙҙән Урал.
Тешләнмәгән телебеҙҙә
Көсәбеҙ сағылышы.
Ҡанға тулған уртыбыҙҙа
Яҙмыштың һынамышы.
Күрәшебеҙ саралары
Уғыбыҙ түгел хәҙер.
Шиғыр - ҡорал, сардарлыҡҡа
Шағирҙар булһа әҙер.
Һәләкәттән еребеҙҙе
Хаҡ һүҙебеҙ яҡлар саҡ.
Ҡылыс түгел, әйҙәр байраҡ
Майҙандарҙы байҡар саҡ.

*ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ*

## ҠАМҠА, ЙӘҒНИ КҮСАПАЙ



**Башҡорт һөйләштәрендә бер мәғәнәле һүҙҙәрҙең күплеген күреп хайран ҡалырлыҡ. Мәҫәлән, әҙәби телдәге ҡамҡа (божья коровка) һүҙенең ниндәй генә варианты юҡ. Беҙ үҙебеҙ ҙә бәләкәй саҡта "Күсапай, күсапай, ҡояшҡа күсеп кит, апай", тип теләк теләй торғайныҡ уға өндәшеп...**

Ҡамҡа һүҙе башҡорт һөйләштәрендә иң ҙур синонимик рәт тәшкил итә. 1986 йылда баҫылып сыҡҡан "Төрки телдәре диалектологияһы һәм лингвогеографияһы мәсьәләләре" китабында был һүҙҙең барлыҡ синонимдары теркәлгән: алла бабай һыйыры, алла титейе, аллатәтәй, алматутай, биҙәкле ҡуңыҙ, гөҙ, гүзбабай, диңгәсәй, йеңгәсәй, йеңгәрсәй, йетенөктә, күсапай, күсмәкүс, күсәбей, күсмә, күсем, күсмәнкүс, күсемкүс, күсәрхан, күскәнәй, көйәпапа, кейәүпапа, көжмә, көзмә, ҡаңғабиҙәр, ҡаңғыәбей, ҡойашҡорт, ҡойашапай, ҡойашымбаҡ, ҡатыҡорт, ҡыҙыл ҡандала, ҡыр һыйыры, ҡатыҡабыҡ, ҡыҙыл һыйыр, ҡуңыҙ, ҡапҡауыс, ҡылайтун, земелей, сыбар һыйыр, сибәрапай, сеңгәсәй, сыуағапай, осйөҙөгөм, оскөсөк, осомос, осайаҡ, осҡалаҡ, тутапай, тәтәйәбей, тутыйапай, тәтәйҡош, уасыпый, урмаңкүҙ, үрмәкүс, әбейкүс, әпипә, әбейсыуаҡ һ.б.

Әлбиттә, хәҙерге заманда был һүҙҙәрҙең күбеһе ҡулланылыштан төшөп ҡалған. Хатта балаларыбыҙ ҙа "божья коровка" тип кенә һөйләшә. Ошондай матур мәғәнәле һүҙҙәребеҙҙе онотмайыҡ, юғалтмайыҡ.

**Айһылыу ВАХИТОВА.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ЯМАНҒА ӘЙТКӘН АҠЫЛ - далаға атҡан уҡ

Йыраҡ тип ханға тел тейҙермә - ҡулы етер, насар тип ирҙе әрләмә - ҡарыуы етер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ир кеше тәүге үбешеүҙе йәшереп кенә ала, икенсеһен ялбарып ала, өсөнсөһөн талап итә, дүртенсеһен һорамай ала, бишенсеһен ҡабул итә, ҡалғандарына түҙемлек күрһәтә.

**(Хелен Роуленд).**

Әгәр ҙә барыһы ла аҡыллы ҡатындарға өйләнһә, матурҙарын ҡайҙа ҡуйырға һуң?

**(Данил Рудый).**

Уҡытыусы ҙур абруйға һәм... бәләкәй власка эйә булырға тейеш.

**(Томас Сас).**

Беҙ, Хоҙай беҙҙе өҫтән күреп тора, тип хаталанабыҙ, Хоҙай беҙҙе эстән күрә.

**(Жильбер Сесброн).**

Йәштәрҙе әрләү - өлкән кешеләрҙең айырылғыһыҙ бер гигиена өлөшө, был уларҙың ҡан әйләнешен яҡшырта.

**(Логан Смит).**

Рухи аҙыҡ менән йәшәгәндәр яҙмышҡа буйһоноп бармай.

**(Лев Толстой).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер бай кеше хризантема сәскәләрен бик ныҡ яратҡан һәм йорто янындағы баҡсаны ошо сәскәләр менән тултырып, бар ваҡытын һәм көсөн уларҙы тәрбиәләүгә биргән. Ул хризантемаларҙы ҡатынынан һәм балаларынан да яҡыныраҡ күргән, йорттағы бар хеҙмәтселәрҙе баҡса эшенә йәлеп иткән һәм уларҙың берәйһе бер генә сәскәне яңылыш имгәтһә лә, уны ҡаты язаға тарттыра торған булған. Ҡыҫҡаһы, хризантемалар арҡаһында өйҙә түҙеп торғоһоҙ мөхит тыуҙырылған. Был хаҡта ауылдағы аҡһаҡал белеп ҡала һәм был ғаиләләге бар бәләләрҙең сәбәбен тамырынан юҡ итергә теләп, ямғыр яуған һәм хризантемалар сәскәгә бөрөләнгән бер төндә байҙың баҡсаһына килгән һәм ҡулындағы урағы менән уларҙы урып сыҡҡан. Ҡыштырҙаған тауыш ишетеп, бай ҡулына ҡылыс ала ла баҡсаһына йүгереп сыға. Аҡһаҡалды таный һәм уға: "Бында ни эшләп йөрөйһөң?" - тип ҡысҡыра. Аҡһаҡал тыныс ҡына былай ти: "Хатта үлән дә, ҡырҡып тормаһаң, донъяны баҫып китә". Бай тирәяғына ҡарай һәм урып ташланған сәскәләрҙе күрә. Шул саҡта ул йоҡоһонан уянған кеүек була... Үҙе лә һиҙмәҫтән, сәскә ҡолона әүерелеп яңылышҡанын аңлай ул шунда. Нәфсене, ҡороп китмәһен өсөн, үлсәп йә ҡыҫҡартып торорға кәрәк шул... "**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
19 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3600
Заказ - 485/06